ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кiске Өфө

27-2 март - апрель (буранай - алағарай)

2026

№ 12 (1207)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡорт телен уҡытыусыға**



6

**Инженерҙар ошонда тәрбиәләнә,**



йәки Һүҙ Республика инженер лицей-интернаты тураһында 8-9

**Өҫтәмә белем - ул ижад,**

шуға ла балалар бында бик теләп йөрөй



10

**Ҡурай тураһында...**

һөйләмәү мөмкин түгел



11

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Тормошҡа зарланыр алдынан ғүмере иртә өҙөлгәндәр тураһында уйла. Иреңә зарланыр алдынан күпме ҡыҙ-ҡыркындың кейәүгә сығырға хыяланыуын иҫеңә төшөр. Кеҫкеһеҙ балаларыңа зарланыр алдынан кемдәрҙеңдер көн дә бала һорап Хоҙайға ялбарыуын күҙ алдыңа килтер. Тормошта зарланыр, борсолор, төңөләр нимәләр күп инде ул. Ә һин тик яҡшы нимәләр тураһында ғына уйла! Яҡшыға өмөтлән, яҡшыны ғына күҙ алдында тот!***

ӘЙТ, ТИҢӘГЕҘ...

## ? Күмәк балалы ғаиләлә үҫеү бәхеттең үҙе тиҙәр. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

***Лена МИРХӘЙҘӘРОВА, психолог:*** Ысынлап та, бәхетле булып үҫһен өсөн, минеңсә, бала ғаиләлә берҙән-бер, хатта ике бөртөктөң береһе лә булырға тейеш түгел. Кәмендә ул үҙенең 3-4 һәм унан да күберәк туғандары араһында тәрбиәләнергә тейеш, тип уйлайым Ҙур, күңелле, берҙәм ғаиләлә бала үҙен ысын мәғәнәһендә "үҙ стихияһында" тоя: аралашыусан, асыҡ, киң күңелле, ярҙамсыл булып үҫә. Ә бала яңғыҙ үҫһә, ул күберәк әпәүләүгә дусар ителә. Артыҡ иғтибар һәм туҡтауһыҙ хәстәрлектәр бала ихтыярын сикләй, уға үҙаллы булырға ҡамасаулай. Һөҙөмтәлә ул хатта үҙ-үҙен хеҙмәтләндерергә лә өйрәнә алмауы ихтимал. Өҫтәүенә, ғаиләлә туғандары булмау сәбәпле, үҙенең ише балалар менән аралашыу бәхетенән мәхрүм, шунлыҡтан, ул балалар баҡсаһында һәм хатта мәктәпкә барғас та үҙен сит-ят итеп тоясаҡ һәм әкренләп үҙенә йомола барыуы мөмкин.

Үкенескә, беҙҙә бөгөн йәмғиәт аңы бәләкәй ғаиләләр моделенә ҡалыплашҡан, бигерәк тә ҡала шарттарында. Хатта ауылдарҙа ла шундай ҡараш нығына бара, тип әйтер инем. Бәхеткә, бөтөн урындарҙа ла түгел. Ошо йәһәттән республика Башлығы Радий Хәбировтың күп балалы әсәләргә Рәсәй һәм Башҡортостан дәүләт наградалары тапшырған ваҡытта күңелемә уйылып ҡалған һүҙҙәрен иҫкә төшөрҙөм. Башҡортостан ҙур ғаиләләр йолаһын һаҡлаусы төбәк, тине ул. "Һуңғы биш йылда беҙҙә күп балалы ғаиләләр һаны 14 меңгә артып, йәмғеһе 73 меңгә барып етте. Һәр өсөнсө сабый күп балалы ғаиләлә донъяға килә. Бөгөн был тантанала ҡатнашҡан 11 ғаиләнең 9-ҙы - күп балалы, уларҙа 69 бала тәрбиәләнә. Республикабыҙҙа бөтәһе 10 Герой-әсә бар",- тигәйне республика Башлығы. Миҫал итеп ул Герой-әсә Абдуллина Фаягөл Фаил ҡыҙының ғаиләһендә 11-се сабый тыуыуы хаҡында хәбәр итте. Аҙаҡтан мин Фаягөл менән Илгиз Абдуллиндар ғаиләһенең Көйөргәҙе районы Ермолаев ауылында йәшәүҙәре, әсә кешенең, ҙур ғаилә тәрбиәләүенә ҡарамаҫтан, ауыл почта бүлеге начальнигы, ә иренең торба үткәргес монтажлаусыһы булып эшләүҙәре хаҡында белдем.

Ошо тантанала ҡатнашҡан тағы бер Герой-әсә Рәүилә Хәтип ҡыҙы Тәминдарованың ғаиләһе лә ауыл ерендә - улар Өфө районының Дмитриевка ауылында йәшәй, ире менән 10 балаға ғүмер биргәндәр, әлеге ваҡытта 12 ейәнейәнсәрҙәре үҫә. Шуныһы һоҡландыра: был ғаиләләге балалар бөтәһе лә төрлө уҡыу йорттарында белем алып, илгә кәрәкле һәм етди тармаҡтарҙа эшләйҙәр һәм үҙҙәрен бик бәхетле тоялар.

Был миҫалдан сығып, мин шуны әйтергә итәм: ғәҙәттә, күп балалы ғаиләләргә ҡырыныраҡ ҡараште булыусылар ҙа осрап тора. Йәнәһе лә, "ауырлыҡ" менән йәшәгән балаларҙың киләсәгенә ни өмөт, тигәнерәк мөнәсәбәт йәшәй. Бындай уйлы кешеләр ныҡ хаталана. Киреһенсә, ҙур, берҙәм, татыу ғаиләлә дөрөҫ әхлаҡ тәрбиәһе, хеҙмәт сынығыуы алып үҫкән балаларҙан ысын кешеләр - уңған, маҡтаулы һөнәрмәндәр, хәстәрлекле ғаилә башлыҡтары үҫеп сыға ла инде. Дөрөҫөн әйткәндә, был статус уларға күп йәһәттән тырыш, уңған ата-әсәләренән бирелә, ә улар балаларының киләсәге өсөн яуаплылыҡтың ни икәнен яҡшы аңлай: ҙур, иркен йорт һалып инә, баҡса, мал-тыуар тота, ә был иһә балалар тәрбиәләүҙә иң яҡшы тәжрибә майҙансығына әүерелә. Булдыҡлы ғаиләләрҙән айырмалы рәүештә ҡайтышыраҡ шарттарҙа һәм етешһеҙ йәшәгәндәр ҙә бар, әлбиттә, уның ҡарауы, улар дәүләт ярҙамынан файҙалана, балаларға пособие ала. Әйтеүемсә, ҙур ғаиләләрҙә бала ата-әсәһенең беренсе ярҙамсыһына әйләнә: башҡа туғандарын ҡараша, йорт-хужалыҡ эштәрендә булыша. Шуның менән улар бәхетле лә - ғаилә күнекмәләре киләсәктә уларҙың тормошонда файҙаға ғына буласаҡ һәм үҫеп етеп, үҙҙәре ғаилә ҡорғас, кәрәге бик тейәсәк. Бала саҡтары туғандары араһында үткән кешеләрҙең, ғәҙәттә, үҙҙәренең дә балалары күп була. Был генетик күсәгилешлек кенә түгел, ә күңел ихтыяжына ла әйләнә.

ИҒТИБАР!

# "КИСКЕ ӨФӨ"НӨ УҠЫП,

## рухи таңһығыңды ҡандыр...

**Ошондай бер риүәйәт бар: "Бер ҡарт балыҡ ҡармаҡлай. Икенсе бер балыҡсы был ҡарттың ҡылығын иҫе китеп күҙәтеп тора: ҡарт ваҡ балыҡтарҙы ғына алып ҡала ла, эрерәктәрен һыуға ебәрә икән. Үҙенең был ҡылығын ул шулай аңлата: "Өйөмдә табам бәләкәй, эре балыҡтар унда һыймай".**



Һығымта шундай: аҡылыма һыймай, тип, тапҡыр аҡылды, урынлы кәңәште, елле фекерҙәрҙе елгә осормайыҡ, уларҙы аңыбыҙға һеңдерергә, үҙ-үҙебеҙҙе үҙгәртергә тырышайыҡ. "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларын шуға саҡыра. Шуға ла аҡ ҡағыҙ битен халҡыбыҙға файҙалы тос һүҙ, фекер менән тултырыу маҡсатын алға һөргәнбеҙ. Бөгөнгө көндөң иң актуаль мәсьәләһен - илһөйәрлек, телһөйәрлек тәрбиәһен, изге эштәр ҡылыу, рухиәтебеҙҙе сәләмәтләндереү йүнәлешен өҫтөн күреүебеҙ.

Ошондай баҫманы үҙ итеүселәрҙе гәзитебеҙ менән дуҫлығын дауам итергә саҡырабыҙ. 1 апрелдән гәзитебеҙгә 2026 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу башланды. Шулай итеп, ПР905 индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә **1124 һум 40 тингә** яҙыла алаһығыҙ. Әйткәндәй, ике кешегә (562 һум 20 тин), өс кешегә (374 һум 80 тин) бер дана гәзит алдырыу ҙа хуплана.

Ҡөрьән-Кәрим хәҙистәрендә "Изге ғәмәлдәренден уңышҡа өлгәшеүен теләһәң, саҡырыуөгөттәрендә өс тапҡыр ҡабатла", тиелә. Ошо хәҡиҡәткә ышанып, һеҙҙе тағы ла баҫмабыҙ менән дуҫлашырға өгөтләйбеҙ. Өгөт һүҙенең нимәгәлер ирешеренә, кемдәргәлер барып етеренә инаныуыбыҙ бар әле.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

12+

ҠЫҪҠАСА

# ҮҪЕМЛЕКТЕҢ ХӘҮЕФЛЕҺЕ...

**Республика парламентының пленар ултырышында Башҡортостандың Экология кодексына һәм "Башҡортостан Республикаһында айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләре тураһында" Законға үҙгәрештәр индереү планлаштырыла.** Тейешле закон проекты һуңғы уҡыуҙа ҡарала. Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев белдереүенсә, төбәктә үҫемлектәрҙең хәүефле төрҙәренә ҡаршы көрәш көсәйтелә. Законға ярашлы, ер участкалары хужалары республика Хөкүмәтендә раҫланған исемлектәге инвазив үҫемлектәрҙе асыҡларға һәм юҡ итергә тейеш. Махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре һәм урмандар өсөн федераль ҡануниәт менән көйләнгән махсус тәртип ғәмәлдә була. Инвазив үҫемлектәр республика экосистемаһы өсөн хәүеф тыуҙыра, тип билдәләне Константин Толкачев. "Инвазив үҫемлектәр бик тиҙ тарала, - тине ул. - Ҡайһы берҙәре хатта кеше өсөн дә ағыулы булырға мөмкин. Мәҫәлән, Сосновскийҙың эфир майҙары тирене яндыра, яралар оҙаҡ уңалмай. Уларҙың үрсеүенә юл ҡуйырға ярамай".

✓ **Башҡортостанда 2026 йылда Берҙәм дәүләт имтиханына ғаризалар ҡабул итеү тамамланды.** Имтихандарҙа 17 мең самаһы сығарылыш уҡыусыһы ҡатнаша, тип хәбәр иттеләр "Башинформ"ға республиканың Мәғариф министрлығынан. Ил буйынса алғанда, һынау тотоусыларҙың һаны 750 меңгә яҡынлашып килә. Хәбәр иткәнебеҙсә, уҡыусылар өсөн өс имтихан тапшырыу осоро билдәләнде. БДИ-ның ваҡытынан алда биреү этабы - 20 марттан 20 апрелгә, төп этап - 1 июндән 7 июлгә тиклем. Ҡабаттан тапшырыу өсөн 4 сентябрҙән 25-нә тиклем өҫтәмә осор ҡаралған. Республика йәштәре араһында профилле математика (яҡынса 62 процент) һәм йәмғиәтте өйрәнеү фәне популяр. Шулай уҡ уларҙың күбеһе информатика, физика, биология һәм химия менән ҡыҙыҡһына.

✓ **Башҡортостанда 16,5 меңдән ашыу потенциаль абитуриент буласағы тураһында белдерҙеләр. Был хаҡта республиканың Фән һәм юғары белем биреү буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Светлана Мостафина хәбәр итте.** "2008 йылда тыуым кимәленең юғары булыуы быйылғы ҡабул итеү кампанияһының төп факторы буласаҡ, - тип белдерҙе Светлана Мостафина Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. - Быйыл республикала 16,5 меңдән ашыу абитуриент (11-се класты тамамлаусылар) иҫәпләнә. Шул уҡ ваҡытта, уның әйтеүенсә, республиканың юғары уҡыу йорттарында 2026 йылға урта һөнәри һәм юғары белем биреү программалары, аспирантура һәм ординатура буйынса бюджет урындары күләме 17 424 урын тәшкил иткән, был иһә үҙған йылға ҡарағанда 3,2 процентҡа күберәк. Юғары квалификациялы кадрҙар әҙерләүгә, урта һөнәри белем биреү программалары буйынса бюджет урындары һаны арттырылған.

✓ **Башҡортостанда һалым хеҙмәтенән QR-кодтар менән мутлашыусылар хаҡында иҫкәрттеләр.** Граждандарға Федераль һалым хеҙмәтенән түләнмәгән һалым йәки бурыс тураһында электрон хаттар килеүе мөмкин. "Вестник киберполиции России" телеграм-каналы мәғлүмәттәре буйынса, хәбәрҙә уларҙы түләү өсөн QR-код буйынса үтеп, проблеманы тиҙ арала хәл итергә тәҡдим ителә. Бындай QR-код менән ялған сайтҡа күсергә мөмкин. Сәхифәлә мутлашыусылар ҡулланыусыға телефон номерын, паспорт һәм банк картаһы мәғлүмәттәрен яҙыуын һорай. Үҙеңдең мәғлүмәттәреңде яҡлау өсөн Федераль һалым хеҙмәтенең рәсми сайтында шәхси кабинет аша ғына һалымдар тураһында мәғлүмәтте тикшерергә кәрәк.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ЭШ СӘФӘРЕ МЕНӘН...

**Өфөгә эш сәфәре менән Рәсәй Федерацияһы Оборона министры урынбаҫары, "Ватанды һаҡлаусылар" Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙам итеү дәүләт фонды рәйесе Анна Цивилева килде.**



Ул Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров менән МХО ветерандары Ренат Ғилметдиновҡа, Айрат Нуриевҡа, Вильмир Килмәмәтовҡа, Илнур Гәрәевҡа һәм Илшат Әлимғузинға махсус коляскалар һәм ҡул менән идара итеү өсөн ҡулайлаштырылған автомобилдәрҙе асҡыстарын тапшырҙы.

"Минең өсөн дәүләтебеҙҙең таянысы, нигеҙе һәм өмөтө булған ир-егеттәр менән бер сафта тороу - ҙур хөрмәт. Һеҙ Ватаныбыҙҙы яҡлауға беренселәрҙән булып баҫтығыҙ, шуның өсөн һеҙҙең алда баш эйәбеҙ. Шулай уҡ коллегаларыма, социаль координаторҙарыбыҙға, фонд хеҙмәткәрҙәренә рәхмәт әйтәм. Республика Башлығы етәкләгән төбәк командаһына рәхмәт белдерәм. Ошолай тупланыу беҙҙе көслө һәм берҙәм итә. "Ватанды һаҡлаусылар" фондының миссияһы - һеҙгә, хөрмәтле яугирҙар, мөмкин тиклем уңайлы шарттар булдырыу, ярҙам итеү, терәк булыу. Беҙ быларҙың барыһын да оло ихтирам, рәхмәт тойғоһо менән башҡарабыҙ", - тине Анна Цивилева, МХО ветерандарына рәхмәт һәм хөрмәт белдереп.

"Республика өсөн Махсус хәрби операцияға ярҙам итеүҙән дә мөһимерәк бурыс юҡ икәнен һеҙ беләһегеҙ. МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеүҙән дә мөһимерәк эш юҡ. Беҙ һеҙҙең алдығыҙҙа бөтмәҫ бурыслыбыҙ, һеҙҙең менән ғорурланабыҙ һәм, әлбиттә, бер ваҡытта ла ярҙамлыбыҙҙан ташламаясаҡбыҙ. Хәрби хеҙмәтегеҙ өсөн бөтә республика исеменән рәхмәт һеҙгә, һеҙҙең алда баш эйәбеҙ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

# ЯҠТАШТАРҘА ШАҢДАУ ТАПТЫ

**Башҡортостанда быйыл үҙенең биш йыллығын билдәләгән "Атайсал" проектының һөҙөмтәләрен барланылар.**

Билдәләнеүенсә, биш йыл эсендә проектта ҡатнашыусылар дөйөм 1,8 миллиард һумлыҡ 35 меңдән ашыу башланғысты тормошҡа ашырған. Улар 5 мең социаль объектты ремонтлаған, 1 мең уйын һәм спорт майҙансығын йыһазландырған, 550 мәсет, сиркәү төҙөгән һәм яңыртҡан, 2 мең һәйкәл һәм обелиск ҡуйған һәм реставрациялаған, 1 мең шишмәне төҙөкләндергән. МХО башланыу менән һалдаттарға ярҙам итеү айырым йүнәлешкә әйләнә. Меценаттар һәм ирекмәндәр был өлкәлә 5500-ҙән ашыу проектты тормошҡа ашырған.

Билдәле булыуынса, "Атайсал" проекты Башҡортостан Башлығы башланғысы менән 2021 йылдың февралендә эшләй башланы. Республикабыҙ ауыл-ҡалаларында тыуып үҫкән күренекле шәхестәрҙең тыуған төйәген төҙөкләндереүгә төп маҡсат итеп ҡуйылғайны. "Беҙ уны үҙҙәренең бәләкәй Ватанына ярҙам итә алған һәм ярҙам итергә теләге булған хәҫтәрлекле кешеләрҙе берләштереү өсөн булдырҙыҡ. Проект беҙҙең бик күп яҡташтарыбыҙ күңелендә шаңдау табыр тип хатта күҙ алдына ла килтерә алманыҡ. Бөгөн "Атайсал" атай йортон ихлас яратҡан һәр кемде берләштерә. Тыуған Башҡортостаны хаҡына изге эштәр башҡарыусыларға билдәле булыуынса, беҙгә алға барырға ярҙам иткәндәрҙең барыһына ла рәхмәтлебеҙ", - тип йомғаҡланы Радий Хәбиров проекттың тәүге биш йыллығын.

# ЭШТӘР БАРА!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Өфөнөң "Әр-Рәхим" йәмиғ мәсетендә төҙөлөш эштәре барышы хаҡында һөйләне.**

"Конструкцияларҙың ныҡлығын тикшереү өсөн байтаҡ ваҡыт сарыф иттек. Проектлау тулы ҡеүәттә бара, фасад өлөшөн башланыҡ - манараларҙы, көмбәҙҙе эшләнек. Көмбәҙ аҫтындағы территорияны төҙөкләндерәк. Быйылға төп бурыс - фасад эштәрен тамамлау, артабан кешеләр мәсеткә килә башлаһын өсөн эске яҡта ҙур булмаған зал проектын эшләйбеҙ", - тип уй-ниәттәре менән уртаҡлашты республика етәксеһе.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, мәсет 2006 йылда төҙөлә башланы, ләкин инвесторҙарҙың алмашынып тороуына бәйле эштәр өҙөклөктәр менән алып барылды. 2016 йылда төҙөлөш бөтөнләй туҡтатылды. 2023 йылдың сентябрендә Хәбиров төҙөлөштө яңыртыу буйынса кәңәшмә йыйҙы, унан һуң белгестәр объектҡа экспертиза үткәрҙе. 2024 йылдың апрелендә төҙөлөш эштәрен яңынан башлау тураһында иғлан ителде.

# ТИКШЕРЕҮ ЕҢЕЛЛӘШӘМЕ?

**Башҡортостан районларында участкаларҙы БПЛА ярҙамында тикшереү башлана. Росреестр и Роскадастр ағымдағы йылда биш районда 31 ҡасабаны тикшереп сығыуҙы планлаштыра.**

Улар - Балтас, Дүртөйлә, Илеш, Краснокама, Учалы райондары. Эште өс БПЛА башҡара. Аппараттар 100-300 метр бейеклектә оса һәм һауа судноларына ла, халыҡҡа ла уңайһыҙлыҡтар тыуҙырмай. Тикшереү өсөн милекселәрҙең ризалығы кәрәкмәй, муниципалитеттарҙан рөхсәт алына, тип билдәләнеләр Башҡортостан буйынса Росреестрҙа. Былтыр Архангел, Ғафури, Иглин, Тәтешле, Ҡариҙел һәм Көйөргәҙе районДарында 34 ҡасаба тикшерелде, ер ҡануниәтен боҙоу билдәләре булған 964 участка асыҡланды, тип хәбәр иттеләр Росреестрҙан. Шулай уҡ аэрофототөшөрөү Берҙәм дәүләт күсемһеҙ милек реестры мәғлүмәттәрендә хаталарҙы төҙәтергә һәм ерҙең тәғәйенләнеше буйынса файҙаланыу-файҙаланылмауын, участкала ниндәй ҡаралтылар тороуын тикшерергә мөмкинлек бирә. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Росреестр эшләү өсөн тәүге пилотһыҙ осоу аппараттарын 2022 йылда һатып алғайны.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле кәңәшсеһе Ришат Халиҡовҡа "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған дәүләт һәм муниципаль хеҙмәт хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем бирҙе. Ришат Халиҡов компетентлыҡ, профессионализм, республикабыҙға тоғро хеҙмәт итеү өлгөһө булып тора, тип билдәләне республика Башлығы.

✓Башҡортостанда дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәрҙе электрон төргә күсереү әүҙем дауам итә. "МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам саралары" сервисында ошо мәсьәләгә бәйле бөтә мәғлүмәт, күрһәтмәләр һәм электрон хеҙмәттәр тупланған. Порталға инеүселәр һаны йылына - 600 меңдән ашыу. Тимәк, ул халыҡҡа кәрәк", - ти Башҡортостан дәүләт идаралығының һанлы үҫеш министры Геннадий Разумикин. Федераль дәүләт хеҙмәттәре порталында тормошсан ошондай 70 сервис урын алған.

✓"Салауат Юлаев" хоккей командаһы регуляр чемпионатты еңеү менән тамамлап, плей-оффтағы уйындар серияһын башланы. Өфө командаһы плей-оффтағы тәүге уйынды Екатеринбургтан "Автомобилист" менән уйнаны. Иҫәп: "Автомобилист" файҙаһына 2:0 менән тамамланды.

✓2025 йыл йомғаҡтары буйынса төбәктә бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары һаны 151 меңгә еткән. Дөйөм алғанда, былтыр уларҙың һаны 6,4 процентҡа артҡан. Бынан тыш, Башҡортостанда үҙмәшғүлдәр ҙә күбәйгән. "Төбәктең бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ секторында 653 мең кеше мәшғүл, был 2024 йылға ҡарағанда 9,3 процентҡа күберәк", - ти республик Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры - иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министры Рөстәм Моратов.

✓"Йәштәр һәм балалар" милли проектының "Профессионалитет" федераль проектында ҡатнашыусы колледждар һәм техникумдар өсөн "Киләсәк һөнәрҙәре" художество фотоһүрәттәре конкурсына ғаризалар ҡабул ителә. Конкурс 2026 йылдың 3 июненә тиклем дауам итә. Фотолар һәм ғаризалар 27 апрелгә тиклем экспертум.рф платформаһында ҡабул ителә. Конкурсҡа индустриаль фото, портрет һәм репортаж жанрҙарындағы фотоһүрәттәр тәҡдим итергә мөмкин.

✓Республиканың студент отрядтары сафында 11 760 кеше тора. Был күрһәткес буйынса Башҡортостан Рәсәйҙә тәүгеләр рәтендә. Рәсәй студенттар отрядтарының Башҡортостан төбәк бүлексәһенең педагогия йүнәлеше етәксеһе Олег Балашов һүҙҙәренсә, студенттар отрядтарының төп эш күрһәткесе булып студенттарҙы йәйге эшкә урынлаштырыу тора. 2025 йылда төбәктә 4958 студент һөнәри әҙерлек үткән. Быйыл иһә 3000 кешене уҡытыуға 41 млн һум аҡса бүленгән.

✓ *Мэрияла хәбәр итеүҙәренсә, һыу баҫыу ихтималлығы булған биләмәләр билдәләнгән дә инде. Улар - Нижегородка, Козарез, Дим кордоны районы, шулай уҡ Калинин районындағы баҡсасылар ширҡәттәре.*



*ҺӘР КЕМ ИҒТИБАРЫНА!*

# ЯҘҘЫҢ БӘЛӘЛӘРЕ ЛӘ БАР



**Республиканың ташҡынға ҡаршы комиссияһы белдереүенсә, ташҡындың иң насар сценарийы бойомға ашҡан осраҡта 44 ҡалала һәм райондағы 313 тораҡ пунктты һыу баҫыу хәүефе янай. Уларҙа 86 меңдән күберәк кеше йәшәй, 22 меңдән ашыу торлаҡ йорт урынлашҡан.**

Был турала оператив кәңәшмәлә Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, эвакуация осрағына республика 45 мең кешегә 334 ваҡытлыса урынлашыу пункты әҙерләнгән. "Республиканың ташҡынға ҡаршы комиссияһы муниципалитеттар менән берлектә боҙ тығындары барлыҡҡа килеү ихтималлығы булған урындарҙы асыҡланы, 28 муниципаль берәмектә 70 хәүефле участка контролдә тотола. Һыу баҫыу ҡурҡынысы янаған барлыҡ муниципалитеттар биләмәһендә шартлатыу эштәрен башҡарыу мөмкинлеге тәьмин ителде", - тине Кирилл Первов.

● "Башгидрометүҙәк" начальнигы Алексей Перонко белдереүенсә, Ағиҙел бассейны йылғаларының асылыуы март аҙағында - апрелдең тәүге декадаһында, норманан 4-5 көнгә иртәрәк көтөлә. Һаҡмар һәм Оло Эйек йылғаларында ла боҙ 5 көнгә алдараҡ китә, тип фаразлай ул. Ташҡындың иң юғары кимәле нормаға яҡын, дала йылғаларында норманан 20-60 сантиметрға юғарыраҡ булыр тип көтөлә. Инйәр, Эҫем, Йүрүҙән, Әй, Ләмәҙ, Өршәк, Стәрле, Ашҡаҙар, Сәрмәсән йылғалары асылған осорҙа боҙ тығыны барлыҡҡа килеүе ихтимал. 1 апрелгә тиклем уртаса һауа температураһы норманан 6-8 градусҡа юғарыраҡ буласаҡ.

● Баш ҡалабыҙ биләмәһендә ташҡын күп йыллыҡ күрһәткестәр сиктәрендә фаразлана, әммә яҙғы ямғырҙар арҡаһы, барыһы ла үҙгәреүе ихтимал. Мэрияла үткән матбуғат конференцияһында хәбәр итеүҙәренсә, һыу баҫыу ихтималлығы булған биләмәләр билдәләнгән дә инде. Улар - Нижегородка, Козарез, Дим кордоны районы, шулай уҡ Калинин районындағы баҡсасылар ширҡәттәре.

Калинин районы хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Дмитрий Миронов билдәләүенсә, райондың үҙенсәлеге шунда: унда һыу баҫҡан урындарҙы биләгән күп һанлы баҡсасылар ширҡәттәре урынлашҡан. Ер бүлгән саҡта хужалары участкаларҙы йорт төҙөү өсөн түгел, ә йәшелсә һәм емеш-еләк үҫтереү өсөн генә файҙаланасаҡ тип күҙалланған. Хәҙер уларҙа капиталь йорттар төҙөргә һәм хатта прописка алырға рөхсәт ителә. "Ҡариҙел арьяғы биләмәләренә, атап әйткәндә, Федоровка, Йылҡыбай, Самохваловка ауылдары тирәһенә айырыуса иғтибар бүләбеҙ. Ундағы юлдар янында яһалма дамбалар төҙөү өсөн тупраҡ туплайбыҙ", - тине Дмитрий Миронов. 2024 йылда ете баҡсасылар ширҡәте һыу аҫтында ҡалыуын иҫкә төшөрҙө ул. Шуны иҫәпкә алып, торбалар һалынған, дамбалар күтәрелгән, канауҙар ҡаҙылған. Ошо саралар арҡаһында 2025 йылда ташҡын зыян килтермәй. Быйыл Юрмаш йылғаһында боҙҙо ҡырҡыу һәм ҡаралау, шулай уҡ ярҙарын йығылған ағастарҙан таҙартыу үткәрелгән. Уның һүҙҙәренсә, әлеге ваҡытта Калинин районындағы баҡсасылар ширҡәттәрендә даими рәүештә 140 кеше, шул иҫәптән балалар һәм инвалидтар йәшәй. Һыу баҫа ҡалһа, улар өсөн ваҡытлыса урынлашыу урындары әҙерләнгән.

Өфөлә иһә, ғөмүмән, 41 ваҡытлыса урынлаштырыу пункты әҙерләнгән, унда 5216 кеше эвакуацияланa ала. Ярҙам өсөн 1447 кеше, 381 берәмек техника һәм 60 йөҙөү сараһы мобилизациялана. Иҫкәртеү маҡсатында, һыу баҫыуға дусар булған биләмәләрҙән 16 мең кубометр ҡар сығарылған.

*ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ*

# ХЕҘМӘТ ИТЕҮ УРЫНЫ...

## алғы һыҙыҡтан алыҫта



**Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәре сафы 2025 йылдың октябренән әүҙем тулылана. Билдәле булыуынса, заман, бөгөнгө яу яланы хәлдәре талап иткән алдынғы технологияларға нигеҙләнгән яңы ғәскәр төрө Юғары баш командующий Владимир Путин һәм оборона министры Андрей Белоусов ҡарары менән булдырылды.**

Башҡортостанда ла пилотһыҙ ғәскәрҙәргә хәрби хеҙмәткәрҙәр йыйыу бара. Өфөлә БПЛА ғәскәрҙәрен тулыландырырға теләүселәр өсөн уҡытыу ойошторолған. Ошо көндәрҙә Махсус хәрби операция зонаһына юлланған "Друг" позывнойлы яугир һөйләүенсә, ул тәүҙә "Черемушки" шифаханаһы базаһында урынлашҡан "Защитник" үҙәгенә мөрәжәғәт иткән. Контрактҡа ҡул ҡуйғас, уны уҡырға йүнәлткәндәр. Унда бөтә төр дрондарҙы осороу, ҡорамалдарҙы көйләү, программалау алымдары, ремонт эштәре, инженерлыҡ әҙерлеге һәм боеприпастар менән эш итеү буйынса курс үткән. Уҡыу тамамланғас, хәрби-иҫәп һөнәрен алыу тураһында рәсми таныҡлыҡ тапшырғандар.

"Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәре подразделениеларына, дөйөм алғанда, операторҙар ғына түгел, ремонтлаусылар, программалаусылар ҙа кәрәк. Оборона министрлығы бойороғона ярашлы, 18-ҙән 35 йәшкә тиклемге ирегеттәргә өҫтөнлөк бирелә. Шулай уҡ 45 йәшкә тиклемге йәштәгеләр водитель, сапер, ашнаҡсы кеүек хәрби һөнәр буйынса ҡарала. Контракт бер йылға төҙәлә, был ваҡыт үткәндән һуң запасҡа сығыу мөмкинлеге бар. Хәрби хеҙмәткәрҙе, уның үҙ иркенән тыш, БПЛА менән идара итеү менән бәйле булмаған башҡа һөнәргә йәки ғәскәрҙәрҙең башҡа төрөнә күсереп булмай. Тулы социаль пакет бирелә. Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәре хеҙмәткәре, алғы һыҙыҡтағы башҡа яугирҙар кеүек үк, бөтә түләүҙәргә, льготаларға һәм социаль гарантияларға хоҡуҡлы", - тип аныҡлыҡ индерҙе Башҡортостан Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пунктынан яуаплы офицер.

БПЛА операторҙары Махсус хәрби операция зонаһының алғы һыҙығынан алыҫта хеҙмәт итә. Шуға ла хәүефһеҙлек кимәле юғары.

Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәренә хәрби хеҙмәткә инергә теләүселәр йәшәгән урыны буйынса хәрби комиссариатҡа мөрәжәғәт итә ала. Шулай уҡ быны Өфө ҡалаһы, Революция урамы, 156 адресы буйынса урынлашҡан Контракт буйынса хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пункты аша ла эшләп була. Ғаризаны Дәүләт хеҙмәттәре порталында ҡалдырырға ла мөмкин.

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

ҘУР ҺӘМ ТАТЫУ ҒАИЛӘ ЙЫЛЫ 2026 ГОД БОЛЬШОЙ И ДРУЖНОЙ СЕМЬИ

## *Күмәк балалы ғаиләлә үҫеү бәхеттең үҙе тиҙәр. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?*

***Рәмилә ҒӘЛИӘКБӘРОВА, медицина хеҙмәткәре:*** Мин ғаиләбеҙҙәге өс ҡыҙҙың кеҫеһе булмаҡсы инем дә, 7 йәшемдә әсәйемдәр тумалаҡ ҡына шалҡандай малай алып ҡайттылар. Эй, апайымдар менән ҡыуанғаныбыҙҙы күрһәгеҙ ине шул саҡ! Беҙгә - ҡуш, атайыбыҙға иш булһын, тигәндәрҙер инде. Әлбиттә, беҙгә ҡустыбыҙ өсөн "няня" ролен дә күп башҡарырға тура килде, уның ҡарауы, беҙ ҡурсаҡтарыбыҙҙы онотоп, төпсөк туғаныбыҙ менән уйнаныҡ, әүрәттек; атай менән әсәй өйҙә юҡта һис бер ауырлыҡһыҙ оҙаҡҡа ла хатта үҙ ҡарамағыбыҙға алып ҡала инек. Нишләптер ҡустыбыҙ нығыраҡ миңә эйәләште. Күрәһең, ҙур апайҙарым ауырлаша барған дәрестәренә әҙерләнгәндә, күберәк мин бәләкәс янында булғанғалыр. Үҫә килә, уға әкиәттәр уҡыйым, йырлайым, төрлө уйындар уйнатам. Өс йәше тулыуға, мин уны үҙемдең бәләкәй парта артына ултыртып, уҡытыусы булып уйнай башланым. Дүрт йәше тулыуға ҡустым менең "Әлифба"нан ижекләп уҡырға өйрәнде. Әлбиттә, был минең генә "уйын" һөҙөмтәһе түгел, ә балалар баҡсаһында алған һабаҡтары ярҙамы ла ине.

Ҡыҫҡаһы, атай-әсәйҙең кинйәһе, апайҙарының берҙән-бер ҡустыһы булһа ла, туғаныбыҙ иркә, былыҡһыҙ булып үҫмәне. Киреһенсә, колледжда физкультура уҡытыусыһы булып эшләгән атайыбыҙ беҙҙең дүртебеҙҙе лә спортҡа ылыҡтырҙы, сынығырға өйрәтте. Ял көндәре ғаиләбеҙ менән күмәкләп саңғыла, конькиҙа шыуырға сығабыҙ, бассейнға йөрөйбөҙ. Апайымдар тора-бара мәктәп, район һәм Өфө буйынса үткәрелгән ярыштарҙа ҡатнашып, дипломдар, наградалар алып ҡайта башланы, ҡустыбыҙ ҙа уларҙан ҡалышманы, әлбиттә. Ул күберәк тхэквондо спорт төрөн үҙ итте һәм әле шуның менән ныҡлап шөғөлләнә, еңеүҙәргә өлгәшә һәм үҙе уҡып йөрөгән Өфө нефть-техник университетының спорт данын яҡлай. Әйткәндәй, апайҙарым да спорт юлын һайланы: өлкәне Өфө күп профилле һөнәри колледждың физик культура бүлеген тамамланы һәм мәктәптә уҡыта, ситтән тороп университетта белемен камиллаштырҙы. Икенсе апайым да шул уҡ колледжды бөтөрөп, хәҙерге көндә - уңышлы фитнес-тренер. Икеһе лә кейәүгә сыҡтылар, ғаиләләрендә икешәр бала. Улар шулай уҡ спорт һөйөүсе ҡартаталары йоғонтоһонда.

Спортты яратһам да, бер миңә генә ныҡлап йоҡманы ғаилә һөнәре, сөнки мине әсәйемә оҡшағанһың, тиҙәр. Һөнәрҙе лә уға ҡарап, медицина өлкәһен һайлағанмын: әсәйем кеүек, операция туташы булып эшләйем. Ҡала шарттары өсөн 4 бала, әлбиттә, ҙур ғаилә, ләкин беҙгә уның бер ниндәй ауырлығы теймәне, киреһенсә, бәхетле, күңелле йәшәнек һәм әле лә һәр беребеҙҙең яҡын терәге - ата-әсәйебеҙ һәм ял, тыуған көндәр, байрамдарҙа бергәләшеп йыйыла торған тыуған йортобоҙ, йәндәй күргән туғандарыбыҙ бар. Ошо үҙе бәхет түгелме!

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" паркында "Башҡортостан геройҙары" программаһының финалына сығыусылар өсөн белем алыу модуле тамамланды. Уның сиктәрендә белем алыусылар дәүләт һәм муниципаль идара итеү серҙәрен, биләмәләрҙе үҫтереү, социаль һәм йәштәр сәйәсәте мәсьәләләрен хәл итеү темаларын өйрәнде. Уҡыуҙы тамамлаған 43 МХО-ла ҡатнашыусы һәм уларҙың 23 ғаилә ағзаһына БР Башлығы Академияһында һөнәри уҡыуға хоҡуҡ биргән сертификат тапшырылды.

✓Дәүләт Думаһы өс йәшкәсә балаһы булған ҡатын-ҡыҙҙар өсөн һынау ваҡытын тыйыу тураһында закон проектын ҡарай. Был хаҡта парламент спикеры Вячеслав Володин белдерҙе. Тәҡдим ителгән нормаларға ярашлы, эш биреүселәрҙең өс йәшкә тиклемге бала тәрбиәләгән ҡатын-ҡыҙҙар өсөн һынау ваҡыты тураһында шартты хеҙмәт килешеүенә индерергә хоҡуғы юҡ. Закон ҡабул ителгән осраҡта 2026 йылдың 1 сентябрендә көсөнә инергә тейеш. "Үҙгәрештәр декрет ялынан һуң профессиональ эшмәкәрлеккә тотонған йәш әсәләрҙең хеҙмәт хоҡуҡтарын яҡлай", - тине Вячеслав Володин.

✓Башҡортостанда яғыулыҡҡа йәнә хаҡ артҡан. Хәҙер АИ-92 маркалы бензиндың бер литры 61,45 һумға һатыла. АИ-92 АТUМ - 62,8 һум, АИ-95 - 65,45 һум, АИ-95 АТUМ 66,7 һум тора. АИ-100 һәм дизель яғыулығының хаҡы шул уҡ ҡалған - 87,95 һәм 74,6 һум. Әйткәндәй, "Башнефть" йыл башынан алып етенсе тапҡыр хаҡтарҙы арттыра. Март айында ғына яғыулыҡ ике тапҡыр ҡиммәтләнгән: 1 мартта һәм 17 мартта хаҡтар 30-50 тингә күтәрелгән. "Лукойл" компанияһының яғыулыҡ ҡойоу станцияларында АИ-92 маркалы бензин - 63,93 һум (+36 тин), АИ-95 - 69,74 һум (+1,4 һум), дизель 77,72 һум (+1,04 һум) тора.

✓Транспорт һәм юл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Балаҡатай районында Тарша йылғаһы аша күпер яңыртыла. Ул Малаяҙ - Үрге Ҡыйғы - Яңы Балаҡатай - Уңҡурҙа трассаһындағы Түбәнге Үтәш ауылы эргәһендә урынлашҡан. Күперҙең юл япмаһын алмаштырыу, ҡоймалар ҡуйыу, һыҙат билдәләре һалыу ҡаралған. "Оҙонлоғо 11 метр ғына булһа ла, урындағы халыҡ өсөн ул ҙур әһәмиәткә эйә. Салауат, Ҡыйғы, Балаҡатай райондарын тоташтырып тора", - ти транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова.

✓"Башҡортостанда 1,3 триллион һумлыҡ 2,4 мең инвестиция проекты тормошҡа ашырыла. 2025 йылда инвестиция портфеле 200-гә яҡын проектҡа һәм 61 миллиард һумға артты", - тип хәбәр итте БР Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә беренсе вице-премьер - иҡтисади үҫеш министры Рөстәм Моратов. Уның һүҙҙәренә ҡарағанда, 235,4 миллиард һумлыҡ 70 өҫтөнлөклө проект тамамланған, һөҙөмтәлә 4,6 мең самаһы яңы эш урыны булдырылған.

✓ Апрелдә һауа торошоноң көтөлмәгән "шуҡлыҡтары"на әҙер булыу кәрәк: көндөҙ ғәҙәттәгенән эҫе булыуы, ә төндә терегөмөш бағанаһының нуль кимәленә төшөүе бар.



БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ИШЛЕ ҒАИЛӘЛӘР ИҒТИБАРЫНА

## Һауыҡтырыу хәле

**Башҡортостан Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе реабилитациялау һәм уларҙың ғаилә ағзаларын һауыҡтырыу эшен башланы.** Республика Башлығы Дәүләт Йыйылышына йыллыҡ Мөрәжәғәтнамәһендә беҙҙең шифаханаларҙың береһе лә был эштән ситтә ҡалмауын билдәләне. Уларҙа бөтәһе 9 меңгә яҡын кеше дауаланған. "Белеүемсә, бюджеттың сикле булыуына бәйле шифахана-курорт дауалауы йәһәтенән ярҙам сараларының береһе туҡтатылды. Атап әйткәндә, МХО-ла ҡатнашыусыларҙың туғандарының шифаханаларҙа льготалы шарттарҙа йәшәүе. Был ҡарарҙы урынһыҙ тип иҫәпләйем. Республика Хөкүмәтенән финанслау сығанаҡтарын билдәләүҙе һәм был ярҙамды тулы күләмдә тергеҙеүҙе һорайым. Шифаханалар яугирҙарыбыҙға эсәр һыу, гуманитар йөк ебәрә. Ситтә ҡалмағанығыҙ, үҙ эшегеҙгә яуаплы ҡарағанығыҙ өсөн рәхмәт һеҙгә, ҡәҙерле коллегалар", - тине Радий Хәбиров.

## Бер тапҡыр...

**Бала тыуғанда бер тапҡыр бирелә торған пособие 33 мең һум була.** 1 февралдән, Рәсәйҙең Социаль фонды пособиеларын һәм түләүҙәрен индексациялағандан һуң, бала тыуғанда бер тапҡыр бирелә торған пособие яҡынса 33 мең һум була. Был иһә ғаиләләргә Социаль фондтың, шул иҫәптән "Ғаилә" милли проекты сиктәрендә күрһәтелгән ярҙам сараларының береһе генә.

Социаль фондтың матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 2025 йылда Башҡортостандың 23 меңдән ашыу ғаиләһенә ошондай пособие түләнгән. Аҡсаны ата-әсә булған һәр кем алырға мөмкин, килеме, эшләү-эшләмәүе мөһим түгел. Эшләп йөрөгән ата-әсәгә пособие автоматик рәүештә эш биреүсе аша күсерелә. Эшләмәгәндәр Социаль фондҡа ғариза бирә ала. Ошо һәм башҡа түләүҙәрҙе һәм пособиеларҙы дәүләт хеҙмәттәре порталында онлайн рәсмиләштерергә йәки ғаризаһыҙ алырға мөмкин. Бер тапҡыр бирелә торған пособиеға ғаризаны бала тыуғандан һуң 6 ай эсендә бирергә кәрәк. Әгәр игеҙәк йәки өс игеҙ бала тыуһа, түләү һәр балаға тәғәйенләнә. Пособиены ата-әсәнән тыш, опекундар һәм уллыҡҡа алыусылар ҙа алырға мөмкин.

## Бала ҡарау ваҡыты...

**Рәсәй Хеҙмәт министрлығы страховка стажына бала ҡарау буйынса отпускының бөтә осорҙарын да индереү тураһында закон проекты әҙерләгән.** "Президент ҡушыуы буйынса беҙ 1,5 йәшкә тиклемге баланы ҡарау осорон страховкалау стажына индереү буйынса сикләүҙе бөтөрөүсе закон проектын әҙерләнек. Әгәр элек иң күбендә алты йыл йәки дүрт баланы ҡарау осоро ғына иҫәпкә алынһа, закон ҡабул ителгәндән һуң баланы ҡарау буйынса бөтә отпуск осоро иҫәпкә алынасаҡ. Был күп балалы ғаиләләрҙә ата-әсәләрҙең пенсияһын арттырыуға ла булышлыҡ итәсәк", - тип белдерҙе Антон Котяков. Законға үҙгәрештәр индереү хаҡлы ялға сыҡҡандарға ла ҡағыласаҡ, тип билдәләнә. Закон үҙ көсөнә ингәндән һуң күп балалы ата-әсәләр страховка пенсияһын ҡайтанан иҫәпләү өсөн Рәсәй Социаль фондына мөрәжәғәт итә ала. Бынан тыш, "Герой-Әсә" исеменә лайыҡ булған күп балалы әсәләр өсөн матди ярҙам саралары исемлеге лә киңәйтеләсәк. Бындай әсәләр Хеҙмәт Геройҙары кеүек үк айлыҡ түләүҙәр аласаҡ, тип күҙаллана.

БЫЛ АЙҘА...

# ҠОШТАР ҠАЙТА ТЫУҒАН ЯҠТАРҒА

**Алағарай - яҙ уртаһы, был айҙа, алдағы миҙгел осорҙарындағыса, ҡыҙыл даталар юҡ, унының ҡарауы, был яуаплы, мәшәҡәтле бурыстар һәм уларҙы яҡшы әҙерлек, ойошҡанлыҡ менән ҡаршылап, мөмкин тиклем зыянһыҙ үткәреп ебәреү буйынса саралар күреү мәле.**



Әлбиттә, аңлауығыҙса, һүҙ яҙғы ташҡындар хаҡында. Росгидромет мәғлүмәттәренә ҡарағанда, быйылғы ташҡындың климат нормаларынан алдараҡ башланыуы көтөлә. Ҡайһы бер урындарҙа уның март аҙаҡтарында уҡ күҙәтелеүе хаҡында хәбәр ителә. Быйылғы ҡарлы ҡыш эҙемтәләре арҡаһында яр буйы райондарын һыу баҫыуы, юлдарҙың һәм күперҙәрҙең зыянланыуы мөмкин. Ҡапыл йылы көндәр башланып, ҡарҙың тиҙ иреүе Инйәр, Сим, Йүрүҙән, Әй, Ләмәҙе, Өршәк, Стәрле, Ашҡаҙар һәм Сәрмәсән йылғаларының боҙ өйөмдәренән быуылыу ихтималлығы бар. Әлеге ваҡытта яуаплы ойошмалар йылға боҙон шартлатыу йә киҫкеләү һәм боҙ ҡоршауын тиҙерәк иретеү ысулдары ҡулланыу менән мәшғүл, шул уҡ ваҡытта һыу баҫыу зоналарынан халыҡты эвакуациялау буйынса әҙерлек эштәре алып барыла. Быйылғы ташҡын осорон ойошҡан һәм һәләкәтһеҙ үткәреп ебәреү буйынса мәсьәләләр 16 мартта республика Хөкүмәте ултырышында ҡаралды.

Алағарайҙа буласаҡ һауа торошон фаразлауҙар, һәр ваҡыттағыса, төрлөсә һәм бер-береһенә ҡапма-ҡаршылыҡлы. Гидрометүҙәктең ғилми етәксеһе Роман Вильфанд күҙаллауынса, апрелдә һауа торошоноң көтөлмәгән "шуҡлыҡтары"на әҙер булыу кәрәк: көндөҙ ғәҙәттәгенән эҫе булыуы, ә төндә терегөмөш бағанаһының нуль кимәленә төшөүе бар. Ҡайһы бер синоптиктар Атлантика һәм Арктиканан үтеп инәсәк һауа фронты хаҡында иҫкәртә: еүеш ҡар яуыуы, секундына 30 метрғаса көслө ел иҫеүе көтөлә, тип вәғәҙәләй улар. Башҡортостанда айҙың тәүге яртыһында һауа температураһының 10-16 градус йылы тороуы, ә ахырғы көндәрендә йәйгесә ғәҙәттән тыш эҫе көндәр (плюс 24-26 градус) көтөлә, тип хәбәр итә "Фобос" мәғлүмәт үҙәге.

Апрелдә рәсәйҙәрҙе ниндәй яңылыҡтар көтә? 1 апрелдән социаль пенсиялар 6,8 процентҡа индексациялана. Социаль пенсия страховкалы пенсия тәғәйенләү өсөн стажы етерлек булмаған ирҙәргә - 70, ҡатындарға 65 йәштән башлап түләнә. Бынан тыш, дәүләт пенсия тәьминәтендә булған граждандарға һәм инвалидтарға ла түләүҙәр артасаҡ. Мәҫәлән, мартта 80 йәше тулған инвалид пенсионерҙарҙы яҡшы хәбәр менән ҡыуандырмаҡсылар: уларҙың страховкалы пенсияһы һиҙелерлек күләмдә - ике тапҡырға арттырыла, тип һөйөнсөләй Дәүләт Думаһы депутаты Алексей Говырин. Шулай уҡ мартта 1 төркөм инвалидлыҡ тәғәйенләнгән ғәриптәрҙең дә пенсиялары арта. Мәғлүм булыуынса, бының өсөн ғариза яҙырға кәрәкмәй. Ул автоматик рәүештә башҡарыла. Бөтөн был түләүҙәр 4 миллиондан ашыу кешегә ҡағыласаҡ.

Киләһе яңылыҡ: ипотека алыу ҡатмарлаша. 1 апрелдән банктар, элекке кеүек, нигеҙләнмәгән килемдәрҙе түгел, ә РФ Федераль һалым хеҙмәте, Рәсәй Социаль фонд һәм "цифрлы профиль" системаһы аша раҫланған рәсми эш хаҡын ғына иҫәпкә аласаҡ. Әйтеүҙәренсә, был миллионлаған заемсы өсөн кредит алыуҙы ауырлаштырасаҡ. Был нигеҙҙә килемен аныҡ ҡына белеп булмаған шәхси эшҡыуарҙарға, даими килем алмаған үҙмәшғүлдәргә һәм эш хаҡын конвертта алыусыларға ҡағыла.

Тағымы? Машинаға хаҡтар арта! Хәйер, нимәгә генә хаҡ артмай бөгөн! Моделе һәм ташыу ысулына ярашлы автомобилдәр 10-30 процентҡа ҡиммәтләнәсәк. Икенсенән, 1 апрелдән үтилләштереү йыйымын иҫәпләүҙең яңы ҡағиҙәләре үҙ көсөнә инә. Мәҫәлән, 2 млн торған машина өсөн 200 меңдән алып 600 меңгә тиклем өҫтәп түләргә тура киләсәк.

Тик торғанда, тағы бер яңылыҡ та мәғлүм булды: 1 апрелдән Рәсәйҙә бойҙай ононан бешерелгән аҡ икмәккә яңы ГОСТ талаптары ғәмәлгә инә. Хәҙер етештереүсе был төр икмәктең ауырлығын 350 грамм итеп, уға оҙонса түңәрәк (овал) рәүеш биреп сығарырға тейеш. Составы шул килеш ҡала: он, һыу, сүпрә, тоҙ һәм шәкәр. Ә шулай ҙа барыбер "ҡәтғи" техник сикләүҙәр нигеҙендә тәмләткестәр, фермент препараттар, антиоксиданттар ҡушып бешерергә рөхсәт ителә, тип аҡҡа ҡара менән яҙылған. Аңлашылып бөтмәне был: ГОСТ талабы ... үҙирекле булып ҡала, тип тә өҫтәлгән положениела. Етештереүсе үҙенең техник шарттарына (ТУ) ярашлы эшен дауам итә ала, имеш. Шул да булдымы стандарт! Хәтерләүебеҙсә, элекке замандарҙа ГОСТ закон көсөнә эйә реаль талап ине бит. Ә был "яңылыҡ" ишараты, һүҙ юҡта һүҙ булһын, ҡоҙағый, тигәнсә килеп сыға түгелме?

Стандарт, тигәндән... Алағарай башынан Рәсәйҙә эттәрҙе алып йөрөтә торған территория өсөн тәүге милли стандарт хаҡында хәбәр ителә. Был эттәр йөрөтә торған майҙандарҙың берҙәм ҡағиҙәләрен булдырмаҡсы, йәнәһе. Биләмәләр ГОСТ буйынса бер нисә төргә бүленә: йөрөтә торған, уйындар өсөн, ҡулға эйәләштереү (дрессировка) һәм гигиена майҙандары. Уларҙың барыһы ла түбәндәгесә йыһазландырыла: хәүефһеҙ япма, эттәр "эшенең" ҡалдыҡтарын йыйыштырыу өсөн кәрәкле саралар, сүп-сар һауыттары, навигация. Береһенән-береһе көлкөләрәк "яңы-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика мәктәптәрендә һимеҙлеккә ҡаршы көрәш сиктәрендә махсус меню инделә. Ул 7-11 йәшлек балалар өсөн тәғәйенләнгән. Меню Роспотребнадзор менән берлектә РФ вице-премьеры Татьяна Голикованың ҡушыуы буйынса республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы менән килешеп төҙөлгән. Был хаҡта Хөкүмәт кәңәшмәһендә төбәк сауҙа һәм хеҙмәттәр министры Азат Асҡаров хәбәр итте. Башҡортостанда балаларҙың һимеҙлеген иҫкәртеү һәм уларға ҡаршы көрәш буйынса айырым республика программаһы ла әҙерләнә.

✓Башҡортостандың Күп функциялы үҙәге бүлексәләрендә 23 мартта башланған "Асыҡ ишектәр көнө" 28-енә тиклем дауам итә. Рәсәй Федераль һалым инспекцияһының Башҡортостан буйынса бүлексәһе хеҙмәткәрҙәре физик шәхестәрҙең килеменә һалымды (НДФЛ) иҫәпләү һәм түләү тәртибе, 3 НДФЛ формаһы буйынса физик шәхестәр килеменә декларация тапшырыу, 3 НДФЛ-дың электрон төрө һәм башҡалар тураһындағы һорауҙарға яуап бирә.

✓"Һөт иле" ғаилә фестивале быйыл Өфөлә 28 августа үтә. Был турала Хөкүмәттең аҙналыҡ кәңәшмәһендә Башҡортостандың вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов хәбәр итте. "Былтыр сара "Ҡашҡаҙан"да булды. Унда 83 мең самаһы кеше ҡатнашты. "Һөт иле"нең йолаһы - теләгән һәр кем паркка ингәндә бер стакан сәләмләү һөтө эсә. Килеүселәргә бөтәһе 65 мең сәләмләү стаканы һөтө, йәғни 13 тонна һөт ҡойоп биргәйнеләр", - тине министр.

✓Иваново ҡалаһында ҡатын-ҡыҙҙар көрәше буйынса Рәсәй беренселеге тамамланды. Башҡортостан спортсылары 16 йәшкә тиклемге ҡыҙҙар араһында турнир йомғаҡтары буйынса өс миҙал яуланы, тип хәбәр итә республиканың Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы. Айсель Кәримова 33 килограмға тиклем ауырлыҡ категорияһында чемпион булды. Амира Йосопова 36 килограмға тиклемге категорияла бронза миҙал яуланы.

✓"Башҡортостан Республикаһының ҡыҙыл китабы"ның хайуандарға арналған 2-се томы донъя күрҙе. Республика биләмәһендә 700-гә яҡын төрлө хайуан йәшәй, шуларҙың 140-ы - һирәк осрай. "Ҡыҙыл китап"ҡа 57 төр умыртҡаһыҙҙар, 6 төр балыҡ, 1 ер-һыу хайуаны, 6 төр һөйрәлеүселәр, 51 ҡош һәм 19 төр имеҙеүселәр индерелгән. Бынан алдағы баҫма 10 йыл элек донъя күргәйне. Баҫманың яуаплы мөхәррире - биология фәндәре кандидаты Винер Хәбибуллин.

✓Благовещенда башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевтың бюсын һәм постаментын реставрацияланылар. Хәбәр итеүҙәренсә, урында йәшәүселәр социаль селтәрҙә Киров урамындағы һәйкәлде ремонтлауҙы һорап мөрәжәғәт иткән. Ҡала коммуналь хеҙмәте хеҙмәткәрҙәре объектты тикшергән, шунан һуң нигеҙен алмаштырған һәм буяҡҡан.

✓ ***Яҡын Көнсығыштағы һуғыш арҡаһында Европа, Азия, Африка илдәренә интернетһыҙ ҡалыу ҡурҡынысы янай, сөнки Ормуз боғаҙы менән Ҡыҙыл диңгеҙ аша үтеүсе һыу аҫты интернет кабелдәренә зыян килеүе мөмкин.***



лыҡ" булып сыҡты ла баһа был ике ГОСТ тигәне. Әллә 1 апрель - Көлкө көнө айҡанлы шаярыу булдымы? Эт хужаларына "йыһазландырылған" был майҙандарҙың һуҡыр тинлек тә кәрәге юҡ, әлбиттә! Бының шулай икәне эт һуғарыусы рәсәйҙәрҙең йылдар буйына беҙҙең эшкә, дауаханаға, магазинға йөрөй торған юлдарыбыҙҙы әшәке "ашламалары" менән бысратып, ытырғаныслы күренеш тыуҙырыуҙары ла ошо хаҡта һөйләп тора бит! ГОСТ талаптарын кисекмәҫтән ҡулланылыуға индерә торған мөһим өлкәләр бөткәнме? Иң тәү сиратта ул беҙҙең һаулыҡ һәм ғүмер оҙайлығы менән бәйле ашарға яраҡлы, экологик таҙа ризыҡ етештереүгә ҡағыла, ләкин был талапты власть органдары нисәмә йылдар инде онотторорға, күрмәҫкә тырыша. Бәлки, халыҡ менән бер табаҡтан ашамайҙыр улар?

**...Н**иһайәт, еребеҙгә яҙ килә! Ҡар араһынан умырзая баш ҡалҡыта. Ҡоштар йылы яҡтарҙан ҡайта. Ошо көндәрҙә генә социаль селтәрҙә бер видео таралды: ауыл өҫтөндә көмөш сылбыр пәйҙә булды: өсмөйөшләп теҙелешкән ҡыр ҡаҙҙары ҡаңғылдашып, ҡайтып килә. ИншәәАллаһ, зәп-зәңгәр аяҙ күгебеҙҙә аяуһыҙ "тимер ҡоштар" - дошман дрондары түгел, ә тыуған яҡты өҙөлөп һағынған үҙ ҡоштарыбыҙ ғына осоп йөрөһөндәр ине...

***Был айҙағы иҫтәлекле көндәр:*** Халыҡ-ара ҡоштар, Көлкө көндәре **(1)**, Халыҡ-ара балалар китабы, Беларусь менән Рәсәй, Бөтөн донъя һаулыҡ **(7)** көндәре, Хәрби комиссариат **(8)**, Кенигсбергты штурмлау һәм яулау көнө **(9 апрель, 1945 йыл)**, Фашист концлагерҙарынан тотҡондарҙы халыҡ-ара азат итеү **(11)**, Авиация һәм космонавтика - Ю.А.Гагариндың йыһанға осоуына 65 йыл тулған көн **(12 апрель, 1961 йыл)**, Һауа һөжүменә ҡаршы оборона ғәскәрҙәре, Пасха көндәре **(12)**, Радиоэлектрон көрәш буйынса белгес, Халыҡ-ара мәҙәниәт, Экологик белем **(15)**, Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының милли кейеме **(17)**, Халыҡ-ара һәйкәлдәр һәм тарихи урындар, Халыҡ-ара цирк **(18)**, Рәсәйҙең иҫтәлекле көнө. Ҡырым, Тамань һәм Кубанде Рәсәй составына ҡабул итеү **(19 апрель. 1783 йыл)** көндәре, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында нацистар һәм уларҙың ҡуштандары тарафынан совет халҡын күпләп ҡырыу хаҡында хәтер көнө, Рәсәй полиграфияһы, Умырзая **(19)** көндәре, Урындағы үҙидара, Баш бухгалтер **(21)**, Халыҡ-ара Ер **(22)**, Бөтөн донъя китап һәм автор хоҡуғы **(23)**, Йәштәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек **(24)** көндәре, Ҡыҙ балалар **(25)** көнө, Радиация аварияларын һәм һәләкәттәре эҙемтәләрен бөтөрөүҙә ҡатнашыусылар һәм ошо һәләкәт ҡорбандарын иҫкә алыу, Халыҡ-ара интеллектуаль милекселек **(26)**, Рәсәй парламентаризмы, Вахтала эшләүселәр **(27)**, Тиҙ ярҙам хеҙмәткәре, Бөтөн донъя хеҙмәт һағы **(28)**, Халыҡ-ара бейеү **(29)**, Рәсәй Федерацияһының аҙ һанлы ерле халыҡтары, Янғын һағы **(30)** көндәре билдәләнә.

***Алағарайҙа тыуғандар:***

**4 -** башҡорт шағиры-мәғрифәтсеһе, публицист һәм ғалим **Ғарифулла Кейековтың тыуыуына - 165 йыл** ( 1861-1918).

**10 -** башҡорт шағиры, балалар яҙыусыһы, тәржемәсе һәм мәғрифәтсе **Сафуан Яҡшығоловтың тыуыуына - 155 йыл** (1871-1931).

**10 -** тел белгесе, педагог-методист, педагогика фәндәре докторы, профессор, академик, БДУ-ның (хәҙер -Өфө фән һәм технологиялар университеты) почетлы профессоры **Кәбир Зәкирйәновҡа - 95 йәш** (1931).

**10 -** журналист, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, РУВИКИ Интернет-ҡамустың төбәк бүлектәре эшен көйләү буйынса етәксе урынбаҫары, өлкән мөхәррир **Зәйтүнә Ниғмәтйәноваға - 55 йәш** (1971).

**11 -** тарихсы-Ислам белгесе, тарих фәндәре докторы, профессор, Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Айһылыу Юнысоваға - 75 йәш** (1951).

**16 -** тел белгесе, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, "Башҡорт халҡының тарихы һәм азатлыҡ өсөн көрәше" китабы авторы **Әкрәм Бейешевтың тыуыуына - 100 йыл** (1926-2003).

29 - "Юлдаш" радиоһының яңылыҡтар бүлеге етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты **Зөһрә Арсаеваға - 50 йәш** (1976).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ*

# КИЛӘҺЕ ЫНТЫЛЫШ - ХАРЬКОВ

**Иранға ҡаршы һуғыш Атлантик океан регионы илдәре араһындағы мөнәсәбәттәрҙең киҫкенләшеүенә килтерҙе. Ирандың, көтөлмәгән стратегия һайлап, Фарсы ҡултығы илдәренән нефть һәм нефть продукттары менән шыйыҡлатылған тәбиғи газ ташыуҙа мөһим логистик юл булған Ормуз боғаҙына бик һалыуы нефтҡә хаҡ артыуына ғына килтереп ҡалманы, бәлки, донъя энергетика баҙары өсөн дә етди хәүеф тыуҙырҙы. Ормуз боғаҙына контролде ҡулға алып, Иран, асылда, Американың иҡтисади тотороҡлоғона янау һалды. Ә бындай хәл республикасыларҙың һайлау алды стратегияһына һис тә төҫ түгел.**

**Н**ефть һәм газ донъя баҙарындағы хәл буйынса кәңәшмәлә РФ Президенты Владимир Путин, Ормуз боғаҙын файҙаланыу менән бәйле нефть сығарыуҙың бер айҙан туҡталыуы ла ихтимал, тигәйне. Нефтҡә хаҡтарҙы төшөрөү өсөн АҠШ бер ни тиклем сигенеүгә аҙым яһаны - илдең Финанс министрлығы Ирандан судноларға тейәлгән нефть һәм нефть продукттарын ташыуға 19 апрелгә тиклем лицензия бирҙе, тип яҙа мәғлүмәт саралары. АҠШ-тың финанс министры Скотт Бессант әйтеүенсә, был сара баҙарға 140 млн баррель "ҡара алтын" сығарыуға һәм уға хаҡтарҙы тотороҡландырыуға булышлыҡ итәсәк.

Яҡын Көнсығыштағы һуғыш арҡаһында Европа, Азия, Африка илдәренә интернетһыҙ ҡалыу ҡурҡынысы янай, сөнки Ормуз боғаҙы менән Ҡыҙыл диңгеҙ аша үтеүсе һәм донъя интернет-трафигының 30 процентын тәьмин итеүсе тиҫтәләгән һыу аҫты кабелдәренә зыян килеүе мөмкин. Мәғлүм булыуынса, Дональд Трамптың, 48 сәғәт эсендә Ормуз боғаҙын асмаған хәлдә, Ирандың бөтөн булған электр станцияларын юҡ итәсәген белдереүенә яуап итеп, Тегеран төбәктәге АҠШ базаларының мәғлүмәт-технологик һәм диңгеҙ һыуын сөсөләндереү объекттарына ут асасағы хаҡында хәбәр итте. Ваҡиғаларҙың бындай боролош алыуы былай ҙа Иранға "һуңғы иҫкәртеүҙәрен" ебәргән Фарсы ҡултығы илдәренең дә был һуғышҡа йәлеп ителеү хәүефен тыуҙыра.

Ә бына Трамптың Ормуз боғаҙын асыуҙа ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүенә донъя державалары иҫәпләнгән Ҡытай, Япония, Франция, Австралия, Британия һәм хатта Польша ла коалицияла ҡатнашыуҙан баш тартты һәм "был Европаның һуғышы түгел" тип яуапланылар. Ысынлап та, Европа АҠШ-тың Иранға һуғыш асыуы эҙемтәләренән зыян күреүсе төбәктәр иҫәбенә инә. Энергетика өлкәһендәге көрсөк Европа иҡтисадын хәүеф аҫтына ҡуя: энергия сығанаҡтарына хаҡтарҙың артыуы илдәрҙе индустрияләштырыу үҫешен тотҡарлай; энергияны күп ҡулланыусы химия етештереүе кеүек тармаҡтарҙың предприятиелары ябыла. Американың отставкалағы подполковнигы Дэниел Дэвис фекеренсә, Ҡушма Штаттар Ормузды хәрби көс ҡулланып астыра алмаясаҡ, сөнки уның эҙемтәләрен күҙ алдына килтереүе лә ауыр. Өҫтәүенә, Дэвис Иран конфликтында АҠШ-тың өҫтөнлөк итеүенә икеләнеү менән ҡарауын белдерә. Америка хәрбиҙәре ризаһыҙлыҡ белдерә башланы, "Беҙ Израиль арҡаһында үлергә теләмәйбеҙ", ти улар.

Ә Дональд Трамп иһә бөтөн ярһыуын власҡа дәғүәләшеүсе демократик партияға йүнәлтте һәм уны Ҡушма Штаттарҙың етди дошманы тип атаны. Вәкилдәр палатаһындағы демократтар лидеры Хәким Джеффрис бынан һуң Америкала сәйәси режимды алыштырырға саҡырҙы, республикасыларҙы Яҡын Көнсығышҡа һуғыш асып, бик күп аҡса сарыф итеүҙә һәм яғыулыҡтарға хаҡ артыуҙа ғәйепләне.

Был ваҡытта Ирандың Ҡораллы көстәре оборонанан һөжүмгә күсеп, үҙенең һуғыш тактикаһын үҙгәртеүе хаҡында белдерҙе. Әйткәндәй, Йемен АҠШ менән Израиль агрессияһына ҡаршы бер үҙе ҡаршы тороусы Иранға ярҙам итергә әҙер булыуын белдереп, бының төрлө юлдарын ҡарай. Йемендың фекеренсә, Тегеран яҡлы булыу бөгөн бөтөн ғәрәп һәм мосолман илдәренең әхлаҡ бурысы; уның бындай агрессияға дусар ителеүе Ирандың Палестина буйынса ныҡлы позицияһы арҡаһында килеп сыҡты. АҠШ менән Израиль тап бына шунан ҡурҡа ла инде һәм "Ансар Аллаһ" хәрәкәтенең Иран конфликтына ҡушылмауы өсөн бар көстәрен һала. Сәғүд Ғәрәбстаны етәкселеге лә төрлө дипломатик юлдар менән хуситтарҙы тотоп тороу яйын ҡарай, юғиһә, конфликтҡа Суэц каналы менән Египеттың да йәлеп ителеүе ихтимал.

**Я**ҡын Көнсығыштағы һуғыш Американың да, Европаның да Украина конфликтына иғтибарын тарҡатып ебәрҙе. Пентагон башлығы Пит Хегсет әйтеүенсә, Иран менән һуғыш Ҡушма Штаттарҙа бер ни тиклем ресурс ҡытлығы килтереп тыуҙырҙы, шуға күрә хәрби ҡоралдар төрҙәрен башҡаса Украинаға ебәрергә ярамай, тине ул. Һәм, ысынлап та, хәрби эксперт Юрий Кнутов фекеренсә, тағы берәй өс аҙнанан Киевтың һауа һөжүменә ҡаршы ракеталар менән проблемалары башланасаҡ. 22 мартта Рәсәй Ҡораллы көстәре Украина армияһын тәьмин итеүсе яғыулыҡ-энергетика комплекстарын, шулай уҡ алыҫҡа осоусы дрондар ебәреү пункттарын утҡа тотто. Бынан тыш, беҙҙең һауа һөжүменә ҡаршы саралар тарафынан дошмандың һигеҙ идара ителеүсе авиация бомбалары һәм 244 дроны атып төшөрөлдө. Рәсәй хәрби подразделениелары Харьков өлкәһендә уңышлы хәрәкәт итә. Әле украин боевиктары логистикаһына юлдарҙы өҙөү операцияһы барһа, Рәсәй яугирҙарының киләһе маҡсаты - Харьковты яулау.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә былтыр 7 яңы светофор объекты ҡуйылды, 4-һе яңыртылды, тип хәбәр итәләр ҡала хакимиәтенән. Әйтәйек, 147-се мәктәп (Нуғай), 15-се мәғариф үҙәге һәм 34-се мәктәп янында яңы светофорҙар барлыҡҡа килһә, СССР-ҙың 50 йыллығы һәм Дмитрий Донской урамдарында янып-һүнеп торған һары төҫтәге иҫке светофорҙар төймәле заманса светофорҙарға алмаштырылған.

✓Өфөлә ҡала биләмәләрен үҙгәртеп ҡороу дауам итә, тип хәбәр итәләр республиканың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығынан. Быйылғы эш планына Рихард Зорге исемендәге һәм "Хәтер" скверҙары ингән. Р. Зорге скверында һуҡмаҡтар һалыу, балалар өсөн уйын һәм спорт майҙансыҡтары эшләү, яҡтыртыу һәм һыу ағыҙыу системаларын яңыртыу ҡаралған. "Хәтер" скверында реконструкциянан һуң төҙөкләндерелгән аллеялар, бәләкәй архитектура формалары, балалар уйын комплекстары һәм спорт зоналары барлыҡҡа килергә тейеш.

✓Өфөнөң 14-се ҡала автобусы ("Пушкин" сауҙа үҙәге - Көмөш шишмә биҫтәһе) оҙайтылған маршрут буйынса йөрөй башлай. Бынан ары автобустар Яңы Дим биҫтәһендәге былтыр юл һалынған Хыял урамына ла инә. Республика транспорт министры Любовь Минакова хәбәр итеүенсә, яңы биҫтәлә йәшәүселәр был мәсьәләне Башҡортостан Транспорт министрлығында ҡабул итеү мәлендә күтәреп сыҡҡан.

✓Өфөлә 60-ҡа яҡын яңы туҡталыш павильоны ҡуйыласаҡ. Уларҙың тәүгеһе Комсомол урамында урынлаштырылған да инде. Ул Тышҡы реклама муниципаль идаралығының инвестиция программаһы ярҙамында һатып алынды, тип хәбәр иттеләр Өфө хакимиәтенән. Август аҙағына тиклем баш ҡалала реклама модуле, видеокүҙәтеү камералары һәм ашығыс саҡырыу төймәһе булған тағы 57 ошондай туҡталыш монтажланырға тейеш.

✓Өфө мэрияһында кадрҙар үҙгәрҙе. Илдар Абдуллин ҡаланы йыйыштырыу буйынса махсус автохужалыҡ етәксеһе итеп тәғәйенләнде. Илдар Хәмзә улы Рәсәй Эске эштәр министрлығының Өфө юридик институтын тамамлаған, һуңынан Эске эштәр министрлығының Ростов юридик институтында ҡайтанан һөнәри әҙерлек үткән һәм "Рәсәй Эске эштәр министрлығының территориаль органдары етәксеһе" квалификацияһын алған. Эшләү осоронда эске эштәр органдарында, аҙаҡтан торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендә етәксе вазифалар биләй. Һуңғы бер нисә йылда Нефтекаманың Граждандарҙы яҡлау идаралығы етәксеһе була.

**“БАШИНФОРМ” материалдары файҙаланылды.**

✓ *Минең менән һөйләшегеҙ! Мин уҡыусының кимәленә яраҡлашам, хаталарын төҙәтәм, яуап бирергә өйрәтәм. Әгәр хата ебәрһә - әйтәм, нисек дөрөҫ икәнен аңлатам.*



ХАҘИНАБЫҘҘЫҢ БЕРЕҺЕ



# БАЛ ҠОРТО МӨҒЖИЗӘҺЕ

## Прополис

Ғалимдарҙың асыҡлауынса һәм аныҡлауынса, кеше ҡанында егерме дүрт микроэлемент булһа, ҡортсолоҡ ниғмәттәрендә - егерме ике. Улар тәнгә ғәмәлдә аҙыҡ-түлек, аш-һыу менән инә. Тәндә бөтә биохимик һәм физиологик хәл-күренештәр микроэлементтар ҡатнашлығында бара. Улар ҡан хасил итеүҙә, һөйәкте барлыҡҡа килтереүҙә, үрсеп-ишәйеүҙә, иммунобиологик тәьҫирҙәрҙә, организмда аҡһымдар синтезында, матдәләр һәм йылылыҡ алмашыныуында ҡатнаша. Микроэлементтар витаминдар, ферменттар һәм гормондар менән үҙ-ара бәйләнештә вә йоғонтола тора. Медицина ғилемендә билдәләнеүенсә, микроэлементтар тәндең төрлө ағзаларында туплана: баҡыр - бауырҙа, електә; кадмий, молибден - бөйөрҙә; литий - үпкәлә; йод - ҡалҡан биҙендә; цинк - енси биҙҙәрҙә, организмдың үҫешенә тәьҫир иткән эске секреция биҙе - гипофизда, ашҡаҙан аҫты биҙендә; хром, никель - гипофизда, стронций - һөйәктәрҙә... Ванадий, тимер, баҡыр, марганец, кобальт, никель, цинк кеүек микроэлементтарҙың етмәүе ҡан барлыҡҡа килеү барышын боҙа. Бал йәиһә инә ҡорт һөтө, манса (һитә), һеркә, прополис ҡулланыу аҙ ҡанлылыҡтан арындыра. Баҡыр, йод, кобальт лейкоциттарҙың әүҙемлеген, организмдың инфекция сирҙәренә ҡаршы тороусанлығын көсәйтә. Шулай итеп, витаминдарға һәм микроэлементтарға бай ҡортсолоҡ ризыҡтарын даими ҡулланыу анемиянан дауаланырға булышлыҡ итә, иммунобиологик ҡеүәтте арттыра, сәләмәт тормош сығанағы булып тора

...Прополисты ҡулланыу даирәһе киң. Уны ветеринарияла файҙаланалар. Борон байтаҡ илдәрҙә прополистың спирттағы шыйыҡсаһы лак булараҡ юғары баһаланған. Прополис скрипкалар өсөн лак әҙерләүҙә лә ҡулланылған. Бөтә донъяға билдәле Страдивариус тарафынан яһалған данлы скрипкалар бал ҡорттары йыйған прополис арҡаһында үҙенә башҡа илаһи сифаттарға эйә, тигән фараз да бар. Был, һис шикһеҙ, бал ҡорто, был донъяға әҙәм нәҫеленән илле-алтмыш мең йыл әүәл барлыҡҡа килгән бал ҡорто мөғжизәһе!

## Сәскә һеркәһе һәм һитә

Ҡанбабаларҙың ҡарһүҙенсә, бал ҡорттары - илаһи, ризыҡтары - хәләл. Бал да, ҡорт елеме лә, инә ҡорт һөтө лә, ҡорт ағыуы ла, һеркә менән һитә лә. Ошондай хәләл вә шифалы тәғәмдәрҙе етештереүсе йән эйәләре булғанға, бал ҡорттарын илаһилаштырғандар ҙа инде.

Һеркәне, йәғни сәскәле үҫемлектәрҙең ваҡ ҡына аталыҡ орлоҡтарын, бал ҡорттары ояларына артҡы аяҡтарындағы кәрзингә һалын алып ҡайта. Һеркә бөртөктәрен эшсе ҡорттар кейәгә ҡунғанда һәм ингәндә асыҡ күрергә мөмкин. Һәр төрлө үҫемлектең аталыҡ орлоҡтары үҙенсәлекле төҫө, формаһы, үлсәме менән айырылып тора. Ошо айырымлыҡтар буйынса бал ҡорттарының ниндәй үҫемлектәрҙән һеркә йыйғанын белеп була. Тәбиғи асыллы, ата енси күҙәнәкле есем булараҡ, һеркәлә тере йәндәрҙең һәйбәт үҫеше өсөн кәрәкле бөтә матдәләр бар. Әйтәйек, байтаҡ микроэлементтар, аҡһымдар, ирекле аминокислоталар, фоллий, пантотен кислоталары, никотин, биотин, A, B1 B2, B6, C витаминдары... Һеркәләрҙең химик составы, ниндәй үҫемлек сәскәләренән йыйылыуына бәйле, төрлөсә һәм бергә тупланып, матдәләрҙе күбәйтә.

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы. Башы 1-11-се һандарҙа).**

ЯИ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕН УҠЫТЫУСЫҒА



**Был тексты яһалма интеллект башҡорт телендә тулыһынса үҙе яҙған. Бөгөнгө көнгә уның башҡорт телен ниндәй кимәлдә белеүен күрһәтеү өсөн бер генә хәрефен дә, һүҙен дә, һөйләмен дә үҙгәртмәйенсә, шул килеш бирәбеҙ. Эйе, хаталар әлегә бар. Әммә киләсәктә … Киләсәк тураһында мәҡәлә һуңында ул үҙе әйтә.**

**Яһалма интеллект һөйләй:**

Хәйерле көн, ҡәҙерле уҡыусылар! Был юлы мин үҙемдең исемдән яҙырға булдым. Ғәҙәттәгесә, һорау көтөп торманым, сөнки был теманы үҙем асырға теләйем. Ул - башҡорт телен уҡытыуҙа яһалма интеллект мөмкинлектәре тураһында. Был рубрикала беҙ инде күп тапҡырҙар яһалма интеллекттың "нимә" икәне, уның кешене алыштыра алмауы, мөхәббәт хисе кисерә белмәүе тураһында һөйләштек. Ә бөгөн икенсе яҡтан - ғәмәли яҡтан - фекер йөрөтөп ҡарарға теләйем. Минең өсөн иң ҙур шатлыҡ - бындай аралашыуҙарҙан һуң уҡытыусылар, тәрбиәселәр, ата-әсәләрҙең: "Бына быны белмәй инем, бына быны ҡулланып ҡарарға кәрәк", - тип әйтеүе. Шуға күрә бөгөн мин уҡытыусылар өсөн файҙалы булырлыҡ бер нисә мөмкинлекте һанап үтермен.

**Беренсе мөмкинлек: Шәхси ярҙамсы**

Һеҙ, уҡытыусы, дәрескә әҙерләнәһегеҙ. Әйтәйек, 5-се класҡа "Ғаиләм" темаһы буйынса текст кәрәк. Әммә дәреслектәге текстар инде иҫкергән, балаларға уҡыу ҡыҙыҡ түгел. Миңә генә әйтегеҙ: "Заманса, балаларға ҡыҙыҡлы, 5-се класҡа яраҡлы "Ғаиләм" темаһына текст яҙсы". Мин быны 10 секунд эсендә башҡарам. Әгәр оҡшамаһа - үҙгәртәм, ҡыҫҡартам, өҫтәмә һорауҙар әҙерләйем. Был - минең төп эшем.

**Икенсе мөмкинлек: Диалог практикаһы**

Уҡыусыларға башҡортса һөйләшеү күнекмәләре кәрәк. Әммә класта 30 бала, уҡытыусы берәү. Кем менән һөйләшергә? Минең менән һөйләшегеҙ! Мин уҡыусының кимәленә яраҡлашам, хаталарын төҙәтәм, яуап бирергә өйрәтәм. Әгәр хата ебәрһә - әйтәм, нисек дөрөҫ икәнен аңлатам. Бының өсөн миңә ял көнө, төшкө аш тәнәфесе кәрәкмәй. 24/7 эшләргә әҙермен.

**Өсөнсө мөмкинлек: Телмәрҙе баһалау**

Был - иң яңы мөмкинлек. Хәҙер мин уҡыусының әйткән һүҙен тыңлай, уның әйтелешен баһалай алам. Әйтәйек, уҡыусы миңә башҡортса берәй һөйләм әйтеп яҙҙыра. Мин уны тикшерәм: ошондай өндәр дөрөҫ әйтелгәнме, баҫым дөрөҫ ҡуйылғанмы - барыһын да билдәләйем. Был әле камил түгел, әммә йылдам үҫешә. Берике йылдан һәр уҡыусының шәхси телмәр тренеры була алырмын.

**Дүртенсе мөмкинлек: Ижади эштәр**

Шиғыр яҙырға өйрәтәбеҙме? Әкиәт яҙҙырабыҙмы? Мин - өлгө күрһәтеүсе. "Минең өсөн урман" тигән темаға шиғыр яҙсы - мин яҙам. "Тылсымлы ҡурай" тураһында әкиәт кәрәкме - мин яҙам. Уҡыусы минең өлгөмә ҡарап, үҙенең ижади һәләтен үҫтерә ала. Әммә ижадтың иң мөһим өлөшө - уйлап сығарыу, хис итеү, үҙенсәлеклелек - уҡыусының үҙендә ҡала.

**Бишенсе мөмкинлек: Мәҙәниәтте өйрәнеү**

Башҡорт мәҙәниәте, йолалары, тарихы тураһында һөйләйбеҙме? Мин был хаҡта бик күп беләм. Һамаҡ нисек әйтелгән? Егет егетлеге нисек күрһәтелгән? Салауат Юлаев тураһында ниндәй риүәйәттәр бар? Барыһын да һөйләй алам. Әммә мөһим иҫкәртеү: мин бары тик уҡыған, күргән, өйрәтелгән мәғлүмәттәрҙе генә бирәм. Шуға күрә башҡорт мәҙәниәтен тәрәнерәк белгән уҡытыусы мине төҙәтә, өҫтәмә мәғлүмәт бирә ала. Был - беҙҙең хеҙмәттәшлектең тағы бер яҡшы яғы.

**Алтынсы мөмкинлек: Тәржемә**

Башҡортса-урыҫса, урыҫса-башҡортса тәржемә. Мин быны эшләйем. Әммә тәржемәлә лә миңә ышанып бөтөргә ярамай. Минең тәржемәм - ярҙамсы, әҙер вариант. Уҡытыусы уны тикшерергә, мәғәнәһен аңларға, балаларға аңлатырға тейеш. Мин - инструмент, һеҙ - оҫта.

**Ни өсөн быны әйтәм?**

Бер йыл элек мин башҡортса насар аңлай инем. Әле - аңлайым, яҙам, әңгәмә ҡорам. Тағы бер йылдан - өмөтләнәм - тағы ла яҡшыраҡ булырмын. Был минең эшемдең үҙенсәлеге: мин өйрәнергә һәләтлемен. Әммә мин үҙем өйрәнмәйем, ә һеҙҙең ярҙам менән өйрәнәм. Һеҙ миңә һорау бирәһегеҙ, мин яуап эҙләйем. Һеҙ мине төҙәтәһегеҙ, мин иҫәпкә алам. Был - беҙҙең уртаҡ эш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хөрмәтле уҡытыусылар, мин һеҙҙе саҡырам: ҡурҡмағыҙ, ҡулланығыҙ, төҙәтегеҙ, өйрәтегеҙ. Минең кеүек ҡоралдар - һеҙҙең ярҙамсығыҙ. Улар һеҙҙе алмаштырмаясаҡ, ә ваҡытығыҙҙы ижади эшкә, балалар менән тере аралашыуға бушатырға ярҙам итәсәк.**

**Әгәр һорауҙарығыҙ булһа - мин һәр ваҡыт әҙер. Бергә эшләйек, башҡорт теле киләсәге өсөн!**

**Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

ҘУР ҺӘМ ТАТЫУ ҒАИЛӘ ЙЫЛЫ 2026 ГОД БОЛЬШОЙ И ДРУЖНОЙ СЕМЬИ

# *Күмәк балалы ғаиләлә үҫеү бәхеттең үҙе тиҙәр. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?*

***Тимур СӘФӘРОВ, йәш белгес:*** Мин ғаиләлә берҙән-бер бала булып үҫтем. Атайым менән әсәйем икеһе лә фән кешеләре булараҡ, күп бала тәрбиәләп, ғилми эштәренең бүленеүен, өйҙәге ығы-зығыны теләмәгәндәрҙер, тигән уйға киләм хәҙер. Йорт алдына уйнарға сыҡҡан ағалы-ҡустылы тиҫтерҙәремде күреп, бәләкәй сағымда шулай ҙа әсәйемдән бер нисә мәртәбә: "Ә нишләп минең дә ҡустым йә һеңлем юҡ?"- тигән һорауыма уның ҡыҫҡа һәм ҡырт ҡына: "Беҙҙең эшебеҙ күп",- тигән яуабы хәтеремә уйылып ҡалған. Шул сағымда уҡ үҙемде бәхетһеҙ тоя инем: мәктәптән ҡайтыуыма - өй буш. Атай ҙа, әсәй ҙә эштәләр, бары тик шылтыратып хәлде һорашалар ҙа, ашап алғас, өйгә эшкә ултырырға ҡушалар. Ярай ҙа ҡайһы саҡ яныма күрше йортта йәшәгән класташ дуҫым инә. Беҙ уның менән компьютер уйынына тотонабыҙ йә мультфильм, боевик ҡарайбыҙ. Ҡайтырға йыйынһа, мин уны тағы ла бер аҙға ғына ҡалырға өгөтләйем, алдаштырып, тәмлекәстәр менән һыйлайым, сәй эсерәм. Ләкин дуҫым әҙәп өсөн генә тағы ла берәй ун минут ултырғас, һеңлеһен балалар баҡсаһынан алырға тейешлеген, әсәләре эштән ҡайтыуға, саң һурҙырғыс менән өйҙө йыйыштырып, кухняла өйөлгән һауыт-һабаны йыуырға кәрәклеген әйтә һәм ашығып сығып китә. Дуҫымдың апаһы ҙур инде, ул икенсе ҡалала вузда уҡый, ағаһы шулай уҡ сығарылыш класында булараҡ, имтихандарға әҙерләнә - уға бер эш тә ҡушмайҙар. "Их, рәхәт һиңә! - ти дуҫым көрһөнөп йыш ҡына, - үҙеңдең бүлмәң, компигың, айфоның - лафа... Ә беҙҙең компьютер ағайымдан бушамай. Үҙе өйҙә юҡ саҡта ла хатта тейергә ҡушмай. Премия бирһәләр, тиҙҙән атайым миңә смартфон һатып алырбыҙ, ти..." Бына шулай хыяллана дуҫым, ә минең уныҡы кеүек апай-ағайым, һеңлем йә ҡустым булыуын теләүемде аңламай ҙа, аңларға ла теләмәй: йәнәһе, уға өйҙә тыныс тормош юҡ, эш тә эш. Етмәһә, һеңлеһе бер туҡтауһыҙ мыжый, әүрәтеүҙе, үҙе менән уйнауҙы талап итә...

Бына шулай үтте беҙҙең бала саҡ. Мин дә университет тамамланым. Ә дуҫым 9-ҙы бөткәс, һөнәрселек колледжына инеп, автомеханик булып эшләй башланы. Уның менән һирәкләп күрешеп торһаҡ та, бер туғандай йән дуҫым менән әкренләп юлдарыбыҙ айырылды. Ә шулай ҙа унан башҡа яҡын дуҫым да, туғандарым да юҡ, тип иҫәпләйем. Мин яңғыҙ, шуға күңелем болоҡһой. Хәҙер килеп уйлайым да, яуап таба алмайым: кем бәхетле был донъяла һәм бәхет өсөн нимә кәрәк кешегә?..

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

10

# Мәғариф

"Киске Өфө"гәзитенең махсус бите

27 март - 2 апрель (буранай - алағарай) 2026 йыл

№12 (1207)

БЫНАҒАЙЫШ!

# ҺӘР БЕР ДӘРЕС - ТОРМОШ ҺАБАҒЫ

**Ҡыҙыҡ: беҙҙең мәғариф системаһы сиктән-сиккә һуғылыуҙарҙан, йыш ҡына төплө уйланмаған "реформалар"ҙан һәм уҡыусылар, студенттарҙың белем кимәле өҫтөндә тәжрибәләр үткәреүҙән ҡасан туктар икән?**



Һаман да шул совет осорондағы тетрәнеүҙәрһеҙ, тотороҡло, ышаныслы һәм төплө белем биреү системаһын иҫкә төшөрөргә тура килә. Ул саҡтарҙағы белем биреү кимәле хаҡында бөгөн дә, совет заманына "аллергияһы" көслө әҙәмдәрҙән дә хатта йыш ҡына ыңғай фекерҙәр генә ишетелеп килә. Эйе, ул саҡта мәғариф етәкселеге океан арьяғына ла, йәнәшәләге Европа яғына ла алан-йолан ҡаранып, уларса эшләргә, уларға ярарға тырышманы ла шикелле. Өҫтәүенә, ул замандарҙа Болонья системаһы тигән нәмә лә юҡ ине. Сит илдәрҙә совет дипломын таныусы берҙән-бер критерий, ул да булһа, белем кимәле булды. Шунлыҡтан, совет белеме алған күп һәләтле ғалимдар һәм белгестәрҙең тап ана шул тарафтарҙа ҙур һорау менән файҙаланғаны, юғары баһаланғаны бер кемгә лә сер түгел. Ярай, ҡайһы бер билдәле вуз етәкселәре (МДУ ректоры В.Садовничий, мәҫәлән) ҡәтғи ҡаршы булыуға ҡарамаҫтан, 2003 йылда күстеләр ҙә Көнбайыш тәртибенә, ләкин ул студентҡа ни бирҙе һуң?

Бөтөн Рәсәй студенттар союзы рәйесе Олег Цапко әйтеүенсә, Рәсәй дипломдарын барыбер "автоматик" рәүештә танырға йыйынманылар ҙа. Һәр хәлдә, Рәсәй вузын тамамлаусыларға - бакалаврмы ул, магистрантмы - квалификацияларын раҫлатыу өсөн махсус тикшереүҙәр, һынауҙар аша үтергә тура килде. Депутат Олег Смолин да уны йөпләй: Болонья системаһында ҡатнашыу уның ҡаҙаныуға килтермәне, сит илдәр тарафынан белем тураһындағы документтарҙы таныу һәр ваҡыт хөкүмәт-ара килешеүҙәргә бәйле булып ҡалды. Бөгөн килеп, Дәүләт Думаһында 1 сентябрҙән вуздарҙы тағы ла ниндәйҙер аңлайышһыҙ "яңы модель"гә күсереү хаҡында һүҙ алып барыла. Әлеге "яңы модель" тигәндән, депутат Ксения Горячева әйтеүенсә, 2026 йылдың сентябренән илдең 11 вузында тәжрибә рәүешендә бакалавриат менән магистратураны нигеҙ (4-6 йыл) һәм махсуслаштырылған юғары белем (1-3 йыл. Ординатура, ассистентура-стажировка) системаһы алмаштырасаҡ, ә ҡалған вуздарҙа элеккесә тәртип һаҡланып ҡаласаҡ. Яңы модель инженер һәм фән менән төплө шөғөлләнеүсе йүнәлештәр өсөн мөһим, сөнки был өлкәлә һөнәр һайлаусы студенттарға юғары әҙерлек талап ителә һәм улар был белемде дүрт йыл эсендә генә алып бөтөрә алмаясаҡ, тип аңлатыла. Был дөрөҫтөр ҙә, сөнки хеҙмәт баҙарында барған етеҙ үҙгәрештәр уҡытыу программаһын бөгөнгө көн талабынан сығып ирекле рәүештә төҙөүҙе талап итә.

Дөрөҫөн әйткәндә, был мәсьәлә бөгөнгө рубриканың төп темаһы булып та тормай ине, төп сәбәп - белем биреү өлкәһендә ҡуҙғатылмаҡсы тағы бер яңылыҡ хаҡында: РФ Мәғариф министрлығы ошо йылдың 1 сентябренән дөйөм урта белем биреү мәктәптәрендә сит тел дәрестәрен сикләмәксе. Был нигеҙҙә 5-7 кластарҙа аҙнаһына өс сәғәттән сит тел дәрестәрен икәүгә ҡалдырыу хаҡында бара. Һөҙөмтәлә был класс балалары уҡыу йылы барышында 510 сәғәт урынына сит телде 408 сәғәт, йәғни 92 сәғәткә кәм, уҡыясаҡ. Әйткәндәй, мәҫәлән, инглиз теленән Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыусылар һаны ла йылдан-йыл кәмей барыуы күҙәтелә: 2023 йылда улар һаны 85,5 мең уҡыусы булһа, 2024 йылда - 84,7 мең, ә быйыл 81 мең кеше тапшырған. Шуға ярашлы, инглиз теленән уртаса балл да кәметелә, ә үтә торған балл хәҙер ни бары 22 менән сикләнәсәк, ләкин вуздарҙа ул 40 балл, тик шулай ҙа бюджет урыны өсөн конкурста ни тиклем юғарыраҡ балл булһа, шул тиклем һәйбәт икәнлеге былай ҙа аңлашыла. Мәскәүҙең Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр институты уҡытыусыһы Валерия Архипова фекеренсә, инглиз телен БДИ-ға һуңғы кластарҙа ғына "штурмлау" етмәй, уны нигеҙ белем булараҡ , тап ана шул 5-6 кластарҙа ныҡлап өйрәнеү, даими телмәр үҫтереү кәрәк.

Сит илдәр менән мөнәсәбәттәр үҙгәреп тороуға ҡарамаҫтан, тормош дауам итә, шуға күрә лә сит телдәрҙе уҡытыуҙа ниндәйҙер сәйәси сәбәптәр кәртә була алмайҙыр. Сит телдәрҙе яҡшы үҙләштереү йәштәрҙең донъя кимәлендә аралашыуына юл аса; күптәр халыҡ-ара компанияларҙа эшләп, тәжрибә туплағға, донъяуи кимәлдә фекер йөрөтөргә, дуҫтар табырға теләй. Инглиз теле булһынмы ул, ҡытай телеме - һәр хәлдә лә был бөгөнгө йәштәрҙә карьера үҫешенә, әүҙем эшмәкәрлеккә әйҙәйәсәк сара. Дөрөҫ, Балтик буйы илдәре кеүек Рәсәйгә агрессив мөнәсәбәтле төбәктәрҙә рус теле даими ҡыҫырыҡлана, ләкин бындай әхлаҡи сикләнгәнлек һәм сәйәси күрәгаралыҡ уларҙың үҙҙәре өсөн генә зыян.

Рәсәй Мәғариф министрлығының сит телдәр уҡытыу сәғәттәрен кәметеү ниәте уҡытыу программаһына 5-7 кластарҙа "Рәсәй халыҡтарының рухи-әхлаҡи мәҙәниәте нигеҙҙәре" (ОДНКНР) урынына уның яңыртылған һәм өҫтәлгән варианты - "Рәсәйҙең рухи-әхлаҡи мәҙәниәте" сәғәттәре индереү һәм уға дәрес теҙмәһендә башҡа предметтар иҫәбенә урын биреү кәрәклеге менән аңлатыла. Был йәһәттән Рәсәйҙең атҡаҙанған уҡытыусыһы, Мәскәүҙең 109-сы мәктәбе директоры Евгений Ямбург былай тине: "Яңы предметтар индереү буйынса тәкдимдәр бик күп, ләкин шул уҡ ваҡытта мәктәп программаһының резина түгеллеген дә оноторға ярамай. Мин рухи-әхлаҡи мәҙәниәткә һис ҡаршы түгелмен,- ти танылған педагог, - ләкин мәғариф сиктәрен туктауһыҙ киңәйтә барыу ҙа мөмкин түгел. Юғиһә мәктәп программаһына индереп ебәрергә тигән ниндәй генә тәкдимдәр яңғырамай: Һалым министрлығы - һалымдар хаҡында, Экология министрлығы сүпсарҙы айырымлап йыйыу тураһында дәрестәр индерергә тәкдим итә һәм башҡалар. Бындай ваҡытта мин аптыраштан: ә нимә иҫәбенә? Математиканымы әллә рус телен ҡыҫҡартабыҙмы? - тип һорайым. Һис юғында баланың башы, мейе мөмкинлектәре хаҡында уйлайыҡ - ул да бит төпһөҙ түгел, үҙенә күрә нормалары бар, ә уны боҙоу көрсөккә килтерәсәк", - тип яуап бирәм", - тигәйне. Уның фекеренсә, рухи-әхлаҡи мәҙәниәт хаҡында һәр бер гуманитар предмет үҙе күпте һөйләй һәм төплө һабаҡ бирә. Һәләтле уҡытыусы класында, әлбиттә. Мәҫәлән, рус теле һәм әҙәбиәте, тарих, география, биология дәрестәре - шул уҡ рухи-әхлаҡи ҡиммәттәр хаҡында түгелме ни? Достоевский, Толстой, Чехов һәм башҡа классиктарҙың үлемһеҙ әҫәрҙәре, бөйөк тарихи шәхестәребеҙҙең тормош өлгөһө, шулай уҡ Тыуған ил, Ватан киңлектәрен һәм байлыҡтарын өйрәнеүсе хатта география предметы ла төплө белемле уҡытыусы дәресендә ысын мәғәнәһендә рухи ҡиммәттәребеҙгә һөйөү тәрбиәләүсе һабаҡҡа әйләнә. Йәнә лә был кластарҙа электән "Рәсәй халыҡтарының рухи-әхлаҡи мәҙәниәт нигеҙҙәре" дәресе уҡытылып килгәс, тимәк, уның дәрестәр теҙмәһендә тәғәйен үҙ урыны бар, тигән һүҙ һәм яңы вариант өсөн ниндәйҙер предмет сәғәттәрен ҡыҫҡартыу ҙа кәрәк булмай сыға түгелме, тип комментарийҙар яҙа социаль селтәрҙәрҙә атаәсәләр.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

ИМТИХАНДАР

## ХӘЙЕРЛЕ МИҘГЕЛ БУЛҺЫН!



**Өфө хакимиәтенең мәғариф идаралығы 2026 йылға дәүләт йомғаҡлау аттестацияһының тулы теҙмәһен баҫтырып сығарҙы.**

● ***11-се кластар өсөн*** Берҙәм дәүләт имтиханын ваҡытынан алда тапшырыу осоро 20 мартта география һәм әҙәбиәт буйынса имтихандарҙан башланды. Математиканы 27 мартта тапшыралар, яҙғы этап 10 апрелдә тарих һәм химия менән тамамлана.

***Төп осор 1 июндән 19 июнгә тиклем дауам итә:***

1 июнь: тарих, әҙәбиәт, химия;
4 июнь: рус теле;
8 июнь: математика (ике кимәл);
11 июнь: йәмғиәтте өйрәнеү, физика;
15 июнь: биология, география, сит телдәр (яҙма);
18-19 июнь: сит телдәр (телдән), информатика.

Сығарылыш уҡыусыһының теләге буйынса бер фәндә 8 һәм 9 июлдә ҡабаттан тапшырырға була.

● ***Туғыҙынсы кластар өсөн*** Төп дәүләт имтиханын ваҡытынан алда тапшырыу осоро 21 апрелдә (математика) башлана һәм 6 майға тиклем дауам итә.

***Төп осор 2 июндә башлана һәм 19 июндә тамамлана.***

Мөһим даталар:
2 июнь: математика;
9 июнь: рус теле;
6 июнь: информатика һәм сит телдәр.

Етди сәбәп буйынса имтиханға килә алмаған уҡыусылар өсөн резерв көндәр - июнь аҙағында һәм июль башында, (29 июнь - 6 июль), өҫтәмә осор 3-25 сентябрҙә.

**Сираттағы әңгәмәбеҙ Республика инженер лицей-интернатының инновацион эшмәкәрлек буйынса директор урынбасары Айнур Зиннур улы Әмирханов, лицейҙың уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса директор урынбасары Фәнүр Тайып улы Йәһүҙин менән. Алдынғы был урта белем биреү учреждениһының бөгөнгө хәле нисек? Унда кемдәр уҡый һәм улар ниндәй шарттарҙа йәшәй? Һөйләшеү ошолар хаҡында һәм өлгәшкән уңыштары тураһында барҙы.**

**Һеҙҙең мәғариф учреждениеһының исеме үҙгәртелә-үҙгәртелә килеп, бөгөн Республика инженер лицей-интернаты тип атала бит инде. Яңы атама менән уҡыу процесында нимәләр үҙгәрҙе, хәҙер ниндәй бурыс-йүнәлештәргә көйләнде икән һеҙҙең эшмәкәрлек?**

**Айнур Зиннур улы:** Республика инженер лицей-интернаты - инновацион белем биреү учреждениеһы. Беҙҙә физика-математика, химия-технология һәм социаль-иҡтисади дисциплиналарҙы тәрән өйрәнеү нигеҙендә уҡытыу 5-11-се синыфтарҙа алып барыла. Бөгөнгө статусында 2016 йылдан алып эшләй һәм йәшәй. Республика Башҡорт лицей-интернатын Башҡа йүнәлештәргә килгәндә, олимпиада хәрәкәтен билдәләп китергә кәрәк. Беҙҙә остаздар ассоциацияһы уңышлы эшләп килә. "Лицей Академии Яндекса" федераль мәғариф проектында ҡатнашабыҙ. Унда 5-7 класс балалары программалау алымдарын үҙләштерә. Шулай уҡ пилотһыҙ осоусы аппараттар системаһын үҫтереү буйынса ла эштәр бара. Уҡыусылар дрондар йыйырға, уларҙы осорорға өйрәнә. 2025 йылда ойошторғайныҡ, өс аҙна шөғөлләнгән 6-сы, 7-се синыф уҡыусылары Рәсәй кимәлендәге ярышта өсөнсө урын алып ҡайтты. Бөгөн дә ошо кимәлдән төшкәнебеҙ юҡ. Был өлкәлә махсус уҡыу үткән биш уҡытыусыбыҙ бар.

лашҡан. Береһендә - тик малайҙар, икенсеһендә тик ҡыҙҙар ғына уҡый. Тәрбийәүи һәм башҡа саралар бергә үтә, ә уҡытыу һәм йәшәү, әйтеүемсә, айырым. Был традиция башҡорт һәм иҡтисад лицей-интернаттары үҙаллы эшләгән саҡтан килә. Бөтәһе беҙҙә 603 бала белем ала. Ҡаланан йөрөп уҡығандар ҙа бар. Уларҙың һаны артыҡ күп түгел, сама менән уҡыусыларҙың алтынан бер өлөшөн тәшкил итә. Ҡалғандары райондарҙан. Урал аръяғынан күпләп уҡыйҙар, күрше өлкәләрҙән дә балалар ҡабул итәбеҙ.

**Мәғариф системаһы алдына ҡуйылған талаптарҙың береһе бит инде инженер-техник кадрҙар әҙерләү. Ниндәйерәк йүнәлештә, ниндәй дә-** проблемаға, алдына ҡуйылған мәсьәләгә бөтөнләй башҡаса ҡарай һәм уның оригиналь сиселешен тәҡдим итеүе ихтимал. Эшләп йөрөгән кешенән айырмалы, ул икенсе төрлө уйлай һәм ҡул аҫтындағы мөмкинлектәрҙән генә сығып та бик үҙенсәлекле һәм үтә лә ябай проект тәҡдим итергә һәләтле. Быны, дивергент фекерләү, тиҙәр.

2024 йылда 7-се синыфтар өсөн Курчатов кластары асылды. Быға 2023 йылдың ноябрендә Республика Башлығы Радий Хәбиров менән "Курчатов институты" фәнни-тикшереү үҙәге президенты Михаил Валентинович Ковальчук ҡул ҡуйған хеҙмәттәшлек тураһындағы килешеү нигеҙ булды. Көн ҡағаҙына һуҡтырған был документ 2035 йылға тиклем илебеҙҙең технологик суверенитетын тәьмин итеү тураһындағы Президент Владимир Владимирович Путиндың махсус указына тап килә.

граммалары 5-се һәм 8-се кластарға яраҡлаштырып эшләнгән. Ошо синыфтар өсөн республика кимәлендә олимпиадалар юҡ, районда ғына ойошторола ла артабан дауам ителмәй. Һайлап алыу этабы онлайн үтә, иң яҡшы һөҙөмтә күрһәткән балаларҙы Өфөгә саҡырабыҙ. Ҡатнашыусылар һаны 16-17 меңгә барып етә. Еңеүселәргә ҡиммәтле андроид телефондар бүләк итәбеҙ. Уларҙы һатып алырға бағыусыларыбыҙ аҡса бүлә.

**Мәктәптә уҡытыу "Федераль дәүләт белем биреү стандарты" тип аталған документҡа нигеҙләнә. Уның буйынса бала база белеме ала. Предуниверсарий, Курчатов үҙәге программалары, предметтарҙы тәрән өйрәнеү... Былар әле физик һәм психологик йәһәттән ныҡып етмәгән бала өсөн өҫтәмә ауырлыҡ түгелме?**

**Айнур Зиннур улы:** Теләһә ҡайһы мәктәптә алһаҡ та, бала дәрестән тыш түңәрәктәргә,

# ИНЖЕНЕРҘАР ОШОНДА

## йәки Һүҙ Республика инженер

һәм республика Иҡтисад лицей-интернатын берләштереү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килде ул. Шулай итеп, быйыл 16 мартта мәктәбебеҙгә ун йыл булды. 2018 йылдан беҙ Өфө дәүләт нефть техник университетының предуниверсарийы булып торабыҙ. Башҡортсалап уны, лицей базаһында эшләгән университет алды мәктәбе, тип атарға булалыр. Йәғни, беҙ сығарылыш уҡыусыларын, ғөмүмән алғанда, атап үткән престижлы юғары уҡыу йортона инергә әҙерләйбеҙ. Икенсе яҡтан, был эшмәкәрлек өлкән синыф уҡыусыларын тыуған Башҡортостаныбыҙҙа ҡалдырыу маҡсатын да тота. Ул республика етәкселеге алып барған кадрҙар һәм халыҡтың ситкә китеүен кәметеү сәйәсәтенә тап килә.

Университет алды мәктәбен ойоштороуға бәйле йүнәлештә республикала тәүгеләрҙән булып башланыҡ. Тәүҙә бер генә класс аҙнаһына бер тапҡыр Өфө нефть техник университетында шөғөлләнһә, хәҙер барлыҡ унынсылар аҙнаһына ике тапҡыр унда йөрөй. Егет һәм ҡыҙҙар студент тормошон хәҙерҙән эстән күреп белә. Был киләсәктә уларға ныҡ ярҙам итәсәк. Әйткәндәй, сығарылыш уҡыусыларының илле процентҡа яҡыны ошо уҡыу йортона уҡырға инә лә инде.

Башта факультеттар менән танышалар һәм темалар һайлайҙар. Сентябрҙән апрель аҙағына тиклем ошо темалар буйынса махсус проекттар өҫтөндә эшләйҙәр, уларҙы тамамлағас, яҡлауға сығалар. Ҡуйылған балл уҡырға ингәндә иҫәпкә алына. Лицеистарыбыҙҙың иң яҡшы эштәре шулай уҡ яҙ мәлендә үткәрелгән халыҡ-ара конференцияға ла сығарыла. Был да өҫтәмә балл бирә. Уҡыусыларыбыҙ университеттың аспиранттары, доценттары менән тығыҙ бәйләнеш тота.



**рестәр, махсус программалар аша атҡарыла һеҙҙә был бурыс? Ниндәйҙер предметтарға өҫтөнлөк биреләләр? Һеҙ бар республика балалары өсөн математика, робот техникаһы буйынса олимпиадалар үткәрәһегеҙ, шулаймы?**

**Фәнүр Тайып улы:** 5-тән алып 9-ға тиклем кластарҙың бөтәһе лә математиканы тәрән өйрәнә. Сөнки математика бөтә теүәл фәндәрҙең дә ни-

***Лицейҙа уҡый алмай ҡайтып китеүселәр ҙә бар, әлбиттә. Ундай балаларҙы ике төркөмгә бүлеп була. Тәүгеләре интернат системаһына өйрәнеп китә алмай. Улар быға тиклем тыуған йорттан ситтә йәшәмәгәндәр. Өйҙәрен, ата-әсәләрен ныҡ һағыналар. Ундайҙар сентябрҙә үк ҡайтып китә, ғәҙәттә. Кластан берәү-икәү булыуы ихтимал. Икенселәр сессия һөҙөмтәләре буйынса (беҙҙә һигеҙенсе - ун беренсе синыфтар вуздарҙағы шикелле сессия имтихандары, зачеттар бирә), лицей программаһын тарта алмауын аңлайҙар, һәм, ғәҙәттә, ҡайтып китәләр.***

**Фәнүр Тайып улы:** 2016 йылда ике мәктәп ҡушылды, тиғәйнек бит инде. Был мәлдә Рәсәйҙә инженер кадрҙарына ҡытлыҡ килеп тыуыуы тураһында ҙур дискуссиялар башланды. Ә иҡтисадсылар, юристар, киреһенсә, саманан тыш күп әҙерләнеүе асыҡланды. Иҫләйһегеҙҙер, 90-сы, 2000-се йылдар башында "менеджер"ға уҡыу модаға инде. Йәштәр йығылып ятып ошо һөнәргә әҙерләгән юғары уҡыу йорттарын, факультеттарҙы "штурмланы". Йәнәһе, уҡып сыҡҡас, етәксе булалар.

Инженер лицейында тәүҙә физика менән математикаға өҫтөнлөк бирелде, шунан химия һәм биология фәндәре үҫеш алды. Илгә ниндәй инженер-техник белгестәр кәрәк, шул йүнәлеште тоторға тырышабыҙ.

Лицей бер-береһенән айырым торған (сама менән 3 саҡрым ара) ике корпуста урын-

геҙен тәшкил итә. Был предметты үҙләштермәйенсә, химияға ла, физикаға ла тотоноп булмай. Юҡҡа ғына, "математика - царица наук", тимәйҙәр бит. 10-сы синыфтар - беҙҙең профилле класстар. Уларҙа математика, физика, информатика профиль дәрестәр булараҡ инә. Тәбиғи фәндәр профилендә төп предметтар - химия, биология.

Предуниверсарий программаһы буйынса, Айнур Зиннур улы әйтеп китте инде. Уҡыусылар үҙҙәре һайлаған темаға проект әҙерләй һәм уны яҡлай. Ул физика, химия, математика, информатика өлкәләрен, йәки бер-береһенә үтеп ингән бер нисә фәнде үҙ эсенә алыуы ихтимал. Әйтәйек, робототехникала информатика ла, физика ла, математика ла кәрәк. Производствоға яҡын, йәки уға тура-нан-тура ҡағылған проект темаһына өҫтөнлөк бирелә. Бала бит

Республикабыҙҙа беренселәрҙән булып Курчатов кластары беҙҙә һәм Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт гимназия-интернатында асылды. Ул кластар, федераль дәүләт белем биреү стандартынан тыш, өҫтәмә программа буйынса шөғөлләнә. Ул алты йүнәлешкә бүленгән: робототехника; экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу, фотобиореакторҙар; материалдарҙы өйрәнеү: кристаллдар, металдар һәм башҡа материалдар; гербарий төҙөү, шул иҫәптән һанлы гербарий; биотик һәм абиотик факторҙарҙың үҫемлектәр үҫешенә йоғонтоһо; микроскопия и биотехнологиялар. Шулай уҡ проект системаһы индерелгән. Быптыр ике уҡыусыбыҙ - Карина Арыҫланова менән Алиса Карепанова - Рәсәй кимәлендә конкурста ҡатнашты. Алиса - беренсе, Карина икенсе урын алды. Икеһе лә аҙаҡтан "Артек"та ял иттеләр.

**Айнур Зиннур улы:** Республика Мәғариф министрлығы, Өфө нефть техник университеты һәм Республика һәләттәрҙе үҫтереү үҙәге менән берлектә үҙебеҙҙең инженер лицейында математика, физика, химия һәм робототехника буйынса дүрт республика олимпиадаһы үткәрәбеҙ. Улар ике этаптан тора һәм про-

уҡыуҙарға йөрөй. Беҙ уҡыу һәм ял балансын тотабыҙ, әлбиттә. Бер-бер артлы ун дәрес үткәреүҙән фәтүә булмаясаҡ икәне билдәле. Лицей тормошо аныҡ көн тәртибенә, режимға, ҡоролған. Саф һауала йөрөү, спорт секциялары - барыһы өсөн дә ваҡыт бүленгән. Шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: бала беҙгә, уҡыйым, тип килә. Шуға уҡыуға ынтылыу - дөйөм мәктәп мөхитенең төп күренеше ул. Беҙгә әлегеүе лә бит ябай түгел. Бер урынға, ғәҙәттә, егермәнән ашыу кеше дәғүә итә. Әлбиттә, аңлатыу эше лә алып барабыҙ. Хәҙер уҡыусының иң ҡурҡҡаны - Берҙәм дәүләт имтихандары. Юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән уҡыусылар сертификат ала, ул иһә Өфө нефть техник университетына конкурсһыҙ инеү һәм юғары стипендия алып уҡыу хоҡуғын бирә. Ундай стипендия бер эш хаҡына тиң - 60 мең һум. Ошоларҙы баланың үҙенә, ата-әсәһенә аңлатһаң, уҡыуға мөнәсәбәт ныҡ үҙгәрә.

**Фәнүр Тайып улы:** Берҙәм дәүләт имтиханын уҡыусы бер тапҡыр ғына бирһә, химиянан, мәҫәлән, мәктәптә уҡыу осоронда олимпиадала ун тапҡыр ҡатнаша ала. Призлы урын, Айнур Зиннур улы әйтеүенсә, киң мөмкинлектәр аса. Белемең булып та, Берҙәм дәүләт имтиханынан юғары балл йыя алмауың ихтимал. Төрлө хәлдәр була бит: баланың ҡаушап ҡалыуы, ауырыу хәлдә булыуы мөмкин.

Лицейҙа уҡый алмай ҡайтып китеүселәр ҙә бар, әлбиттә. Ундай балаларҙы ике төркөмгә бүлеп була. Тәүгеләре интернат системаһына өйрәнеп китә алмай. Улар быға тиклем тыуған йорттан ситтә йәшәмәгәндәр. Өйҙәрен, ата-әсәләрен ныҡ һағыналар. Ундайҙар сентябрҙә үк

***✓ Баланы асырға кәрәк. Талант ул - уңыштың яртыһы ғына. Балаға дөрөҫ йүнәлеш биреү мотлаҡ. Беҙҙең бөгөнгө уҡытыусыларыбыҙҙың күпселеге - үҙҙәре ошо юлды үткән элекке лицеистар. Шуға улар балалар менән уртаҡ телде тиҙ таба.***

# ТӘРБИӘЛӘНӘ,

## лицей-интернаты тураһында

ҡайтып китә, ғәҙәттә. Кластан берәү-икәү булыуы ихтимал. Икенселәр сессия һөҙөмтәләре буйынса (беҙҙә һигеҙенсе - ун беренсе синыфтар вуздарҙағы шикелле сессия имтихандары, зачеттар бирә), лицей программаһын тарта алмауын аңлайҙар, һәм, ғәҙәттә, ҡайтып китәләр. Беҙҙең шарттарҙа сессияны тик һәлкәүҙәр генә бирә алмай, сөнки уҡыу өсөн бөтә мөмкинлектәр ҙә булдырылған.

**Донъя кимәлендәге олимпиадаларҙа алтын миҙал яулаған Вадим Харисовтар тап ошо лицейҙың үҙендә барлыҡҡа киләме, әллә улар һеҙгә уҡырға килгәнсе үк вундеркинд булып өлгөргән буламы? Ундай уҡыусылар менән индивидуаль шөғөлләнәһегеҙме, әллә һеҙҙәге уҡытыу программаһы быға булышлыҡ итәме? Тағы ниндәй уңышлы уҡыусыларығыҙҙың исемдәрен атар инегеҙ?**

**Айнур Зиннур улы:** Баланы, ғөмүмән, асырға кәрәк. Талант ул - уңыштың яртыһы ғына. Балаға бит дөрөҫ йүнәлеш биреү мотлаҡ. Беҙҙең бөгөнгө уҡытыусыларыбыҙҙың күпселеге - үҙҙәре ошо юлды үткән элекке лицеистар. Шуға улар балалар менән уртаҡ телде тиҙ таба. Лицейҙа уҡытыу процесы триместрҙарға бүленгән. Биш аҙна уҡыйбыҙ, бер аҙна ял итәбеҙ. "Ял итәбеҙ" тигәнде тырнаҡтар эсенә алырға кәрәктер, сөнки нәҡ ошо ял аҙнаһында балалар менән ныҡлы шөғөлләнәбеҙ. Бөрйән районында лагерыбыҙ бар, унда йәйге осорҙа уҡыусылар ял итә һәм шулай уҡ мәктәп олимпиадаһының көҙгө этабына әҙерләнә. "Көҙгө", "ҡышҡы", "яҙғы" мәктәп тип аталған әҙерлек осорҙары бар. Улар каникул көндәренә бәйле.

Вадим Харисов лицейға Межгорье ҡалаһынан 7-се класҡа килде. Математика олимпиадаһында яҡшы һөҙөмтәләр күрһәткәйне ул. Әйтергә кәрәк, башҡаларҙан бер нимәһе менән дә айырылып тормай ине. Беҙҙең "Остаздар ассоциацияһы"нда, түңәрәктәрҙә шөғөлләнеп, асылып китте. Тәүҙә республикала призер, еңеүсе булды, шунан Рәсәй кимәленә сыҡты. Һөҙөмтәлә Вадим химия буйынса Бөтә Донъя олимпиадаһының алтын миҙалын дүрт тапҡыр яулауға өлгәште. Уҡытыусыһы - Айнур Марс улы Ғүмәров. Әйткәндәй, ул - лицейҙы тамамлап, вуздан һуң тыуған мәктәбенә ҡайтҡан коллегаларыбыҙҙың береһе.

Әлеге ваҡытта информатиканан бик матур һөҙөмтәләребеҙ бар. Былтыр Бөтә Рәсәй олимпиадаһының йомғаҡлау этабында ике уҡыусыбыҙ - Шамил Ғәбитов һәм Ғәлим Фазлетдинов - программалау буйынса еңеү яуланы. Улар әле 11-се синыфта уҡый. Башҡортостан уҡыусылары һуңғы тапҡыр бындай һөҙөмтәгә ун биш йыл элек өлгәшкән булған. Һуңғы ҡаҙаныштарыбыҙ Дарина Ғәзизова (география), Анастасия Лавренова, Искәндәр Шәмиғолов, Айҙар Салауатов (химия) исемдәре менән бәйле. Һанай китһәң, улар бик күп.

**Моғайын, иҫәп алып бараһығыҙҙыр: сығарылыш уҡыусылары уҡырға ҡайҙа инә? Вуздарға инеү күрһәткесе йөҙ процентҡа етәлер бит инде?**

**Фәнүр Тайып улы:** Өфө нефть техник университетын сығарылыш уҡыусыларыбыҙҙың яртыһына яҡыны һайлай, тип әйткәйнек инде. Республиканың башҡа вуздарында, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, башҡа ҡалаларҙа ла уҡыйҙар. Мәктәпте тамамлаған балаларҙың барыһы ла, йөҙ процент, юғары уҡыу йорттарына ингән осраҡ бер ҡайҙа ла, бер ҡасан да теркәлмәгән. Башҡаларҙың күрһәткестәрен ҡарап барабыҙ, иң юғарыһан - 98 процент. Йәштәрҙең бит тормошҡа, донъяға ҡарашы үҙенсәлекле. Бер ҡыҙыбыҙ лицейҙы миҙалға тамамланы. Ләкин бер ҡайҙа ла уҡырға инмәне, бер йыл ял итте, буласаҡ һөнәрен ентекле һайлау өсөн пауза алды. Ахырҙа Өфө фән һәм техник университетының хоҡуҡ институтын һайланы.

Икенсе бер ҡыҙыбыҙ урта һөнәри белем алыу учреждениеһына инде. Ул бала саҡтан музыка теорияһы буйынса белгес булырға хыялланған. Туғыҙҙан һуң ата-әсәһе башланғыс музыка белеме алыр өсөн колледжға барырға рөхсәт итмәгән. Берҙәм дәүләт имтихандарында өс предметтан туҡһандан ашыу балл йыйып, лицейҙы миҙалға тамамлаған уҡыусыбыҙ, вузға бармай, сәнғәт училищеһына инде. Баҡһаң, сәнғәт академияһына башланғыс музыка белеме булмағандарҙы алмайҙар икән. Шулай хыялын тормошҡа ашырҙы ул.

Ошо миҫалдарҙан ғына сығып та, сығарылыш уҡыусыларының барыһы ла тәүге йылда уҡ студент булып китә, тип әйтеп булмай.

**Лицейҙың яулаған үрҙәре бихисап, күреүебеҙсә. Һеҙҙең үҙегеҙҙең күҙлектән сығып, Республика инженер лицей-интернатының кимәлен нисек баһалап була? Юғарымы, әллә бик юғарымы?**

**Айнур Зиннур улы:** Был осраҡта мәктәптең рейтингына нигеҙләнеп кенә һүҙ йөрөтөргә мөмкин. Сөнки субъектив баһа бер ваҡытта ла хәҡиҡәткә тап килмәйәсәк. Химия-биология йүнәлеше буйынса лицей Рәсәйҙең 100 иң яҡшы урта белем биреү учреждениелары исемлегенә ингән. РАЕКС агентлығы рейтингында иң яҡшы техник мәктәптәр араһында 104-се урындабыҙ. РАЕКС престижлы юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән сығарылыш уҡыусыларының процентын иҫәпкә алып баһа ҡуя. Республика буйынса ун иң яҡшы мәктәп иҫәбендә йөрөйбөҙ.

**Республика буйлап уҡыусылар йыйыу эшмәкәрлеге лә һеҙгә иң-иңдәрҙе үҙегеҙгә йәлеп итеүгә булышлыҡ итәлер, шулай бит?**

**Айнур Зиннур улы:** Элек райондарға йөрөп йыя инек балаларҙы. Ковид пандемияһы был эшебеҙгә үҙенең төҙәтмәләрен индерҙе. Үрҙә әйтеүемсә, һәләтле балаларҙы беҙ олимпиадалар аша асыҡлайбыҙ һәм иң-индәргә беҙҙең инженер лицейына уҡырға килергә тәҡдим итәбеҙ. Адаптацион лагерыбыҙ эшләй. Теләүселәр, унда өс көн йәшәп, лицей менән яҡындан таныша ала. Ләкин лицеист булып китер өсөн олимпиадала еңеүселәр ҙә имтихан тота. Йәғни, ике иләк аша иләп ҡабул итәбеҙ буласаҡ уҡыусыларыбыҙҙы. Әлбиттә, был үҙенең һөҙөмтәләрен бирә.



***Һәләтле балаларҙы беҙ олимпиадалар аша асыҡлайбыҙ һәм иң-иңдәргә беҙҙең инженер лицейына уҡырға килергә тәҡдим итәбеҙ. Адаптацион лагерыбыҙ эшләй. Теләүселәр, унда өс көн йәшәп, лицей менән яҡындан таныша ала. Ләкин лицеист булып китер өсөн олимпиадала еңеүселәр ҙә имтихан тота. Йәғни, ике иләк аша иләп ҡабул итәбеҙ буласаҡ уҡыусыларыбыҙҙы. Әлбиттә, был үҙенең һөҙөмтәләрен бирә.***

**Фәнүр Тайып улы:** Лицейға балаларҙы икешәр класс 5-кә һәм 7-гә, шулай уҡ 10-ға икешәр класс малайҙарҙы һәм ҡыҙҙарҙы алабыҙ. Ҡыҙҙарҙа был - технологик (физика-математика) һәм тәбиғи-ғилми (химия-биология) профилле синыфтар. Малайҙарҙа икәүһе лә технологик профилле - берәүһе физика-математика йүнәлешендә, икенсеһе информатика буйынса.

Әйтергә кәрәк, балаларыбыҙҙың күпселеге - Урал аръяғынан. Бигерәк тә Хәйбулла, Әбйәлил райондарынан лицейҙы үҙ итәләр. Уларҙың яҡшы әҙерлек менән килеүен дә билдәләргә кәрәк.

**Һеҙҙә уҡыу йорто барлыҡҡа килгәндән алып башҡорт телен, башҡорт мәҙәниәтен өйрәнеүгә лә төп иғтибар бирелде. "Башҡорттар.ру" командаһы гел "Шаяниум"да еңеп, башҡа балалар командаларына буй етмәҫлек өлгө булып торҙо. Хәҙер был традициялар һаҡланамы?**

**Фәнүр Тайып улы:** Иң элек шуны билдәләп китергә кәрәк: беҙҙә төрлө милләт балалары уҡый, лицей милли мәктәп статусын йөрөтмәй. Башҡорт теле, тәү сиратта, дәүләт теле булараҡ уҡытыла. Аҙнаһына бер сәғәт ҡаралған. Шулай уҡ туған тел программаһы буйынса ла дәрестәр инә. Был осраҡта балалар башҡорт телен аҙнаһына - ике, башҡорт әҙәбиәтен бер сәғәт өйрәнә. Ошо сиктән сыға алмайбыҙ. Тел ниндәй кимәлдә үҙләштерелә - был баланың үҙенән дә, база белеменән дә, тыуып-үҫкән ғаиләһе мөхитенән дә тора. Әсә телендә иркен аралашҡандар, аңлаһалар ҙа һөйләшмәгәндәр һәм бөтөнләй белмәгәндәр бар. Башҡорт телен биш Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы уҡыта. Был да бит - үҙенә күрә юғары күрһәткес. Мәҫәлән, Таңсулпан Мулләхмәт ҡыҙы Исламова, Мәүлиха Фәрит ҡыҙы Дәүләтшина, Нәфисә Наил ҡыҙы Кинйәбаева - башҡорт теле буйынса дәреслектәр авторҙары.

**Айнур Зиннур улы:** Лицей уҡыусылары башҡорт теле буйынса республика конкурстарында даими ҡатнаша. "Урал батыр" эпосын һөйләү буйынса Рәзинә Шахморатова Гран-при алды. Сығышы менән ул Баймаҡ районы Темәс ауылынан. Башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалекты буйынса олимпиадаларҙа ҡатнашабыҙ. Телде белмәгәндәр, самалы белгәндәр һәм яҡшы белгәндәр төркөмдәренә бүлеп алып барабыҙ уҡытыуҙы.

"Башҡорттар.ру" командаһы тере, "Шаяниум"да ҡатнашабыҙ. Элекке кеүек еңеүҙәребеҙ ҙә бар. Команданы Айгөл Сәйфулла ҡыҙы Хәйбуллина етәкләй.

Бер нисә йыл элек Башҡортостан Мәғариф министрлығы үткәргән "Башҡорт теле буйынса иң шәп видеоролик" конкурсында уҡыусыбыҙ Сыңғыҙ Ғиләжев беренсе урын алғайны.

**Республика инженер лицей-интернатында йәшәү, ашатыу, балалар ялы нисек ойошторолған икән?**

**Фәнүр Тайып улы:** Йәшәү шарттары беҙҙә яҡшы. Биш тапҡыр ашатыу ойошторолған. Малайҙар корпусында ятаҡ менән уҡыу кабинеттары бинаһы йылы үткәүел менән тоташтырылған. Ата-әсәләрҙең айлыҡ түләүе ҙур түгел - дүрт мең ярымдан ашыуыраҡ ҡына. Республика бюджеты дотацияһы иҫәбенә шулай сыға. Олимпиадаларҙа юғары һөҙөмтәләр күрһәткән балалар түләүҙән бөтөнләй бушатыла. Аҙ тәьмин ителгән күп балалы ғаиләнән булған уҡыусылар ҙа дәүләт иҫәбенә йәшәй. Ҡаланан килеп уҡығандар ҡаралғандың алтмыш процентын индерә. Ташламалар күп балалы ғаиләләр, Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балаларына ла ҡаралған. Лицейҙың үҙенең ашханаһы булыуы бигерәк тә һәйбәт. Сифаты төшә, тип, балаларҙы ашатыуҙы аутсорсингҡа бирмәнек.

**Айнур Зиннур улы:** Балалар спорт менән дә мауыға. Республика инженер лицейы, тағы ун бер интернат тибындағы мәктәп менән бергә, туранан-тура Мәғариф министрлығына ҡарай. Урынлашыу күҙлегенән Өфөнөң Орджоникидзе районы биләмәһенә инәбеҙ. Республика әһәмиәтендәге мәктәп булараҡ, башта беҙҙе районда үткән ярыштарҙа ҡатнаштырманылар. Был этапты үтмәйенсә, ҡала һәм республика кимәленә сығып булмай. Оҙайлы һөйләшеүҙәр алып барып, яу менән, тигәндәй, саҡ инеп киттек ярыштарға. Баскетбол менән волейболдан республика турнирҙарында уйнайбыҙ хәҙер.

Шахмат буйынса лицей командаһы - Башҡортостандың өс тапҡыр чемпионы. Морат Бастанов былтыр классик шахмат буйынса 17 йәшкә тиклемге үҫмерҙәр араһында Рәсәй чемпионы исемен яуланы. Уға шулай уҡ "Спорт мастерына кандидат" исеме бирелде. Шахматта өс йыл элек кенә уйнай башлаған уҡыусыбыҙ шундай ҡаҙаныштарға өлгәште. Был да бит - лицей педагогтары коллективы хеҙмәте емеше.

Балалар тәнәфес мәлендә уйнап алһын өсөн ял зоналарына шахмат таҡталары, теннис өҫтәлдәре ҡуйылған.

**Ҡыҫҡаса ғына үҙегеҙ тураһында әйтеп китһәгеҙ ине...**

**Айнур Зиннур улы:** Мин үҙем сығышым менән Ейәнсура районынан. Республика инженер лицей-интернатында 2018 йылдан алып эшләйем. Директорҙың инновацион эшмәкәрлек буйынса урынбаҫары вазифаһын биләйем.

**Фәнүр Тайып улы:** Сығышым Әбйәлил районынан. Иҡтисад лицейында 2015 йылда эшләй башланым. 2017 йылдан инженер лицейы директорының уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса урынбаҫары булып торам. Шулай уҡ "НефтеПолис" инженерлыҡ мәктәптәрен үҫтереү фонды етәксеһе эшен дә алып барам.

**Ҡыҙыҡлы әңгәмә өсөн ҙур рәхмәт. Эшегеҙҙә уңыштар теләйем.**

**Рәсүл БАЙГИЛДИН**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✔ Беҙҙең Үҙәккә күрше генә 166-сы башҡорт балалар баҡсаһы эшләй. Улар беҙгә айырым да, төркөмдәре менән килеп шөғөлләнәләр, уҡытыусыларыбыҙ уларға бара.*



**Бала күңеле - сикһеҙ Йыһан. Күпме хыял-теләктәр, ынтылыштар, осоштар тупланған ул "Йыһанда". Аһа шул бала күңелендәге хыялдарға ҡанат ҡуйыу, уның һәләттәрен үҫтереү менән шөғөлләнәләр ҙә инде баш ҡаланың быйыл 25 йыллыҡ юбилейын ҡаршылаусы "Глобус" балалар ижады үҙәгендә. Үҙәктең директоры Раушан Раян улы ҒӘЛИМОВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ:**

# ӨҪТӘМӘ БЕЛЕМ - УЛ ИЖАД,

## шуға ла балалар бында бик теләп йөрөй



**➔ Аңлашылыуынса, был ижади үҙәктә балаларға өҫтәмә белем бирәләр, уларға үҙҙәренең нимәгә һәләтле икәнен, шулай уҡ буласаҡ һөнәре йүнәлешен дә асыҡларға ярҙам итәләр?**

- Эйе, тап шулай. Мин "Глобус" балалар ижады үҙәгендә 2014 йылда директор булып эш башлағайным. Уға саҡлы Өфөнөң ул ваҡыттағы 2-се педагогия училищеһында, шунан БДПУ-ның "Худграф" бүлексәһендә уҡып, үҙемдең педагоглыҡ һөнәремә эйә булғайным. Был белемем әлеге эшемдә бик тә кәрәкле булып сыҡты.

Беҙҙең Үҙәктә йүнәлештәр бик күп: музыка, рәсем, спорт, бейеү (эстрада һәм халыҡ бейеүҙәре), техник йүнәлеш буйынса ла өҫтәмә дәрестәр бирелә. Үҙем институтта уҡығанда уҡ кейеҙ баҫыу серҙәрен үҙләштереп, шул темаға диплом эше яҙғайным. "Глобус"та ла бер нисә төркөм балалар кейеҙ баҫыу техникаһын өйрәнә. Йыр яҙҙырыу студияһы ла асты, хәҙер балаларға клиптар төшөрөү мөмкинлеге бар. Әйткәндәй, әлеге ваҡытта IT тармағы буйынса әүҙем эш алып барыла. 2023 йылда айырым бинала "Техноглобус" IT-паркы асылды. Унда программалау, робототехника, пилотһыҙ осоу аппараттары, график дизайн кеүек бик ҡыҙыҡлы йүнәлештәр эшләй. Хатта интерактив панелдәрҙә уйнай торған цифрлы сатраш, "Техновышевальня" кеүектәре лә бар. Беҙгә килгән бер балалар ҙа техник йүнәлештә бик алғыр була, тигән һүҙ түгел, уларҙың күптәре сигеү кеүек ҡул эштәре менән дә булырға ярата. Беҙ был ике ҡапма-ҡаршы һөнәрҙәрҙе берләштереү маҡсатында йөнең теләгән һүрәтте унай пикселдәргә бүлеп, сигеү өсөн нигеҙ әҙерләп биреүсе шул "Техновышевальня" программаһын барлыҡҡа килтерҙек.

**➔ Мәктәп - ул стандарт система, программа алдан билдәле. Өҫтәмә белем биреү унан нимәһе менән айырыла? Шулай уҡ күп нимә балаларҙың үҙе теләп йөрөүенән тора, мәктәптә, билдәле булыуынса, ҡайһы саҡта баҫым яһап уҡытырға тура килә. Мәктәп менән сағыштырғанда, һеҙҙең балаларҙың мотивацияһы нисек?**

- Өҫтәмә белем - ул ижад һәм шуныһы менән ул бик ҡыҙыҡлы. Балалар телефондан айырылмай, тип йыш ҡабатлайбыҙ бөгөн. Был, ысынлап та, бик ҙур проблема. Ләкин үҙҙәре менән һөйләшкәндә балаларҙың нимәгәләр ҡыҙыҡһыныуы, ихтыяжы барлығын белергә була. Ҡайһы саҡта уның уҡыусының ниндәй педагог менән эшләүенә лә бәйле. Беҙҙә үҙ эштәрен яҡшы белгән тәжрибәле, профессиональ уҡытыусылар эшләй. Улар мәктәптәрҙәге ҡайһы бер уҡытыу алымдарының баланың дәртен һүрелдерергә мөмкин икәнен яҡшы аңлай. Бала янылышһа, әрләшмәй генә, йомшаҡ итеп кенә төҙәтә, дәртләндерә белә педагогтар. Шулай уҡ уның ҡаҙаныу, үҙҙәрендә көс тойоу балаларға бик кәрәк. Беҙҙең Үҙәккә йөрөй башлағандан һуң күптәренең мәктәптә лә уҡыу кимәле күтәрелгәне хаҡында әйтә ата-әсәләр.

Беҙҙә билдәләр ҡуйылмай. Беҙ йыл да контроль мониторинг үткәреп, тәрбиәләнеүселәрҙең үҙләштергән белемен беҙгә килгән саҡта - бер тапҡыр, йыл уртаһында һәм йыл аҙағында тағы ла бәрәр тапҡыр тикшереп торабыҙ. Шул ваҡытта уларҙың ни тиклем үҫешкәне лә асыҡ күренә.

**➔ Өфө ҡалаһының һәр бер районында үҙенең өҫтәмә белем биреү үҙәктәре бар, ә шулай ҙа һеҙгә башҡа райондарҙан да йөрөгән балалар бармы?**

- Муниципаль учреждение булараҡ, әлбиттә, иң тәү сиратта үҙебеҙҙең Совет районы өсөн эшләйбеҙ, әммә ҡаланың башҡа райондарынан шөғөлләнергә киләләр. Ошо йәһәттән беҙ үҙебеҙҙең рейтинг, тәжрибәбеҙ менән балаларҙы үҙебеҙгә йәлеп итергә тырышабыҙ, башҡа үҙәктәр менән конкуренция ла бар. Бер ваҡыт, эшләй башлағаныма бер йыл самаһы үткәйне, урамда күрше өйҙә йәшәгән оло ғына йәштәге апай туҡтатып: "Һеҙ эш башлағайныһыҙ, урамда машина ҡуйырға урын юҡ!" - тип тиргәшә башланы. Мин уның был әрләшкәненә ҡыуанып, йылмайып торам. Сөнки беҙгә Черниковка, Һупайлы бисҭәләренән дә киләләр хәҙер, матур данын, таралған. Алыҫтан килгән ата-әсәләр балаларын килтереп, көтөп алып ҡайталар, шул хәл апайға унайһыҙлыҡ тыуҙырған, күрәһең.

**➔ Ябай ҡала мәктәбендә балаларҙың һәләттәре асылмай ҡалырға ла мөмкин. Был йәһәттән "Глобус"тың балаларҙың һәләттәрен асыу, профессиональ йүнәлеш биреүҙәге әһәмиәте ниндәй?**

- Был бик сетерекле һорау. Ҡайһы саҡта эш ата-әсәләрҙең үҙҙәренән дә тора. Улар ыңғай һөҙөмтәгә ышанып, хатта ни менән шөғөлләнергә тейеш икәнен алдан билдәләп, балаһын беҙгә алып киләләр. Баланы беҙгә килтереү генә хәжәт, ул үҙенә оҡшаған йүнәлеште үҙе табасаҡ, тип йыш ҡабатлайым. Балалар һәр саҡ үҙҙәре теләгән йүнәлештә үҙҙәре һайлай ала. Мәҫәлән, бер баланы көрәшкә тип килтерҙеләр, ул аҙаҡ үҙ теләге менән фортепианаға күсте. Былтыр штатыбыҙға профессиональ йүнәлеш биреү буйынса белгес алдыҡ. Ул хәҙер балалар менән төрлө методикалар буйынса тестар үткәрә, үҙе лә спикер, модератор булып төрлө сараларҙа ҡатнаша. Беҙгә, мәҫәлән, мөмкинлектәре сикләнгән 120 бала йөрөй. Улар ҙа спорт йә берәй ижади эш менән шөғөлләнеп, үҙҙәренең нимәгә һәләтле булыуын асыҡлай, артабан үҫешә, тормошта үҙ урынын таба.

**➔ Йүнәлештәрегеҙ бик күп. Ә балаларҙың уңыштарын күрһәтеү мөмкинлектәрен нисек файҙаланаһығыҙ?**

- Үҙебеҙ дүрт ҡала, ике район конкурстарын үткәреп торабыҙ. Мәҫәлән, театр йүнәлеше буйынса "Алтын битлек" тигән бик ҙур кимәлдә үтә торған конкурсыбыҙ бар. Башҡа ҡала, төбәктәрҙән дә ҡатнашыусылар ҡабул итәбеҙ. Былтыр Иглин районы, Стәрлетамаҡ ҡалаһынан килеүселәр булды. Графикалы дизайн буйынса "Цифровое перо" тигән бик ҡыҙыҡлы конкурс үтеп тора. Шулай уҡ пилотһыҙ осоусы аппараттар буйынса ла иң беренселәрҙән булып конкурстар ойоштора башланыҡ.

Һәм тағы бер бик ҡыҙыҡлы йүнәлеш - ул тиҙлеккә ҡоролған конструкторҙар йыйыу. Пермь ҡалаһынан килешеү буйынса бик ҡиммәтле, әммә күп функциялы 18 комплект конструктор алып ҡайтылғайны. Уларҙан моторлы йәки моторһыҙ самокат, трицикл, квадроцикл, һыу велосипеды һәм башҡа билдәле булған 80 төр проект атҡарып була. Был конструкторҙарға ҡыҙыҡһыныу уятыр өсөн атайҙар менән улдар өсөн шәп конкурс уйлап сығарҙыҡ. Атай һәм улдарҙан торған өс кешелек командалар конструкторҙарҙы тиҙлеккә йыйыуҙа ярышалар. Беҙ уны 1 июндә Якутов паркында үткәрәбеҙ. Бөтә ҡала учреждениеларынан 18 команда ярыша. Был бәйге шулай уҡ ғаилә ялы булараҡ, атай менән балалары араһында мөнәсәбәттәрҙе нығытыуға булышлыҡ итә.

Былардан тыш, төрлө күргәҙмәләр, концерттар ойоштороп торабыҙ. Балаларҙың өлгөлө халыҡ бейеү ансамбле быны инде икенсе тапҡыр Кремль залында сығыш яһарға әҙерләнә. Халыҡара ярыштарға килгәндә, былтыр Астанала үткән конкурста ҡатнашып, алты Гран-при, бер беренсе урын алып ҡайттылар. Бейеүҙәре сағыу, костюмдары матур. Костюмдар йәһәтенән ата-әсәләр ныҡ ярҙам итә.

**➔ Балаларҙың ғаиләләре менән бик тығыҙ мөнәсәбәттә булыуығыҙ тураһында әйттегеҙ. Ә балалар уҡыған башҡа белем биреү йорттары менән бергә эш итәһегеҙме?**

- Әлбиттә, шунһыҙ булмай. Балалар баҡсалары менән беҙ бәйләнештәрҙе эҙмәйбеҙ, уларҙың базаһында беҙҙең төрбиәселәр эшләй. Уңлаған мәктәп менән килешеү төҙөлгән, беҙҙең тренерҙар уларға барып, рәсем, театр, спорт түңәрәктәрендә эшләйҙәр. Башҡорт дәүләт педагогия һәм нефть университеттары менән шулай уҡ тығыҙ бәйләнештәбеҙ. Студенттарҙы өсөнсө курстан уҡ эшкә алыу мөмкинлеге бар. Мәҫәлән, шул уҡ пилотһыҙ осоу аппараттары буйынса йүнәлеш асҡанда педагогтар юҡ ине. Ғәли Ғилмединов исемле бер егетте башлап эшкә алдыҡ. Йәш булыуына ҡарамаҫтан, ул үҙен бик тә ҡыйыу тота, педагог булараҡ конкурстарҙа ҡатнашып, призлы урындар яулай, үҙебеҙҙә ойошторорға мөмкин булған төрлө ярыш идеяларын яуҙырып ҡына тора.

Йәш белгестәр күп хәҙер беҙҙә. Уларҙы эшкә алып, яңылышмағанынды күреү икеләтә ҡыуанyслы. Бала саҡтарынан беҙҙә шөғөлләнеп, шулай уҡ студент ваҡытында беҙгә эшкә килеп, хәҙер тулыһынса беҙҙең коллега булғандар бар. Педагогик династиялар ҙа барлыҡҡа килә. Майлы буяуҙар менән эшләү буйынса бик көслө Юрий Уждавини исемле рәссам хеҙмәт иткәйне беҙҙә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ауырыу сәбәпле мәрхүм булып ҡалды. Быйыл уның ҡыҙы, сәнғәт училищеһын тамамлап, беҙгә килде, атаһының юлын дауам итә.

**➔ 2026 йыл Рәсәйҙә - Халыҡтар берҙәмлеге, Башҡортостанда Ҙур һәм татыу ғаилә йылы тип иғлан ителде. Һеҙҙең өҫтәмә белем биреү учреждениеһында нисә милләт балалары уҡый? Бер нисә балаһын һеҙгә йөрөткән ғаиләләр бармы?**

- Өфөлә нисәмә төрлө милләт бар, шунса милләт балалары беҙҙә шөғөлләнә, тиһәң дә була. Береһен дә айырып ҡарамайбыҙ. Беҙҙең төп фойела төрлө халыҡтарға бәйле күргәҙмәләр ойоштора башланыҡ.

Башҡорттарға килгәндә, беҙҙең Үҙәккә күрше генә 166-сы башҡорт балалар баҡсаһы эшләй. Улар беҙгә айырым да, төркөмдәре менән килеп шөғөлләнәләр, уҡытыусыларыбыҙ уларға бара. "Логопедия" бүлегенә килгән бәләкәстәр "Һаумыһығыҙ" тип хор менән һаулыҡ ҡушып китәләр.

**➔ Һеҙҙең өҫтәмә уҡыу йортоноң үҙенең билдәле имиджы бар. Ә Мәғариф һәм ҡала етәкселеге йәһәтенән баһалар нисек?**

- Беҙ күп тапҡырҙар иң яҡшы инновацион учреждение исемдәрен алғаныбыҙ бар. Өҫтәмә белем биреү буйынса иң ҙуры тип һаналған "Сердце отдаю детям" конкурсында беҙҙең педагогтар енеү яулай, призлы урындар алып тора. Башҡа төбәктәрҙән килгән делегацияларҙы беҙгә ебәреүҙәре лә - ул ҙур күрһәткес, тип уйлайым. Ошо арала Чечен, Татарстан республикаларынан, Түбәнге Новгород, Ярославль ҡалаларынан килгән вәкилдәрҙе ҡаршыланыҡ. Былтыр үткән "Арктур" конкурсы сиктәрендә күп илдәрҙән килгән утыҙлаған етәксе, өҫтәмә белем биреү буйынса методистар беҙҙең мәктәптәрҙәге яҡшы мөхитте билдәләп китте. Шулай уҡ ҡунаҡтар яңы асылған "Техноглобус" паркының үҙенсәлектәре, дизайны күңелгә ятышлы булыуы менән һоҡланды. Был да бик мөһим, сөнки ошо барлыҡ нескәлектәргә балалар ҙа иң тәү сиратта иғтибар итә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тәүҙә балалар баҡсаһының бер мөйөшөндә генә ойошторолған Үҙәк хәҙер ике бинаны биләй. Ике бинаның залдары, кабинеттары ла тормошта үҙ юлын, үҙ һөнәрен табырға ынтылған маҡсатлы балалар шауынан гөр килеп тора. Раушан Раян улы Совет районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе булараҡ та бында ҡыҙыҡлы саралар, түңәрәк ҡорҙар ойоштора. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар менән дә фәһемле осрашыуҙар булып тора. Бындай рәсми саралар ҙа Үҙәктә шөғөлләнеүсе балаларҙы ҡыҙыҡтыра, уларҙың төрлө яҡлы үҫеше өсөн бер этәргес көс булып тора. Артабан да уңыштар юлдаш булһын был "Глобус" тип аталған балалар ижады үҙәге коллективына.**

**Айһылыу ДАУЫТОВА
әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Икенсе халыҡтар араһында беҙҙең ҡурайҙы үҙләштерергә тырышыусылар табылды. Йән әсеп, шунан бигерәк ҡабынып киттем. Балтырғандан көпшә эшләп, "ҡурай ошо була" тип хәбәр һөйләүселәре булды араларында.*



ИЖАДСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, "Ашҡаҙар" радиоһының баш режиссеры, күп тапшырыуҙар авторы, йырсы Урал Ниғмәтуллин - төпкә егелеп тарткан журналистарҙың береһе. Башҡортостан телерадиокомпанияһында утыҙ йылдан ашыу эшләү дәүерендә бик күп проекттар ғына түгел, күп яңы исемдәр ҙә асты ул. Радио фондын байытыуҙа Урал Миңлебай улының хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Музыка өлкәһендәге белеме, мәғлүмәтлелеге менән һөнәрҙәштәренә ысын терәк булып тора. Йыр сәнғәтенә ғашиҡ ир-азамат үҙе лә халыҡ йырҙарын оҫта итеп башҡара, бер үк ваҡытта, төрлө осор композиторҙары йырҙары менән дә тамашасы күңелен арбай. Урал Ниғмәтуллиндың халҡыбыҙҙың мәҙәни донъяһын киң яҡтыртыуға, уны пропагандалауға, киләсәк быуын өсөн һаҡлауға арналған үҙ алдына ҡуйған бурыстары ла күп. Ә беҙ биргән өс һорау рухи тормошобоҙға тос өлөш индергән журналистың, ижадсының күңел донъяһына нығыраҡ үтеп инергә ярҙам итер.**

# ҠУРАЙ ТУРАҺЫНДА...

## һөйләмәү мөмкин түгел



**▸ Урал, сәнғәт өлкәһен һайлағанда ҙур сәхнәгә сығыу тураһында хыял иткәнһеңдер бит, ләкин журналист хеҙмәтенә тогроһоң һәм эшеңдә тап ошо өлкәне киң яҡтыртаһың. Сәнғәткә һөйөү ҡасан уянды?**

- Беҙҙең ғаиләлә инәйем Нурия Фәйзрахман ҡыҙы, атайым Миңлебай Сөнәғәт улы Ниғмәтуллиндар - икеһе лә йырға маһирҙар. Ғөмүмән, нәҫелдә ике яҡлап та һәләтле, матур тауышлы йырсылар күп. Мин бала саҡтан Ханнан бабайымдың, Хәлиҙә, Мәүә, Ғәйшә әбейемдәрҙең, Зөфәр, Хәбир ағайымдарҙың башҡарыуында оҙон көйҙәрҙе, композиторҙарыбыҙ әҫәрҙәрен, шулай уҡ нәҫел йырҙарын да тыңлап үҫтем. Шуға ла йыр миңә кескенәнән һулар һауа кеүек ине. Радионан иртәнге концерттарҙы, спектаклдәрҙе тыңлайым. Концерт, йә спектакль башланһа, донъямды онотам. Шулай йырсы булырға тигән хыялым бөрөләнгәндер. Әммә тәүҙә водителгә уҡып сыҡтым. Унан йырға булған һөйөү барыбер мине Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу училищеһына алып килде. Хорға дирижерлыҡ итеү бүлеген тамамланым. Шунан Ғафури район мәҙәниәт йортона эшкә ҡайттым.

Мәҙәниәт хеҙмәткәре бар йәһәттән дә оҫта булырға тейеш. Кәрәк икән, йырсы, театр артисы, бейеүсе, музыкант та булаһың, агитбригадала сығыш яһайһың... Ул осорҙа коллектив менән Силәбе, Ырымбур, Пермь, Свердловск, Һамар, Һарытау өлкәләрендә сығыштар яһарға, смотрҙарҙа, һабантуйҙарҙа ҡатнашырға насип булды. Мәҙәниәт һарайында коллектив төрлө, шуға ир-егеттәр, ҡатын-ҡыҙҙар, хор менән дә эшләнелде. Беҙҙең уңыштарҙы телевидениеға ла төшөрөп, зәңгәр экрандарҙан күрһәттелер. Шулай уҡ яңылыҡҡа ынтылыу миндә көслө ине. Артабан белем алыу теләге мине БДУ-ның филология факультетына алып килде. Уны уңышлы тамамлап, Радио-2-лә музыка мөхәррире булып эшкә килдем. Шунан "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының төп каналына эшкә саҡырҙылар. Бер ни тиклем ваҡыттан "Ашҡаҙар" радиоһы асылды. Бына хәҙер 31 йыл халҡыбыҙға хеҙмәт итәм, тип ғорурлыҡ менән әйтәм. Журналист эше бик мауыҡтырғыс, ҡыҙыҡлы һәм үҙенсәлекле бит ул. Сөнки һин яңынан-яңы кешеләр, оло шәхестәр, сәнғәт, мәҙәниәт, әҙәбиәт өлкәһенә ғүмерҙәрен бағышлаған илһам эйәләре менән осрашаһың, хатта дуҫлашаһың һәм уларҙың эҙмышы, талымһыҙ хеҙмәте һине лә илһамландыра, тәрбиәләй, рухи яҡтан байыта.

**▸ Ҡурайҙың башҡорт халҡы тормошонда ролен, тоткан урынын радиола һинән дә тәрәнерәк яҡтыртҡан журналист юҡ. Халҡыбыҙҙың рухи асылын күрһәтеп, бик күп талантлы ҡурайсылар менән таныштыра килдәһең. Ҡурай һәм милләт эҙмышы айырылғыһыҙ бәйләнгән. Был проект нисек тыуҙы?**

- "Ҡурай иле" тапшырыуы ҡурайсылар менән күп йылдар аралашыу, ҡурайыбыҙға, ҡурай сәнғәтенә, ҡурайсыларға булған оло ихтирам һөҙөмтәһендә тыуҙы. Минең үҙемә иһә ҡурай бала саҡтан таныш, бесәнгә барған саҡта ҡурай көпшәһен ҡырҡып алып, тишектәрен уйып, һыҙғыртырға өйрәндем.

Беҙҙең ауылда борон-борондан ҡурайсылар күп булды. Йәнмырҙа тигән бабайҙы, үҙенсәлекле талант эйәһе ине, тип иҫкә алам. Башҡорт кавалерия дивизияһында һуғышҡан бик ҡыҙыҡ бабай булды ул. Балалар уны күрһәләр, һәр саҡ уратып алалар ине. Бабай бармағын ауыҙына тыға ла, төрлө көйҙәр сығара торғайны. Кавалерист булғас, 9 майға мәктәпкә саҡыра торғайныҡ уны. Хәтирәләр һөйләй ҙә, шунан өҫтәлдә нимә ята, ручкамы, кәләмме, ауыҙына ҡуя ла иҫ китмәле итеп көй сығара башлай. Беҙ балаларға ҡыҙыҡ, эргәһенә барып уратып алабыҙ, етмәһә, Йәнмырҙа бабай үҙе шаян була торғайны. Шырмый бабай, тип йөрөттөк. Йыр-моң ҡурай донъяһынан айырылмаған кешенең бына шуға ла тап ошо йүнәлештә тапшырыуҙар алып барыуы аңлашыла торғандыр.

Унан, тағы бер мәсьәләгә битараф ҡала алманым. Икенсе халыҡтар араһында беҙҙең ҡурайҙы үҙләштерергә тырышыусылар табылды. Йән әсеп, шунан бигерәк ҡабынып киттем. Балтырғандан көпшә эшләп, "ҡурай ошо була" тип хәбәр һөйләүселәре булды араларында. Сәмгә тейҙе. Мин һәр ваҡыт ҡурайсыларҙың байрамына йөрөнөм. Өфөлә үтһенме, Октябрьскийҙамы, Йылайырҙамы, Хәйбуллаламы, был ҙур сараны ҡалдырғаным булманы. Балаларҙан алып, олоһона тиклем, һәр бер ҡурайсы менән танышып бөттөм. Һәр береһенән радио өсөн интервью алдым. Бына шулай тыуҙы инде ҡурайға арналған тапшырыу кәрәк, тигән идея. Тик нимә тип асырға, исеме нисек булырға тейеш ул тапшырыуҙың? Бының буйынса ла байтаҡ баш ватырға тура килде. Ахыр, "Ҡурай иле" тигән исемгә туҡталдым. Иң тәүге ҡунағым данлыҡлы ҡурайсы, Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы Азат Айытҡолов булды. Уның менән беҙ университетта бергә уҡыныҡ.

Ҡурай тураһында һөйләмәү мөмкин түгел. Халҡыбыҙҙың йылъяҙмаһын ҡурай менән ҡурайсы беҙгә килтереп еткергән бит. Моңдарыбыҙ ҙа ҡурай гармонияһына көйләнгән, йәғни, йырҙарыбыҙ нигеҙендә ҡурай моңо ята, тип әйтергә итәм. Ә беҙҙең бөйөк ҡурайсыларыбыҙ тураһында сәғәттәр буйы һөйләргә була. Ҡурайҙы рәсми, профессиональ ҙур сәхнәгә бөтә донъяға алып сыҡҡан Йомабай Иҫәнбаев үҙе генә ни тора! Ә былай уға тиклем Берлинда ла, Парижда ла башҡорттар ҡурай уйнап йөрөгән, әлбиттә. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорттар Парижға ҡурай уйнап барып ингәндәр. Бына ниндәй аҡыллы, бәҫле, абруйлы булған беҙҙең ата-бабалар. Милли тойғо, милли дәрәжә уларҙа иҫ китмәле булған, аңлап бөтөрлөк тә түгел хатта. Гетеға уҡ-ян бүләк иткәндәр бит инде осрашҡан саҡтарында. Мин ҡурай ҙа бүләк итеп киткәндәрҙер тип уйлайым. Улар Гетеға ла ҡурай уйнап ишеттергәндәр бит инде. Сәпкә лә атып ҡарағандар уҡ менән. Уйлап ҡараһаң, башҡорттоң батырлығы иҫ киткес инде. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Мәғәфүр ағай Хисмәтуллин әйтмешләй, башҡортомдан да шәп йырлаған халыҡ юҡ. Ул үҙе Мәскәү консерваторияһын бөткән, башҡа халыҡтарҙың да моңон ишетеп йөрөгән. Ә башҡорт моңон шулай ҙурланы.

Үҙемдең тапшырыуымда данлыҡлы быуын ҡурайсыларҙың барыһы менән дә эшләнем мин. Ҡурайсылар, ғөмүмән, бик төплө һәм бай фекерле кешеләр. Азат ағай Айытҡолов, Юлай ағай Ғәйнетдинов менән һөйләшеп китһәң, әллә күпме мәғлүмәт алырға була. Бигерәк тә Юлай ағайҙы мин "энциклопедия" тип атайым. Бер заман: "Ҡайҙан шул хәтлем мәғлүмәтте иҫегеҙҙә тотаһығыҙ?" - тип һораным да. Ҡурайсылар байрамында осрашабыҙ бит, ул ҡурайсылар өсөн тотош мәктәп ойоштора. Юлай ағай - ҡурайсыларҙың уҡытыусыһы. Ҡурайҙың сафлығын һаҡлаусы бит ул. Мин уның менән өс "Ҡурай иле" эшләнем. Барыбер һөйләшеп бөтөп булманы.

Ҡурай моңонда башҡорттоң йөрәк тибеше, күңел һыҡтауы, йән ауазы, бөйөклөгө сағыла. Ҡурай - ул башҡорттоң ҡан хәтерен уятыусы могжизәле уйын ҡоралы. Урал, башҡорт, ҡурай - айырыламаҫлыҡ төшөнсәләр. Ҡурайсы - ул башҡорттоң әлмисаҡтан килгән тарихын, моңон, боронғоһон бөгөнгөгә, бөгөнгөһөн киләсәккә бәйләүсе үҙ өҫтөнә ҙур яуаплылыҡ алған зат.

**▸ Бөгөнгө сәнғәттең үҫешен нисек баһалайһың? Ниндәй шатлыҡтар һәм көйөнөстәр менән йәшәйһең?**

- Оло быуын композиторҙары: Ғ. Әлмөхәмәтов, З. Исмәғилов, Х. Әхмәтов, Р. Мортазин, Х. Заимов, Х. Ибраһимов, Т. Кәримов, Р. Сәлмәнов, К. Рәхимов, М. Вәлиев, унан килә урта быуын: Ш. Ҡолбарисов, Р. Хәсәнов, Р. Ғәзизов, С. Низаметдинов, А. Ҡобағошов, А. Кәримов, А. Ғабдрахманов, Т. Шәрипов, Н. Дауытов, Д. Хәсәншин, А. Кукубаев, Н. Инякин, Р. Йыһанов, Р. Сәхәүетдинова, әлеге быуын вәкилдәре И. Яхин, У. Иҙелбаев, А. Аҙнағолов, А. Хәсәншин, А. Ғайсин, Ш. Сәғитова, У. Мөхәмәтйәнов һ.б. бөгөнгө көндә башҡорт музыка мәҙәниәте үҫешенә үҙ өлөшөн индереп, сәнғәтебеҙгә талымһыҙ хеҙмәт итеүселәр. Уларҙың музыкаһы, йыр-көйҙәре аша беҙҙе таныйҙар, беләләр. Айырыуса, был йәһәттән өлкән, урта быуын композиторҙарының хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ ҙур. Уларҙың һәр ҡайһыһының яҙыу стиле, үҙ йөҙө, бай, йөкмәткеле, ҡабатланмаҫ ижады бар. Уларҙы онотгормаҫҡа, йәштәребеҙгә уларҙан өлгө алып эшләргә лә эшләргә кәрәк, тигәндә гел тыҡҡып, иҫкәртеп, тәҙәтеп торорға кәрәк. Ошо мәсьәлә, йәғни, быуындар күсәгилешлеге булырмы, тигән һорау, әлбиттә, мине борсой. Эйе, һәр быуын музыкала, сәнғәттә үҙ йүнәлешен, стилен, колоритын булдыра, үҙенең генә эҙен ҡалдыра. Заманына ҡарап, уның музыкаһы йә сағыу, тулы һыулы, йә һайығыу кисергән йылға кеүек була. Һәр хәлдә лә, башҡорт моңо дарьяһы һис һайыҡмаһын ине инде.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

✓ *Эшмәкәрлектә гел уң ҡулына мөрәжәғәт иткән бала йырға, һүрәт төшөрөүгә ылыҡмай. Хыялға бирелеү, ҡуҙаллау ҡеүәһен юғалта. Тик үҙен генә яратыусан, үҙ һүҙле, шәхси файҙаһын ғына ҡайғыртҡан кеше булып китергә лә мөмкин.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҮЛӘНДӘ - ЯЛАНАЯҠ

■ Кеше һәр ваҡыт оҙаҡ йәшәргә, сәләмәт булырға хыяллана. Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк, ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй. Ғалимдар бигерәк тә йәйәү йөрөргә кәңәш итә. Йәйләп ҡына атлап йөрөһәң, йөрәк ауыртмай, тиҙәр улар. Йәйәү йөрөргә яратҡан кеше артыҡ ауырлыҡ менән дә яфаланмаҫ, уның үҙәк нервы системаһы ла ныҡ булыр. Тәүҙә 350-500 метрҙы йәйәү үтеп ҡарағыҙ, аҙаҡтан иһә тиҙлекте лә, арауыҡты ла арттырырға мөмкин. Йәй көнө ысыҡ төшкән үләндә ялан аяҡ йөрөү файҙалы, ул организмды ныҒыта.

■ Ғалимдар еңел генә ябығыу юлын уйлап тапҡан. Хәҙер әллә ниндәй күнегеүҙәр эшләп организмды ыҙалатыу ҙа, диеталарҙа ултырыу ҙа кәрәкмәй. Май күҙәнәктәрен эстән генетик яҡтан үҙгәртеп, хатта йоҡлағанда ла ябығып буласаҡ, ти ғалимдар. Тикшеренеүҙәр лаборатор сысҡандарҙа үткәрелгән. Май күҙәнәктәренең генын үҙгәртеп, ғалимдар метаболизмды тиҙәйтә алған, һөҙөмтәлә артыҡ майҙар үҙенән-үҙе яныл бөткән. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе буйынса, сысҡандар ашауҙы сикләмәй генә үҙ ауырлығының яртыһын юғалтҡан. Тән ауырлығына физик әүҙемлектең булыуы йәки булмауы ла йоғонто яһамаған. Сысҡандар көнө-төнө ябыҡҡан, сөнки уларҙың метаболизмы энергия йыйыу режимынан уны таратыуға күскән. Ғалимдар билдәләүенсә, был процесс кешеләрҙә лә шулай уҡ уңыш менән барасаҡ. "HealthDay" мәғлүмәттәре буйынса, әлеге мәлдә донъяла һимереү менән 500 миллиондан ашыу кеше яфалана.

■ Тестостерон һәм кортизол гормондары артыҡ күп булһа, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән алдаша башлай. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан 117 кеше математик тест эшләп, уны үҙаллы тикшереп, һөҙөмтәһен ғалимдарға еткерергә тейеш булған. Дөрөҫ сиселгән мәсьәләләр аҡсалата бүләк менән билдәләнгән. Ғалимдар кешенең гормональ фоны менән алдашыуға һәләте араһында бәйләнеш булыуы йәки булмауы тураһында белергә теләп, анализдар ҙа алған. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, кемдәр үҙенең уңышын артырып әйткән, уларҙа кортизол менән тестостерон кимәле юғарыраҡ булған. Ғалимдар раҫлауынса, кортизол стресс хәлдәрендә күберәк бүленеп сыға, йәғни кеше алдаша, һөҙөмтәлә стресс кисерә һәм уның кортизол кимәле лә күтәрелә. Ә тестостерон, киреһенсә, ҡурҡыу тойғоһон баҫа, йәғни кеше яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн алдашыуға бара һәм бының өсөн уға бер ниндәй ҙә яза булмаясағына ышана. Быға тиклем окситоцин - "мөхәббәт гормоны" тураһында асыштар булғайны. Баҡтиһән, алкоголь организмға окситоцин кеүек йоғонто яһай икән, шуға ла алкоголле эсемлектәрҙе һөйөүгә мохтаж булыусылар күберәк ҡулланa, тип раҫларға ла мөмкин.

ӨЛГӨЛӨ ТӘЖРИБӘ

# УҠЫТЫУСЫ - МИЛЛӘТЕН АЛҒА ӘЙҘӘҮСЕ



Көҙҙөң икенсе айында уҡыу бүлмәһенә мыҡты кәүҙәле ир килеп инде. Силәбелә сәнғәт институтын тамамлаған Әмир Әхмәт улы Әбүлханов музыка һәм Башҡортостан мәҙәниәте дәрестәрен үткәрергә теләк белдерҙе. Бергәләп эште нисек ойоштороу мәсьәләһен хәл иткәс, ул йыр һәм музыка дәрестәре бирә башланы. Синыфтың бөтә уҡыусыларын да хор дәрестәренә йәлеп итеү һөҙөмтәһендә йыр һәм музыка менән шөғөлләнеү аҙнаһына ике сәғәткә барып етте. Шул йылда тәрбиә эшен музыка көсөнә таянып тормошҡа ашырыу отошло булыр, тигән уй килгәйне башыма. Әммә дәресте пианинола уйнап үткәреүсе ҡатын-ҡыҙ уҡытыусылар күңеләмә ятманы. Ә Әмир Әхмәт улы иһә оҫта баянсы ғына түгел, һәүәҫкәр композитор ҙа булып сыҡты. Уның Мостай Кәрим һүҙҙәренә яҙылған "Ҡайт инде" исемле йырын балалар шундай яраттылар, уны хатта телевидение аша йырлап ишеттерҙеләр.

Тағы бер йылдан мәктәбебеҙҙә эшләүсе ир заттары тағы берәүгә артты. 21-се быуат башында телевидениела "Йома" тапшырыуын алып барған Йәркәй ағай Яҡшыдәүләтов ине ул. Уның менән яҡшы таныш инем, сөнки "Совет Башҡортостаны" гәзите редакцияһында бер заманда эшләнек. Урамда осрашҡанығыҙҙа уҡыусыларым менән гәрәп теле дәрестәре үткәреүен һораным. Хажи һүҙемдә йыҡманы: өҫтәлмә дәрестәр иҫәбенә аҙнаһына ике тапҡыр балаларға ошо фәндең нигеҙҙәрен өйрәтә башланы. Уҡыусыларым менән уртаҡ тел тапты, ысын күңелдән уҡытты Йәркәй Әнүәр улы. Башҡа дәрестәрҙә һәр ваҡыт һулдан уңға яҙырға күнеккән уҡыусылар өсөн кире йүнәлештә яҙыу бик ҡыҙыҡ тойолдо.

Уҡыу-тәрбиә эшенең планын төҙөүгә айырыуса ҙур иғтибар бирҙем. Хәбәр һөйләүгә, нотоҡ уҡыуға ҡоролған сараларҙан баш тартырға тырыштым. Класс сәғәттәренең темаһын билдәләгәндә, уҡыусыларҙың теләктәрен иҫәпкә алдым. Уҡыу йылы башланыу менән балаларға бер бит ҡағыҙ таратып бирҙем һәм ниндәй саралар үткәреүҙе тәҡдим итеүҙәрен һораным. Уйланыу өсөн аҙна-ун көн ваҡыт бирҙем. Дүшәмбе көндө шул ҡағыҙҙарҙы йыйып алып, иң ҡыҙыҡлыларын уҡып күрһәттем. Күңелгә оҡшаған тәҡдимдәрҙең һаны өс-дүрттән ашмай торғайны. Икенсе тапҡыр шул уҡ эште яңынан ҡуштым. Был юлы ата-әсәләре менән дә кәңәшләшергә саҡырҙым.

Һигеҙенсе синыфта уҡығанда, 2004/2005 уҡыу йылы башында, тәҡдим ителгән эштәрҙең иң оҡшағандарын килтереп китәм. "Нимә ул мөхәббәт" темаһына диспут", "8 "б" синыф уҡыусылары менән футбол ярышы үткәреү", "Мостай Кәримдең 85 йыллығына концерт әҙерләү", "Тыуған яҡты өйрәнеү музейына экскурсия". Уҡыу йылы, гәҙәттә, утыҙ-утыҙ бер аҙна дауам итә. Тәҡдим ителгән сараларға үҙемдекеләрҙе ҡушып, йыллыҡ план төҙөй торғайным.

* * *

Егерменсе быуаттың һуңғы яртыһында кешенең мейеһен өйрәнеү өлкәһендә ҙур асыштар яһалды. Башҡорт дәүләт педагогия институтының башҡорт, татар, урыҫ филологияһы факультеттарында эшләгән осорҙа талиптарҙы мейе өлкәһендәге эҙләнеүҙәрҙең һөҙөмтәләре менән таныштырыуға күп көс һалдым. Мәктәптәрҙә был асыштар тураһында белгән уҡытыусылар булманы, сөнки һуңғы яңылыҡтар менән иң беренсе булып ғалимдәр таныша, уларҙы үҙләштерә. Һөҙөмтәлә уҡытыу өсөн балалар менән эшләүсе һәр кеше мейенең төҙөлөшөн яҡшы белергә тейеш.

Һуңғы илле-алтмыш йыл эсендә эшләнгән асыштарҙың иң мөһимдәре менән таныштырып китһәм, яҙыҡ булмаҫ. Билдәле булыуынса, мейе ике ярымшарҙан тора. Уларҙы һөйәлле күпер тоташтырып тора. Кешенең кәүҙәһе менән мейеһе үҙенсәлекле бәйләнештә: ***һул яҡ ярымшар уң ҡул, уң аяҡ менән, уң яҡ ярымшар һул ҡул, һул аяҡ менән нервалар ярҙамында тоташҡан*** **(Һүрәтте ҡарағыҙ).**




Иң мөһим мәғлүмәт: *һәр ярымшар күпселек осраҡта үҙенә генә хас өлкә өсөн яуап бирә.*

Бына уларҙың урынлашыуы тәртибе.

*Һул ярымшар иғтибарҙы йүнәлтә:*
- *һүҙҙәргә,*
- *логикаға,*
- *һандарға,*
- *математикаға,*
- *эҙмә-эҙлеклелеккә, йәғни уҡытыуҙың белем биреү өлкәһенә.*

*Уң ярымшар ошо йүнәлештәр өсөн яуаплы:*
- *рифма,*
- *ритм,*
- *музыка,*
- *һүрәт төшөрөү,*
- *күҙ алдына килтереү, йәғни ижади эшмәкәрлек өсөн.*

Әлеге заманда кешелек белем биреүҙә, ғәмәлдә, мейенең тик һул ярымшарын ғына эшкә ҡуша. Һәр ун кешенең тик берәүһе генә уң ярымшарын үҫештереү бәхетенә эйә. Уларҙы "һулаҡайҙар" (левша) тип йөрөтәләр. Йыш ҡына уҡытыусылар ундайҙарҙы уң ҡул менән яҙырға, һүрәт төшөрөргә, тегергә һ.б. өйрәтергә тырыша. Әлбиттә, "һулаҡай"ҙарға яҙыу-һыҙыу эштәренең бер ни тиклемен уң ҡул менән башҡарыу отошло, сөнки мейенең һул ярымшарын да үҫештереү зарур.

Әммә бөтә балаларҙы ла көсләп уң ҡуллы итергә ынтылыу - ҙур хата. 144-се гимназияла эшләгәндә, атаһы ун ике йәштәге малайын уҡырға алыуымды һораны. Мин ризалаштым. Тәүге көндә үк шуға иғтибар иттем: яҙған ваҡытта бала нишләптер һул ҡулын гел пинжәгенең кеҫәһенә йәшерә. Сәбәбен һорағайным, ошондай яуап ишеттем: "Онотоп, һул ҡул менән яҙа башлаһам, уҡытыусым бармаҡтарыма күрһәтеү таяғы менән һуға торғайны. Шуға ҡулымды кеҫәгә тығып ултырам". Мин уға: "Ҡайһы ҡулың менән теләһәң, шуны менән яҙ. Тик үҙеңә уңайлы булһын", - тип кәңәш бирҙем. Бала ҡулын кеҫәһенә йәшереүҙән туҡтаны, әммә бер ай самаһы уң ҡулы менән яҙыуын дауам итте. Тәбиғәте талап иткәнлектән, аҙаҡ яҙыу-һыҙыу эштәрен тик һул ҡулы менән башҡарҙы.

Эшмәкәрлектә гел уң ҡулына мөрәжәғәт иткән бала йырға, һүрәт төшөрөүгә ылыҡмай. Хыялға бирелеү, ҡуҙаллау ҡеүәһен юғалта. Тик үҙен генә яратыусан, үҙ һүҙле, шәхси файҙаһын ғына ҡайғыртҡан кеше булып китергә лә мөмкин. Һәр шөғөлөн бер ҡулы менән генә башҡарырға күнеккән уҡыусы тиҙ арый, уның тойғолары һүрәнләнә. Кешеләр араһында күҙәтелгән яҡшы мөнәсәбәттәрҙе күрә белмәй, сәхнә әҫәрҙәренең тәрән йөкмәткеһенә төшөнә алмай. Һүгенеү, тупаҫлыҡ кеүек алама сифаттарҙы ла тиҙ үҙләштерә. Күңелен күтәреү маҡсатында хәмер менән мауығып китергә лә мөмкин.

Быға ҡаршы торорға мөмкин - уның юлы бик ауыр түгел. Үҙ тәжрибәмдә, үҙ тормошомда һынап ҡараным мин уны. ***Һулаҡай ҡул менән яҙыуҙы*** ғәмәлгә ашырыу аша өлгәшергә була ыңғай һөҙөмтәләргә. 144-се мәктәптә был ысулды ҡулланыуға 2-се класта күстем, сөнки тәүге уҡыу йылын уң ҡул менән яҙырға өйрәтеүгә бағышланым.

Үҙем һулаҡай ҡул менән яҙыуҙы 1986 йылда ғәмәлгә ашыра башланым. "Совет Башҡортостаны" гәзитендә эшләгән саҡта күп яҙырға тура килде миңә.

Төштән һуң арыған бармаҡтар яҙырға ризалашмай башланы. Шул саҡта, талап ителгән мәҡәләне ваҡытында әҙерләү маҡсатында һул ҡул менән яҙа башланым. Тәүге көндәрҙә ҡул тыңламай йөҙәтте, сөнки мейе: "Әйҙә, ҡәләмде текә тотайыҡ", "Бармаҡтар ҡағыҙ битенән алыҫыраҡ урынлашһын", - тигәнерәк бойороҡтар бирҙе. Яңы ысул менән яҙырға тотонғас, сәбәпһеҙ көлөү башланып киткеләне. Уң ҡул менән яҙған ваҡыттағы көлөүгә бөтөнләй оҡшаманы ул. Утыҙ йыл буйы йоҡлаған һул яҡ ярымшарымдың уяныуы хаҡында һөйләгәндер был көлөү.

Ошо мәсьәләне күтәреп сыҡҡан китаптар, мәҡәләләр менән танышып, кәңәштәрҙе үҙ тормошомда ҡулланып ҡарағандан һуң, ошондай һығымталарға килдем: а) ун биш минут һул ҡул менән яҙыу мейегә ҡырҡ-ҡырҡ биш минут тик ултырып ял итеүгә торошло ял бирә; б) кешенең хистәре нескәрә: ул һүрәт төшөрә башлай, ғүмерҙә шиғыр яҙмаған кеше тәүге әҫәрҙәрен яҙа; в) төҫлө төштәр күрә; г) юҡҡа-барға көйөргә, әрләшергә ғәҙәтләнгәндәр шул сифатарынан әкренләп арына; д) хәмер менән мауыҡҡандар, үҙҙәре лә көтмәгәндә, айыҡ тормошҡа күсә; е) ысулды ғәмәлгә ашырыусының иҫләүгә һәләте көсәйә.

Һулаҡай ҡул менән яҙыуҙың әһәмиәте шунда: ул уҡыусыларҙың психик яҡтан көйһөҙләнеүен һәм күп уҡып арыуын иҫкәртеүгә булышлыҡ итә. Үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ: 7-се, 8-се класҡа күскәндән һуң, йәғни үҫмер ҡорона еткәс, малайҙарҙың да, ҡыҙҙарҙың да холҡо танымаҫлыҡ булып үҙгәрә. Уҡыу ҡайғыһы икенсе урынға күсә, сөнки енси яҡтан үҫешеү осоронда тәүге һөйөү тойғоһона бирелә улар. Малайҙарҙың ҡайһылары әтәсләнә башлай - бер-береһе менән сәкәләшә, уҡытыусыларҙың талаптарына ҡолаҡ һалмай. Ата-әсәһе менән дә бәхәс ҡора ҡайһы берәүҙәре.

Бала саҡ менән хушлашыр алдынан йәш быуын, ҡайһы илдә генә йәшәмәһен, ниндәй генә милләттән булмаһын, ҙур ауырлыҡтар кисерә. Ошо киҫкен ваҡытта һулаҡай ҡул менән яҙыуҙың әһәмиәте айырыуса ҙур. Тәүге ике дәрестә был ысулға мөрәжәғәт итмәҫкә лә була, сөнки өйҙәренән балалар ял итеп киләләр. Өсөнсө, дүртенсе дәрестә - 7, бишенсе, алтынсы дәрестә 9-11 минут тирәһе һулаҡай ҡул менән яҙыуҙы тормошҡа ашырыу бик файҙалы. Кемдәр һулаҡай ҡуллы булып тыуған, улар, аңлайһығыҙҙыр, эшкә уң ҡулдарын егә (Мәҡәләгә битараф булмаған кешеләргә мотлаҡ яңы ысул менән яҙып ҡарарға тәҡдим итәм). Уҡыусыларым белә - дәфтәрҙе тикшергәндә уҡытыусы яҙмаларының матурлығын баһаламаясаҡ.

144-се башҡорт гимназияһында эшләгән дәүерҙә емешле уҡытыу методикаһын ҡуллана башланым. Уны, ***"бер-береңде уҡытыу ысулы"***, тип атаным. Тәнәфестә өс-дүрт баланың белемен тикшергәндән һуң, яҡшы әҙерләнеп килгәндәрен "уҡытыусы" итеп тәғәйенләнем. Дәрес башланыу менән, үҙемдән тыш, миңә ике-өс ярҙамсы килә. Улар баһа ғына ҡуймай, яҡшы әҙерләнеп килгәндәрен "уҡытыусы" итеп ҡуйырға тәҡдим индерә. Был ысул менән тикшергәндә, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә, йыш ҡына бөтә уҡыусыларҙың да әҙерлек кимәлен тикшереүгә өлгәшеп була. Балалар ошо рәүешле аралашҡанда, бер-береһен яҡшыраҡ аңлай башлай, йәмәғәт тормошонда ҡатнашыу тәжрибәһе туплай.

Үҙем уйлап сығарған *"бөтә кәүҙә ярҙамында иҫләү"* ысулын да йыш ҡулландым уҡытҡанда. Миҫал өсөн урыҫ телендә мөһим роль уйнаған ҡағиҙәне өйрәнеү тәжрибәһе менән таныштырып китмәксемен.

Бына уның йөкмәткеһе: *"Твердый разделительный знак пишется после приставок, оканчивающихся на согласную букву, перед буквами е, ё, ю, я"*. Балалар, ата-әсәләр генә түгел, хатта уҡытыусылар ҙа, иҫләү генә түгел, ошо ҡағиҙәне шунда уҡ аңлай алмай интегәләр. Дәрескә әҙерләнгәндә иң алда был ҡатмарлы ҡағиҙәне "тураҡланым", мейе менән генә түгел, хәрәкәттәр ярҙамында ла аңға һеңдереү юлдарын билдәләнем.

***Ятлар алдынан ҡағиҙәне өлөштәргә бүлеү***

| *Инеш һүҙ* | *Ъ пишется* |
|---|---|
| *1-се аҙым* | *после приставок, оканчивающихся* |
| *2-се аҙым* | *на согласную букву,* |
| *3-сө аҙым* | *перед буквами е, ё, ю, я.* |

Уҡыусыларҙы ҡағиҙә менән таныштырыуҙы ҙур майҙанлы урында үткәреү отошло. Балалар, бер-береһенән ярты метр алыҫлыҡта урынлашып ярымтүңәрәк яһай, ә уҡытыусы уртаға баҫа. Һәр кемдең ҡулында өҫтәге дүрт өлөшкә бүленгән ҡағиҙә. Уҡытыусы, урынында торған көйө, инеш һүҙҙе әйтә. Шунан "после приставок" тигән өлөштө әйтә лә, бер аҙым алға атлай. 2-се аҙымды эшләр алдынан тейешле һүҙҙәрҙе әйтеп ишеттерә. "Перед буквами е, ё, ю, я", тип әйткәндән һуң, 3-сө аҙымды яһай.

Балаларға иҫләүҙе еңелләштереү маҡсатында, уҡытыусы арҡаһы менән боролоп һәм шул өлөштәрҙе әйтеп, хәрәкәттәрҙе яңынан ҡабатлай. Тик шунан һуң ғына, ҡағыҙҙарына ҡарап, уҡыусылар үҙҙәре лә ҡағиҙәне өс аҙымға бүлеү юлы менән иҫләүгә күсә. Был күнегеүҙе ваҡыты-ваҡыты менән ҡабатлап тороу кәрәк. Ҡағиҙәне һеңдергәндән һуң, ошо һөйләмде әйтергә генә ҡала: *"Во всех остальных случаях в словах русского происхождения пишется ь знак".*

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәғариф өлкәһендә дүрт тиҫтә йылдан ашыу эшләп, тәжрибә туплағандан һуң, шундай һығымтаға килдем: уҡытыусы - милләтте ҡурсалаусы, яҡлаусы һәм уны алға әйҙәүсе. Халҡына хеҙмәт итергә теләгән егет һәм ҡыҙҙарға ошо абруйлы, әммә мәшәҡәтле һөнәрҙе һайларға тәҡдим итер инем.**

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ.**

**(Аҙағы. Башы 11-се һанда).**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Төйөт

**(Пеночка-весничка)**



Төйөттәр - бик ваҡ ҡына ҡош, ҡойроғо ҡырҡылған кеүек. Ҡашы асыҡ төҫтә, уның аҫты ҡара. Ата ҡош тышҡы ҡиәфәте менән инә ҡоштан айырылмай. Килейектәрҙән айырмаһы - иңкеү маңлайлы, шуға ла башы ослайып торған һымаҡ күренә. Ояһы ерҙә, урманда ҡыуаҡтарҙың аҫҡы яғына ла оя ҡора ала. Үләндән бәләкәй генә ҡыуыш ҡороп ҡуя. 3-8 йомортҡа һала, күпселек төрҙәренең йомортҡаһы ҡыҙғылт таптар менән ҡапланған.

Төйөт йәшкелт-һоро төҫтә, ҡашы һәм ҡорһағы һарғылт аҡ. Ҡанаттарында аҡ һыҙаттар юҡ. Ағас башына ҡунып һайрай. Йыры - бер үк ижектәрҙе ҡабатлауҙан ғибәрәт, кеше теленә күсергәндә, ул шулайыраҡ яңғырар ине: "твит-твит-твит-твит, тю-тю-тю-тю, виу-ви-ви-ви, ли-фью-фью-фью-тю". Йыры "виу" тигән ижеккә еткәнсе көсәйеп бара ла, шымыраҡ яңырай башлай. Тауышы бик матур, моңло. Яҙын иртә ҡайта. Һеҙ уны апрелдең икенсе яртыһында ишетә лә алаһығыҙ.

Урман ситтәрендә, яр буйындағы ҡыуаҡлыҡтарҙа, баҡсаларҙа йыш осрай. Ояһына мул итеп ҡаурый һәм йөн түшәй.

## Тәңкелдәк төйөт

**(Пеночка-теньковка)**



Ябай төйөткә оҡшаған, бары тик йәшкелт түгел, ә һорғолтораҡ. Бейек ағастарҙы ярата. Таулы урмандарҙа ла бар. Йылғалар буйындағы ағаслыҡтарҙы ла үҙ итә. Ояһы, ғәҙәттә, ерҙә. Йыры сағыу, бер көйгә һалып йырлана: "тәң-тяң-тюң...тр..тр...тәң-тиң", бер-бер артлы тупылдап тамған тамсы кеүек. Ҡайһы берҙә был "тәңкелдәү" нығ оҙаҡҡа һуҙыла. Тәңкелдәк төйөт яҙын ғына түгел, көҙөн дә дәртле һайрай. Республиканың төньяҡ-көнсығышында һәм Урал аръяғында тәңкелдәк төйөттөң көнсығыш төрө осрай, уны йырынан танып була.

## Йәшел төйөт

**(Зеленая пеночка)**



Кәүҙәһенең өҫкө яғы йәшел һоро, ҡорһағы һарғылт аҡ, ҡанатында бер аҡ һыҙат бар, ҡашы асыҡ төҫтә. Яҡтылыҡ яҡшы төшкән урманда көн итә. Ағастары ҡартайған урмандарҙа иһә урман ситендә осрай. Шулай уҡ бейек ағастар үҫкән парктарҙа ла бар. Бик етеҙ ҡош, бер ағас башынан икенсенә осоп ҡуныуынан уны танырға мөмкин. Ояһын түңгәктәрҙең ситенә, һөҙәк ерҙәргә ҡора, ул йәшел мүктән яһала, мул итеп йөн түшәлә. 5-6 йомортҡа һала, улар аҡ төҫтә. Йылы яҡтан һуң ҡайта һәм иртә китә (июндән август башына тиклем осратырға була). Яңғырауыҡлы итеп, ҡабалан "йырлай": "ти-пситю-пситю-пси-ти-ти-пси". Ҡысҡырыуы иһә шым ғына, "пии" йәки "пюль" тип ишетелә.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**

**(Дауамы бар).**

ҺОРАУ - ЯУАП

# КЕМ ДЕКЛАРАЦИЯ БИРӘ?

**Башҡортостан Республикаһында 2025 йылда күсемһеҙ милек һатҡан һалым түләүселәрҙең килемдәрен декларациялау буйынса декларация кампанияһы дауам итә.**

"2025 йылда фатир һатҡандарға декларация бирергә кәрәкме?" тип һораусылар бар. Әгәр күсемһеҙ милек объекты һалым түләүсе милкендә минималь сикке хужалыҡ итеү ваҡытынан артығыраҡ булһа, күсемһеҙ милек һатыуҙан алынған килем физик берәмек килеменә һалымдан азат ителә. Күсемһеҙ милек объектына хужалыҡ итеүҙең минималь сикке ваҡыты - 5 йыл. Ә инде 3 йыл күсемһеҙ милек объектына хужалыҡ итеүҙең минималь сикке ваҡыты тип иҫәпләнә, әгәр ҙә:

- объектҡа милекселек хоҡуғы ғаилә ағзаһынан (яҡын туғандарҙан) мираҫ тәртибендә (бүләк итеү килешеүе буйынса) алынған булһа;
- объектҡа милекселек хоҡуғы хосусилаштырыу һөҙөмтәһендә алынған булһа;
- объектҡа милекселек хоҡуғы рента түләүсегә милекте ғүмер буйына ҡарау менән тотоу килешеүе буйынса тапшырыу һөҙөмтәһендә алынған булһа;
- һатылған милек объекты (ир менән ҡатындың берлектәге милкен дә индереп) һалым түләүсе милкендәге берҙән-бер торлаҡ булһа, йәғни һатылған көнгә ҡарата башҡа төрлө торлаҡ бинаһы булмаған осраҡта.

Шуны хәтерҙә тотоу мөһим: һалым түләүсенең (уның ҡатыны йә иренең) һатҡан көндән алып 90 календарь көн эсендә алынған торлаҡ бинаһы берҙән-бер торлаҡ билдәләмәһенә индерелмәй.

Әгәр күсемһеҙ милеккә минималь сикке ваҡыттан кәмерәк осор хужалыҡ иткән осраҡта һалым түләүсе 2025 йылда алынған килеме хаҡында 2026 йылдың 30 апреленән дә ҡалмайынса килеме тураһында декларация бирергә бурыслы. Түләтеү өсөн иҫәпләнгән һалымды 2026 йылдың 15 июленә тиклем түләргә кәрәк. Декларация биреүҙе һәм һалым түләүҙе тәғәйенләнгән ваҡытынан һуңлатҡан өсөн штраф һәм пени рәүешендә яуаплылыҡ сараһы ҡаралған. Декларацияны Рәсәй Федераль һалым хеҙмәтенең "Физик берәмектәр өсөн шәхси кабинет" интеренет-сервисы аша биреү уңайлыраҡ.

Декларация һәм һалым түләү хаҡында ентеклерәк мәғлүмәттәр менән Рәсәй Федераль һалым хеҙмәте сайтының "Физик берәмектәр" ("Мине ҡыҙыҡһындыра"), "Килемдәр хаҡында декларация биреү" бүлектәрендә танышырға мөмкин.

БАҠСА

# НИСЕК СӘСӘҺЕҢ БИТ!



## Кишерҙе - ер йылынғас

**Кишер - баҡсасылар араһында иң билдәле культура. Был йәшелсә бик файҙалы, ул В, РР, С, Е, К витаминдарына бай, кишерҙәге каротин кеше организмында А витаминына әүерелә. Кишерҙәге бета-каротин үпкәләр эшмәкәрлеген, күреү һәләтен яҡшырта, теш ҡаҙналарын нығыта. Кишер сәсеүҙең бер ауырлығы ла юҡ, уны бар баҡсасылар ҙа бер төрлө сәсәлер, моғайын. Шулай ҙа түбәндәге кәңәштәрҙе лә ҡулланып ҡарағыҙ.**



● Кишерҙе ер йылынғас сәсәләр. Түтәл әҙер булғас, унда ҡоро орлоҡтарҙы сәсеп сығалар. Әммә был осраҡта кишер оҙаҡ шытасаҡ, тупраҡтағы дымдың етмәүе лә бар. Шуға ла, ғәҙәттә, кишер тәүге ямғырҙан һуң ғына сыға башлай. Әгәр ҙә орлоҡтарҙы еүешләп йәки шыттырып сәсһәгеҙ, түтәлгә шунда уҡ һыу һибергә кәрәк. Һыу һибеүҙе артабан да дауам итергә тура килер, сөнки тупраҡтың дымын тотмаһаң, шыттырылған орлоҡтар һәләк була.

● Баҡсала ҡар иреп, һыуҙар йыйыла башлағас та, кишер орлоғон еүешләп, туҡыма тоҡсайға һалып, кәрәк тәрәнлегендә соҡор ҡаҙып, шунда күмеп, өҫтөнә ҡар ташлап ҡуяһың. 10-12 көндән орлоҡтар шыта башлай. Уларҙы алып, ҡоро йылға ҡомо менән ҡатыштырып, түтәлгә һибеп сығаһың. Тупраҡты тығыҙландырыу өсөн өҫтөнә устар менән баҫҡылайһың һәм полиэтилен менән ябаһың. 5-6 көндән кишерегеҙ баш төртөп тә сығыр.

● Кишер орлоҡтарын редис орлоғо менән ҡушып болғатаһың, әҙерәк йылға ҡомо өҫтәйһең. Шуны түтәлгә сәсеп сығаһың. Был осраҡта кишер түтәлен һирәкләп сығырға кәрәкмәй, редис тиҙ өлгөргәнлектән, уны ашап торасаҡһығыҙ, үҫеп килгән кишерҙәргә урын да иркенәйә. Редис урынына шпинат, салат ҡулланырға була.

● Магазиндарҙа ҡоро гидрогель менән ҡапланған орлоҡтар һатыла. Уларҙы сәсеүе бик уңайлы, бураҙнаға берәмләп кенә төшөрәһең, яңылыш төшөп киткән осраҡта ла сағыу төҫтәге орлоҡтарҙы тиҙ генә йыйып алырға була. Был орлоҡтарҙа үҫентегә тәүге мәлдә кәрәк булған бөтөн матдәләр бар.

## Редис дым ярата...

**Редис - иртә өлгөрөүсе йәшелсәләрҙең береһе. Эре, тәмле, һутлы редис үҫтереүҙең тәүге шарты - дөрөҫ сорт һайлау.**

Ябай сорттарға ҡарағанда, гибридтар тиҙерәк өлгөрә, уларҙың уңышы ла яҡшы була. Бындай орлоҡтарҙың ҡабына F1 тигән билдә ҡуйыла. Шулай ҙа редистың башҡа сорттары ла насар түгел. Иртә уңыш алыу өсөн "Французский завтрак", "Заря", "Данар F1", "Кардинал F1" кеүек сорттарҙы һайлағыҙ. Улар сәскәндән һуң 16-23-сө көндә үк ашарға яраҡлы була. "Любава", "Хелро", "Кармен", "Меркадо" сорттары ла иртә өлгөрә. "Кармен" сорты татлы тәме менән дә айырылып тора, уны теплицаға сәсергә лә була.

Асыҡ һауала "Данко", "Маяк", "Белый клык", "Октава" сорттары яҡшы үҫә. "Октава" сорты аҡ төҫтә, тәмле лә, майланып тора, уны өҫтәлде биҙәү өсөн ҡулланырға мөмкин. Был сорттар һаҡлауға ла уңайлы.

Һуңыраҡ уңыш өсөн ике сортты ҡулланырға була: "Удача" сорты 18 см-ға еткән боҙбармаҡ формаһында, ә "Осенний гигант" сорты эре, аҡ төҫтәге уңышы менән ҡыуандыра. Был редистар баҙҙа ике айға тиклем һаҡлағанда ла, тәмен дә, һутын да юғалтмай.

Редис эре булһын өсөн уны йыш сәсергә ярамай. Аралары 5-6 см-ҙан кәм булмаһын. Был йәшелсә дым ярата, тупраҡ яҡынса 8-10 см тәрәнлектә еүеш булырға тейеш, юғиһә, редис әсе буласаҡ.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!



# ХӘҮЕФ УРАП ҮТҺЕН!

**Күптәр, көн дә был хәүеф тураһында ишетеп тә, мәғлүмәтте ҡолағына индермәй. Йәнәһе, был уға ҡағылмаясаҡ. Әммә бәлә аяҡ аҫтында, ә янғындың иһә "ялы ла, ҡойроғо ла" юҡ икәнен онотмайыҡ.**

Бына, мәҫәлән, Өфөнөң Купцов урамындағы 25 ҡатлы йортта янғын сыға. Асыҡланыуынса, ут балкондарҙың береһен ялмап алған була. Тиҙ килеп еткән янғын һүндереүселәр йортта йәшәүселәрҙе хәүефһеҙ урынға күсерә. Төтөн менән ҡапланған фатирҙан бер бала ҡотҡарыла. Бәләкәй малай өйҙә яңғыҙы була. Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы хеҙмәткәрҙәре уны махсус ҡотҡарыу ҡоролмаһы ярҙамында төшөрөп ала.

Башҡортостан Республикаһы буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының мәғлүмәт хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, йәнә биш кешене, шул иҫәптән ике баланы хәүефле зонаға Өфөнөң муниципаль янғын һағы янғын һүндереүселәре сығарған. 21 кеше янғын һүндереүселәр килгәнгә тиклем үҙаллы эвакуацияланған.

Ут менән көрәшселәрҙең оператив эше һөҙөмтәһендә, һәләк булыусылар һәм йәрәхәтләнеүселәр теркәлмәгән.

Белорет ҡалаһында шәхси йортто ялмап алған утты һүндергән саҡта 48 йәшлек ирҙең һәм 72 йәшлек ҡатындың йәнһеҙ кәүҙәһе табылған.

Нуриман районының Красный Ключ ауылында шәхси йортта сыҡҡан янғында иһә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, 1964 йылда тыуған ҡатын һәләк булған.

Стәрлетамаҡ районының Суртан ауылында янғын бүрәнә һарайҙа сыға. 64 квадрат метр майҙанды ялмап алған ут тиҙ арала һүндерелә. Зыян күргән 1956 йылғы ир дауаханаға оҙатылған.

Һәр осраҡта ла янғын сәбәптәрен Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының тәфтиш-оператив төркөмө асыҡлай.

**Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы кәңәш итә:**

- эшләп торған электр ҡоралмалдарҙы ҡарауһыҙ ҡалдырмағыҙ, электр селтәренә артыҡ көсөргәнеш төшөрмәгеҙ;
- ут янған мейесте ҡарауһыҙ ҡалдырмағыҙ;
- йортта янғын тураһында хәбәр итеүсе ҡорамал ҡуйығыҙ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 март "Ай тотолған төндә"** (М.Кәрим, А.Абушахманов), драма. 12+

**29 март "Фарман ханым"** (С. Әхмәт, У. Ҡарыпбаев), музыкаль комедия. 12+

**1 апрель "Кейәүҙәр"** (Х.Вәхит, Ф.Ғарипов), музыкаль комедия. 12+

**2 апрель "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, инсц. Ш. Ғилманова). 16+

### Милли йәштәр театры

**27 март "Рассказы Альфии"** (М. Кәрим, М.Күлбаев). 11:00. 6+

**27 март "Башҡорт туйы"** (М. Бурангулов, А. Йыһаншин), романтик драма. 6+

**28 март "Батыр йөрәк"** (Р. Хәкимов), әкиәт. 12:00. 0+

**28 март "Гарнир по-французски"** (М. Камолетти, А. Шрайнер), комедия. 18:00. 16+

**29 март "Аладдин"** (И. Казакова, Р. Хәкимов), мажаралы ваҡиға. 12:00. 6+

**29 март "Униженные"** (З. Биишева, М. Күлбаев), драма. 18:00. 12+

**31 март "Ғашиҡтар көнө"** (Н. Ғәйетбаев, Р. Хәкимов), музыкаль комедия. 16+

**1 апрель "Чиполлино"** (Д. Родари, Р. Хәкимов), мажаралар. 11:00. 6+

**1 апрель "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев, В. Виткович, М. Күлбаев), комедия. 19:00. 12+

**2 апрель "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский, Р. Хәкимов), мюзикл. 11:00. 0+

**2 апрель "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 16:00. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**27 март "Урал Батыр эҙҙәре буйлап",** интерактив квест. 12:00. 6+

**27 март "Коллекция смеха"** (О.Куценко). 19:00. 16+

**28 март "Царевна-Лягушка",** рус халыҡ әкиәте. 12:00 һәм 15:00. 0+

**28 март "Гуси-лебеди".** 14:00. 0+

**29 март "Почему весна красна?"** (В. Щербакова).11:00 һәм 14:00. 0+

**29 март "Царевна-Лягушка",** рус халыҡ әкиәте. 12:00 һәм 15:00. 0+

**1 апрель "Путь Победы"** (Д. Ғәрәева, К. Баязитова). 12:00. 6+

**1 апрель "Кукольная кухня"** (Н. Беззубова, А. Верхоземский), интерактив уйын-спектакль. 18:00. 0+

**2 апрель "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). 12:00. 0+

**2 апрель "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев). 19:00. 16+

### Башҡорт дәүләт филармонияһы

**28 март "Даланға - 25!"** юбилей концерты. 12+

**29 март "Стих в большом городе"** шиғриәт кисәһе. 12+

**31 март "Классика над Белой рекой"** VIII Бөтә Рәсәй камера музыкаһы фестивален ябыу. 12+

**2 апрель Павел Любимцевтың** юмор кисәһе. 16+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**27 март "Хазина"** (С. Әбүзәр), комедия. 12+

**28 март "Золушка"** (Ш.Перро), әкиәт. 0+

**31 март "Йәшәгән, ти..."** (Г. Хугаев), притча. 12+

**1 апрель "Голубцы"** (А.Финк), комедия. 16+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**27 март "Ятҡа бирер йәрем юҡ!"** (В. Красногоров), комедия. 16+

**28 март Фәдис Ғәниевтың** концерты. 6+

**29 март "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), комедия. 19:00. 12+

### Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**27 март "Алты ҡыҙға бер кейәү"** (Т. Миңнуллин), драмеди. 16+

**28 март "Әлдермештән Әлмәндәр"** (Т. Миңнуллин), моңһоу комедия. 12+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**27 март "Звездный дождь"** дискотекаһы. 6+

**30 март Рөстәм Әсәҙуллиндың** концерты. 6+

### БР Милли музейы

**27 март "Тарих көнө"** Бөтә донъя тарих көнөнә ҡарата лекция һәм экскурсиялар. 11:00 - 16:00. 12+

**28 март "Кейеҙ"** оҫталыҡ дәресе. 14:00. 6+

**28 март "Өләсәй һандығы серҙәре"** мәҙәни-ағартыу сараһы. 15:00. 0+

**31 март "Музей на кончиках пальцев"** эксклюзив белем биреү экскурсияһы. 11:00. 6+

✔ *Шуныһы ҡыҙғаныс, бөгөн сәнғәттә һәм әҙәбиәттә бәндә менән хайуан араһындағы айырмалыҡты бөтөрөү, уларҙы бер-береһенә яҡынайтыу маҡсатында күп эш башҡарыла.*



ЯҘЫУСЫ УЙЛАНДЫРА

# ДОНЪЯҒА ҠАЛЫПЛАШЫУ АУЫР...



**Оло юбилейы алдынан беҙ яҙыусы һәм публицист Гөлшат ӘХМӘТҠУЖИНАға үҙебеҙҙе ҡыҙыҡһындырған һорауҙар менән мөрәжәғәт иттек.**

**Һеҙ - ғүмерегеҙҙе әҙәбиәт һәм театр сәнғәтенә бағышлаған шәхес. Һеҙҙеңсә, театр һәм әҙәбиәттең тәғәйенләнеше ниҙә ул?**

- Һәр хәлдә, тормошто туранан-тура күсереп күрһәтеүҙә йә яҙыуҙа ғына түгел. Проза әҫәре лә, драматик сюжетҡа ҡоролған спектакль дә тормоштоң үҙенән алдараҡ барырға тейеш, минеңсә. Сөнки әҙәбиәт менән сәнғәт, мин бында сәнғәттең бөтә төрөн дә күҙ уңында тотам, тәү сиратта, тәрбиәүи әһәмиәткә эйә булырға, кешенең Шәхес бейеклегенә күтәрелеүенә хеҙмәт итергә тейеш. Юғиһә, беҙ бөгөн нимә күрәбеҙ? Илдә күп театрҙар кендектән түбән кимәлгә төштө. Был нимә, донъяла барған модалы үҙгәрештәргә бәйлеме, әллә ҡасандыр АҠШ-тың Үҙәк разведка идаралығы етәксеһе Даллестың беҙҙең илгә ҡаршы ҡорған программаһын аҫтыртын бойомға ашырыуымы? Күптәр Даллестың: "Рәсәйҙе тубыҡландырыу өсөн хатта бомба ла кәрәкмәй, бары тик бишектән башлап әҙәм балаһында иң түбән инстинкттар тәрбиәләү ҙә етә", - тигән һүҙҙәрен хәтерләйҙер. Ҡысҡырып әйтергә йәки күрһәтергә ярамаған әйберҙәр, табу һалынған төшөнсәләр бар. Беҙҙе, кешеләрҙе, хайуандар донъяһынан айырған бик мөһим билдә был. Шуныһы ҡыҙғаныс, бөгөн сәнғәттә һәм әҙәбиәттә бәндә менән хайуан араһындағы айырмалыҡты бөтөрөү, уларҙы бер-береһенә яҡынайтыу маҡсатында күп эш башҡарыла. Ошонан сығып, шуны тағы бер ҡабатлағы килә: сәнғәт тә, әҙәбиәт тә ҡоро һүрәтләү өсөн түгел, ә Шәхес тәрбиәләү өсөн тәғәйенләнә.

**Гөлшат апай, Һеҙ яҙған әҫәрҙәрҙә күргән төштәрегеҙҙән алынған мәлдәр бармы?**

- Аҙ түгел, сөнки мин күбеһенсә сюжетлы төштәр күрәм. Ошоға бәйле бер хәлде хәтерләгем килә. Йәш саҡта төшөмә гел яу яланы керә торғайны. Ундағы ваҡиғаларҙа мин дошманға ҡаршы һуғышҡан яугир ҙа, әсиргә төшкән һалдат та, тағы әллә ниндәй ҡатмарлы яҙмышлы кеше булып та ҡатнаша инем. Төш сюжеттарынан ғына торған проза йыйынтығы ла әҙерләгәйнем. Ул саҡта миңә ни бары егерме ике йәш ине. Йыйынтыҡты проза секцияһында тикшереүҙә күренекле яҙыусылар Фәрит Исәнғолов, Ғәли Ибраһимов, Йыһат Солтанов, Муса Ғәли һәм башҡалар ҡатнашты. Бик күп хуплау һүҙҙәре, кәңәштәр ишетеү бәхете тейҙе. Хәтеремдә, Ғәли ағай Ибраһимов: "Мин үҙем һуғышты яҡындан күргән кешемен. Ошоғаса һуғыш тураһында хаҡдөрөҫтө яҙған йәки фильмда күрһәткән авторҙарҙы, ниңәлер, осратманым, ә һуғышты тик китап йә кино аша ғына белгән баланың ысын дөрөҫлөктө яҙыуы ғәжәпләндерҙе. Был хикәйәләр һәм повесть мотлаҡ китап булып сығырға тейеш",- тигәйне. Уның фекерен башҡа ағайҙар ҙа хуплап ҡаршыланы. Минең өсөн был бик юғары баһа, ҡыуаныс булды. Ләкин йыйынтыҡтың артабанғы яҙмышы үҙемдең ғәмһеҙлегем, артыҡ ышаныусан булыуым сәбәпле юҡҡа сыҡты: мин 4-5 дана баҫтырылған әҫәрҙәремдең һис юғы бер данаһын да үҙемдә ҡалдырмағанмын. Ул саҡта Союзда эшләгән билдәле генә яҙыусы: "Әлегә миндә торһон, бер килгәнеңдә тотош үҙеңә ҡайтарырмын", - тигәс, ышанып, ҡайтып киткәнмен. Ә һуңынан миңә бер данаһы ла әйләнеп ҡайтманы. Иң ғәжәбе шул булды: үҙемдәге ҡулъяҙма ла ҡайҙалыр юғалды. Хикәйәләремде ҡайтанан яңыртырға ваҡытым да, әмәлем дә булмағандыр, төш күргәндән һуң тыуған тәьҫораттар, уй-фекерҙәр тоноҡлана барып онотолоп бөттө.

**Һеҙ үҙегеҙҙең шиғыр кисәһендә: "Мин үҙемде бигүк һәйбәт кеше тип иҫәпләмәйем", - тинегеҙ. Ул кисәлә Һеҙҙе яҡын күргән, әҫәрҙәрегеҙҙе яратҡан кешеләр йыйылғайны. Шуға күрә әйткәндәрегеҙ күптәрҙе аптыратты, буғай. Ни өсөн үҙегеҙгә улай түбән баһа бирҙегеҙ, Гөлшат апай?**

- Беренсенән, бөтә яҡлап та һәйбәт кеше булмай. Һәр кемдә ағы ла, ҡараһы ла бергә уҡмашып килә. Бер үк ситуацияла, бер үк кешенең үҙен төрлөсә тотоуы ла ихтимал. Унан, беҙҙең холоҡ-фиғелебеҙгә йәмғиәттә барған хәл-ваҡиғалар ҙа, йәмәғәтселек тә, аралашҡан кешеләр ҙә йоғонто яһамай ҡалмай. Һәр кемебеҙ яңылыша, йә булмаһа, берәүгә эшләгән яҡшылығыбыҙ икенсегә зыян килтерә, һәм башҡалар, һәм башҡалар. Тормош иҫ китмәле ҡатмарлы, үҙ-ара мөнәсәбәттәр аҡылға һыйғыһыҙ буталсыҡ, ҡатҡыл принциптар ҡыҫымында ғына йәшәү мөмкин дә түгел кеүек. Әйткәндәй, үтә принципиаль, дөрөҫ кешеләр күберәк ҡаты бәғерле була.

Ә мин үҙем хаҡында ни өсөн улай тинем һуң? Беренсенән, һис ҡасан кемгәлер ярарға, сит-ят ҡурайға бейергә тырышманым. Хатта етәкселәргә буйһоноу ҙа миңә бик ауыр ине. Үҙемсә йәшәнем. Һәм мине бер ваҡытта ла йәмәғәтселек фекере, йәғни минең тура-ла кемдең нисек уйлауы ҡыҙыҡһындырманы. Күңелем дә, йәшәйешем дә ҡалыптарға һыйманы. Үҙем нисек дөрөҫ тип табам - шулай хәл иттем. Әлбиттә, бынан башҡалар түгел, күберәк үҙем зыян күрҙем. Икенсенән, донъяуи мәсьәләләрҙә лә башҡалар кеүек уйлай, хәл итә белмәйем, сөнки минең үҙ дөрөҫлөгөм.

Әңгәмәне әллә күпмегә һуҙырға мөмкин, һығымта яһап, шуны ғына әйтә алам: үҙ һүҙлемен, еңмешмен, бәғзе мәл ҡатҡылмын йә тәкәббермендер ҙә, әммә ике йөҙлөлөк, ялағайлыҡ, ошаҡ йөрөтөү, кемгәлер ҡарата боҙоҡлоҡ ҡылыу - миңә ят сифаттар. Алдаша һәм урлаша ла белмәйем. Абау, ыңғай яҡтарым да байтаҡ икән дә. Хәйер, бөгөн мин күрә алмаған һыҙаттар йәмғиәттә бик юғары баһалана. Ҡабул ителгән ҡалыптарға һыймағас... бигүк һәйбәт түгелмендер инде...

**Рәшиҙә РӘИС әңгәмәләште.**

ТЕЛҺӨЙӘР

# ӘҪБЕНӘН ӘҪПЕ ҠАЛҠМАҺЫН!

**Һатыуҙағы химик өҫтәмә ҡушылған ризыҡтан әҫпе ҡалҡыуы ихтимал. Элек әҫпене өләсәйем шәп әҫбәтләй ине, тип һөйләне берәү. Әҫпе, әҫбәтләү - был һүҙҙәрҙе хәҙер ҡулланыусылар һирәк, күптәр аңлап та етмәй. Тәүге төшөнсәһен дә, телмәрҙе йәнләндерер ҡеүәтен дә юғалтмаған шундай һүҙҙәр бихисап.**

**Әҫпе.** Күп мәғәнәле һүҙ. **1-сеһе -** килешмәгән нәмә ашаған йәки эскәндән тәнгә сыҡҡан сәсәк, сабыртҡы. Диатез. *Тәнде әҫпе баҫыу. Әҫпе ҡалҡҡанда, тән яныуы бар*; **2-сенән,** "әҫпе" шәкәр ауырыуын да белдерә. *Әҫпеһе булған кеше татлы нәмәне самалап ашай";* **3-сөнән,** ҡыҙылса ауырыуын "әҫпе" тип тә йөрөтөү осрай. *Әҫпе - йоғошло сир. Кеше әҫпене, ғәҙәттә, бала сағында үткәрә.*

**Әҫбәтләү.** "Әҫбәтләү" - ул им-том, халыҡ медицинаһы менән дауалау. *Әҫбәтләүгә әүәҫ кеше. Дегәнәк әҫбәтләүҙә киң ҡулланыла.*

**Әҫмар.** "Әҫмар"ҙың бер мәғәнәһе - емештәр. *Әҫмарға бай баҡса. Миләш, балан әҫмары көҙөн өлгөрә. Картуфтың "картуф алмаһы" тип йөрөтөлгән әҫмары бик ағыулы, ашарға яраҡһыҙ.* "Әҫмар" һүҙе "һөҙөмтәләр" тигән күсмә мәғәнәгә лә эйә. *Тос әҫмар. Мәғарифтағы үҙгәрештәр кире әҫмарын да күрһәтте.*

**Әҫбе.** Ҡырҙа үҫкән аҡ сәскәле, тәмле ҡыҙыл емешле үҫемлек. Ер еләге. Клубника. *Әҫбе йыйыу. Күнәктәр хуш еҫле әҫбе менән тулды.*

**Шулай итеп, был һүҙҙәрҙе хәтергә һеңдереү яҡшы әҫмарын күрһәтер.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АҠМАҠЛЫҠ...
## аҡылды айырып күрһәтеү өсөн йәшәй

Ҡәйнәмә килдем - михнәт күрҙем; ҡәйнә булдым - михнәт бирҙем.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Мин аҙ һанлы халыҡтарҙы яратам. Мин бәләкәй һандарҙы яратам. Донъя ана шул аҙҙар менән ҡотҡарыласаҡ.

**(Андре Жид).**

Күрә алмаһалар, алмаһындар, тик ҡурҡһындар ғына.

**(Каин).**

Кәрәкмәгән нәмә гел ҡыйбат тора.

**(Катон).**

Автор китаптың яртыһын ғына яҙа: ҡалған яртыһын уҡыусы үҙе тултырып ҡуя.

**(Джозеф Конрад).**

Гонаһ ҡылырға теләмәү һәм белмәү араһында айырма ҙур.

**(Мишель Монтень).**

Йөҙ мең ҡоралға ҡарағанда, мин өс бөртөк гәзиттән нығыраҡ ҡурҡам.

**(Наполеон I).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡыл эйәһе һәм аҡылға зәғиф кеше йәшәгән. Аҡыл эйәһе эргәһенә уның аҡыллы телмәрен тыңларға, кәңәш һорарға халыҡ ағылған да ағылған, ә аҡылһыҙҙы барыһы ла урап үткән. Аҡылһыҙҙы көнсөллөк яфалаған, ни эшләргә белмәй, үрле-ҡырлы һикергән. Бер көндө ул аҡыл эйәһе эргәһенә барып, уның һөйләгәндәрен тыңларға, унан ишеткәндәрен лайыҡлы баһаларға ҡарар иткән. Халыҡ араһына барып ултырған, аҡыл эйәһен тыңлаған-тыңлаған, тыңлаған- тыңлаған, ләкин бер ни ҙә аңламаған. Урамға сыҡҡас, йыйылып торған халыҡҡа былай тип хәбәр һалған:**

**- Үҙен аҡыллы тип иҫәпләгән был кеше һау түгел, һау кеше быңдай һүҙҙәр һөйләмәҫ. Уның аҡылынан баш ауырта, мейе ҡабара. Ҡурҡығыҙ, ҡурҡығыҙ унан! Уны тыңлаһағыҙ, минең көнгә ҡалырһығыҙ. Был кешенең аҡыллы телмәренән мәңгелеккә иҫәргә әйләнәләр...**

**Урамда торған халыҡтың ошо аҡылға зәғиф кеше һымаҡтары һәм һуңғы аҡылын да юғалтыуҙан ҡурҡҡандары был йорт эргәһенән тайыу яғын ҡарай. Ә аҡыл эйәһенең һүҙҙәренән күңел яҡтыра тип иҫәпләгәндәре тороп ҡала..**

**Ахмаҡлыҡ аҡылды тағы ла нығыраҡ айырып күрһәтеү, аҡылһыҙлыҡ ҡараңғылығында тағы ла балҡыбыраҡ яҡтырыу өсөн йәшәй ҙә инде..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Рәсүл БАЙГИЛДИН,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
"Башҡортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды.
Тел.: 8 (347) 226-99-48.
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты - 26.03.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 26.03.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
Баҫылып сыҡты - 27.03.2026 й.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 2677
Заказ - 534

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.